ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 июль (майай) 2021

№30 (968)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ырыуыбыҙ дыуан - табындарға туған



7

Сираттағы яулар үре -



Башҡорт теленең этимологик һүҙлеге 8-9

Уҡыған ил уңыр



10

Көйөргәҙелә - бер ғүмер




12-13,16

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Фольклориада ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы, уның әһәмиәте низә тип уйлайһығыҙ?

***Мөнир ҠУНАФИН, яҙыусы, журналист, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Фольклориада тураһында бер нисә фекер әйтмәксемен. Дөрөҫөрәге, үҙебеҙ тураһында ошо оло тамашанан һуң тыуған бер фекер. Һүҙ ҙә юҡ, башҡорт мәмләкәтен бар донъяға данлы, затлы итте был сара. Лайыҡлы күтәрә алдыҡ был йөктө. Ҡунаҡ ҡаршылау, ҡунаҡ күрһәтеү, ҡунаҡ оҙатыуҙан да оло, ауыр эш юҡ был донъяла, ти торғайны ололар. Үҙең нисек тә көн күрәһең ул, башҡалар алдында йөҙ ҡыҙармаһын.

Ҡунаҡтар, тигәндән, уларҙың өс кенә кәлимәһенә иғтибар йүнәлткем килә. Совет иле осоронда "социалистик" дуҫ булған, бөгөн инде икенсе лагерға күсеп, беҙҙе күрә алмаған поляктар һоҡланған беҙгә, бигерәк тә беҙҙең өҫтәлдәге һый-табынға: "Юлдарығыҙ насар, һикертә, ләкин өҫтәлегеҙ шәп, кикертә. Ит күп ашайһығыҙ, шәп - беҙҙә быныһына ҡытлыҡ, шәт",- тиҙәр икән улар. Ысынында улар беҙҙе бер хәйерсе тип уйлаған икән.

Америка вәкилдәре бөтөнләй аптыратты. Улар бында ҡурҡып ҡына килеүҙәрен, үҙҙәрендәге мәғлүмәт сығанаҡтары буйынса беҙҙә халыҡ, Төньяҡ Кореялағы кеүек, диктат, тыйыу-ҡыйырһытыу шарттарында йәшәй икән, бар кеше бер форма кейеп йөрөй, тип уйлаған. "Бөтөнләй башҡа ил, халыҡ һеҙҙә көләс һәм бәхетле. Ә бәхетте яһалма эшләп булмай" ,- ти улар.

Африка илдәре вәкиле беҙҙең бер хәбәрсегә былай тигән: "Һеҙ ниндәй бәхетле - һәр бүлмәлә крандан һыу аға. Эсергә лә мөмкин, хатта аяҡты йыуырға ла була. Ә беҙҙә эсергә һыу етмәй..." Һығымта шул: зарланып йәшәмәйек, бәхетле һәм тағы ла бер тапҡыр бәхетле булып өйрәнәйек.

Донъя кимәлендәге был сараның беҙгә, башҡорт халҡына, иҫ киткес тағы бер әһәмиәте шунда: боронғолоҡ һәм мираҫыбыҙ хазиналары йәһәтенән, рухи кимәлебеҙ яғынан да бай милләт икәнебеҙҙе күрһәтә алдыҡ. Ҡайһы бер ут күрше ҡәрҙәш халыҡтар беҙҙең аҫыл ҡиммәттәребеҙгә күҙҙәрен ялтыратып, оронорға ғына торғанда, "Урал батыр" булһынмы, ҡурайыбыҙмы, оҙон көйҙәребеҙ йә бейеүҙәребеҙме, милли аш-һыуыбыҙҙы, ҡул эштәребеҙҙе лә башҡа халыҡтарға, ҡитғаларға танытып, күрһәтеп, еҫкәтеп, ҡаптырып, милләтебеҙҙең дә, алтын мираҫыбыҙҙың да, башҡорт халҡы ижадының да ғүмерен оҙайттыҡ һәм барлыҡ ошо хазиналарыбыҙҙың да фәҡәт үҙебеҙҙеке, башҡорттоҡо икәнен ғәмәлдә раҫланыҡ!

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТЕМӘС МУЗЕЙЫ...

## яңырыу алдында

**Тиҙҙән Баймаҡ районында Темәс тарихи-крайҙы өйрәнеү музейын комплекслы реставрациялау һәм үҙгәртеп ҡороу эштәре башланасаҡ. Бының өсөн дәүләт тарихи-мәҙәни экспертиза рөхсәте, проект-смета документтары һәм инженер-тикшеренеү экспертизалары алынды.**

Был хаҡта республиканың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәгенән хәбәр иттеләр. Темәс музейы тарихи һәм мәҙәни мираҫ объекты булып иҫәпләнә. Был тарихи бинаны реставрациялау һәм үҙгәртеп ҡороу проекты "Архтамға" эксперт-проект бюроһы тарафынан эшләнгән. Бюро етәксеһе, архитектор Рөстәм Әлибаев һөйләүенсә, бинаны комплекслы үҙгәртеп ҡороу, төҙәлөш, янғын һағы һәм санитар талаптарға ярашлы хәлгә килтереүҙе күҙҙә тота. "Бина волость идаралығының административ үҙәге булараҡ 1896-1897 йылдарҙа төҙәлгән. Тәүге ҡаты Әмин карьерынан алынған төрлө рәүештәге таш киҫәктәренән, ә икенсе ҡат урындағы кирбес заводы сығарған ҡыҙыл кирбестән төҙәлгән. Әле бина бик насар хәлдә. Ул янғын һағы, санитар һәм башҡа талаптарға тап килмәй. Эвакуация планы юҡ", - тип һөйләй Р.Әлибаев.



Белгестәр элекке фотоһүрәттәрҙе һәм башҡа тарихи материалдарҙы өйрәнеп, бында техник тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, конструкцияны һәм иҙән-түшәм япмаларын алыштырып ҡорорға ҡарар итте. "Тәүге ҡат, әйтеүебеҙсә, таш киҫәктәренән тигеҙ итеп һалынған, ләкин был тыштан ҡарағанда ғына, ә эстән таштар нисек етте, шулай тултырылған, шуға күрә лә стена ныҡлығы менән айырылып тормай, сатнаған урындары байтаҡ. Берәй көн уның емерелеү ихтималлығы ла бар", - ти яңыртыу проекты авторы.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Үҙен бәхетле тип иҫәпләү өсөн рәсәйҙәрҙең төп дәлиле ғаилә, һаулыҡ, балалар һәм яҡшы эш урыны. Ә үҙен бәхетһеҙ тип иҫәпләгәндәр быны сәбәптәрен бөләкәй эш хаҡы һәм пенсиялар, эшһеҙлек менән бәйләй.*



ИШАРА

# БӘХЕТ ӨСӨН КҮПМЕ КӘРӘК?

**Ҡайһы-бер һүҙ һәм төшөнсәләр беҙҙең көндәлек лексикондан төшөп ҡала йә һирәгерәк ҡулланыла башланы түгелме, йәмәғәт? Мәҫәлән, бәхет һүҙе. Әлбиттә, объектив тормош шарттарына ҡарамайынса, һәр кем үҙенсә бәхетлелер ҙә, бәлки. Тик был бәхет киңлеге һуңғы осорҙа үтә лә "тарайып" китте һымаҡ.**

Элегерәк беҙ үҙебеҙҙе "бәхетле илдең бәхетле балалары" тип тоя, шулай тип йырлай инек. Бөгөн иһә был тойғо ил киңлегенән юғала барып, шәхси мөхит мөйөштәренә һырынды. Күрәһең, өлгөрҙәр бәхетте лә хосусилаштырып бөттө, ахыры.

Әйтеүемсә, элек кеше үҙ бәхетен ил бәхете менән бәйләп ҡарарға күнеккән булһа, бөгөн йырҙарыбыҙ икенсерәк: "Тышта буран булһа, булһын, өйҙә буран булмаһын", - тигәндәй, һәр кем үҙ йәйин ҡарай, үҙ өйөндә бәхетле булырға теләй. Ләкин тулы бәхетме был, әллә ярым-ярты ғынамы? Быңдай уйҙарға Халыҡ-ара бәхет көнө айҡанлы ВЦИОМ (Бөтөн Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге) тигән ойошма үткәргән һорау алыуҙар һөҙөмтәһе мәжбүр итте. Дөрөҫөрәге, аптыраштa ҡалдырҙы: рәсәйҙәрҙең... 80 проценты бәхетле, имеш! Дөрөҫ, тулыһынса түгел, ә теге йәки был кимәлдә. Ә бына 36 процент һис бер икеләнеүһеҙ, бәхетлемен, тип яуап биргән. Был материалға комментарийҙарҙа ниҙмәләр генә яҙып бөтмәнеләр: "Ҡайҙан таптығыҙ был 80 процент бәхетлене - сит илдәрҙә йәшәүсе ватандаштармы әллә улар?", "Опросты, күрәһең, Рублевка тирәһендә үткәргәндәр", "Был бәхетлеләр Дәүләт Думаһы депутаттарына оҡшаған..." һәм башҡа шундай төртмә телле яҙыуҙар менән тулды фекер алышыуҙар. Ниһайәт, араларынан берәү хәлгә асыҡлыҡ индереүҙе кәрәк тапты һәм күбек өҫтөндә йөҙгән әлеге һандар шып итеп урынына ултырҙы. "Әйтәйек, - тип яҙа Дина исемле берәү, - Рәсәйҙә балалар һәм үҫмерҙәрҙән тыш, 100 миллион өлкәндәр иҫәпләнә, ти. Ә бит ВЦИОМ 1600 кешенән генә һорау алған. Был, тимәк, Рәсәй халҡының ни бары 0,0016 процентын тәшкил итә. Әлеге 80 процент ул тотош Рәсәй халҡының түгел, ә һорау алыуҙа ҡатнашҡан 1600 кешенең бер өлөшө генә. ВЦИОМ отчетында был хаҡта айырып әйтеү кәрәк ине".

Тап шулай, югиһә бит, 80 процент халҡы бәхетле ил әкиәттә генә булалыр. Әлеге анкетала ҡатнашҡан 1600 кешенең 93 проценты етеш йәшәүҙе, 85 проценты юғары белемле булыуын бәхет нигеҙе тип белдерә. "Үҙен бәхетле тип иҫәпләү өсөн рәсәйҙәрҙең төп дәлиле ғаилә, һаулыҡ, балалар һәм яҡшы эш урыны. Ә үҙен бәхетһеҙ тип иҫәпләгәндәр быны сәбәптәрен илдәге насар хәлдәр, туктауһыҙ хаҡтар артыуы, бөләкәй эш хаҡы һәм пенсиялар, эшһеҙлек менән бәйләй", - тип яҙа ВЦИОМ-дың генераль директоры Валерий Федоров. Шуныһы ҡыҙыҡ: бәхетле-бәхетһеҙ нисбәтен билдәләгәндә пандемия йылы мөһим мотивтар иҫәбендә телгә алынмай, ти В.Федоров. Уларҙың отчетына тағы бер төҙәтмә индереү кәрәктер: бәхетле булыуҙың төп дәлилдәренең береһе һаулыҡ тип күрһәтелә икән, тимәк, исемләп-айырып әйтелмәһә лә, ковид касафаттарын да күҙҙә тота, әлбиттә, респондент. Һаулыҡ, ғаилә именлеге, яҡшы эш. Бәхет өсөн күп тә кәрәк түгел, тиһәләр ҙә, бәхет өсөн бөгөн бик күп кәрәк икән шул...

Мәҡәләне баҫырға әҙерләгәндә тағы бер хәбәр килеп төштө: иң бәхетле һәм иң бәхетһеҙ илдәр иғлан ителгән. Бәхетлеләр исемлегендә иң беренсе ил - Финляндия. Унан һуңғы 10-ау иҫәбендә Исландия, Дания, Швейцария, Нидерландтар, Швеция, Германия, Норвегия, Яңы Зеландия һәм Австрия. АҠШ - 14, Британия - 18, Франция 20-се урында. Элекке СССР составындағы республикалар ҙа үҙҙәрен бәхетле тоя: Эстония (28), Литва (29), Ҡырғыҙстан (33), Латвия (34), Ҡаҙағстан (36), Молдавия (49)... Тукта, туҡта, ә "80 процент халҡы бәхетле" тип фәстерелгән Рәсәй ҡайҙа һуң бында? Ә-ә, исемлек буйлап хәтһеҙ аҫҡараҡ төшөргә тура килде - 60-сы урын икән!.. Рейтингта илдәге халыҡтарҙың гүмер оҙайлығы, дәүләт тарафынан күрһәтелгән социаль ярҙам, коррупцияға ҡаршы көрәш һәм башҡа шундай күрһәткестәр алынған булып сыҡты.

**Мәрзиә БИКТИМЕРОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Фольклориада ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы, уның әһәмиәте ниҙә тип уйлайһығыҙ?*

***Эльмира ТУКАНОВА, БР Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе:*** Фольклориаданың беҙҙә үткәрелеүе - Башҡортостандың туризм имиджын үҫтереү өсөн бик яҡшы сара булды. Әмәлгә ҡалғандай, халыҡ-ара был байрам сараһы туристик сезондың иң ҡыҙған мәленә тап килде. Фестиваль барған аҙна-ун көн эсендә беҙгә килеүсе турист төркөмдәрендә сит ҡалалар һәм төбәктәрҙән сәйәхәт итеүселәр бик күп булды. Улар Башҡортостаныбыҙҙың иҫтәлекле һәм тарихи урындары, тәбиғәт ҡомартҡылары менән ихлас танышты. Республикабыҙ хаҡында хәҙер бер юлы донъяның миллионлаған кешеләренә билдәле булды һәм был, һис һүҙһеҙ, башҡорт ҡунаҡсыллығы индустрияһына иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалманы.

Фольклориада тап беҙҙең бай мәҙәни хазиналарыбыҙға, шулай уҡ һуңғы йылдарҙа туристарҙа үҫә барған ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыусы этнотуризм йүнәлешенә иғтибарҙы тупланы. Донъяның 37 иленән килгән ҡунаҡтар туристар сифатында ла беҙгә әйләнеп ҡайтасаҡ әле - уларҙың күбеһе ошондай теләк белдереп китте, сөнки Фольклориада сиктәрендә генә республиканың бөтөн мәҙәни һәм тәбиғәт байлыҡтары менән танышып сығыу мөмкин дә түгел ине. Былтыр йәйге өҫ айҙа Башҡортостанға килеүсе туристар һаны 2 млн кеше тәшкил итһә, республикабыҙҙа халыҡ-ара һәм Бөтөн Рәсәй кимәлендә үткәрелеүсе ошондай саралар һөҙөмтәһендә быйыл һәм киләһе туристик сезондарҙа сәфәр һөйөүселәр һаны 25-30 процентҡа артыуы көҙәлләнә, тип фаразлай белгестәр. Әйтеүебеҙсә, Фольклориада барған көндәрҙә генә Башҡортостанда 60 меңгә яҡын турист ял иткән.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТЕМӘС МУЗЕЙЫ...

## яңырыу алдында



(Башы 1-се биттә).

Анализ мәғлүмәттәре лә был бинаны файҙаланыу осоронда бик күп үҙгәрештәргә дусар булыуы хаҡында һөйләй. Әйткәндәй, ул оҙаҡ йылдар файҙаланылмай ҙа торған. Бер осор уны спортзал итеп тә файҙаланғандар. Шул осорҙарҙа яһалған ремонт эштәре арҡаһында бина тәү торош күренешен юғалтҡан, эстәге тарихи конструкциялар һаҡланмаған. Бинаның авария хәлендә булыуын иҫәпкә алып, белгестәр тышҡы стенанан башҡа бөтән конструкцияларҙы ла үҙгәртеп ҡорорға булды. "Тарихи фотоларҙан күренеүенсә, тәүге ҡат һыланған һәм аҡ төҫкә буялған, - ти проект конструкторы Илфат Актуғанов. - Беҙ бинаға тәүге тарихи күренешен ҡайтарасаҡбыҙ. Ишек уйымдарын киңәйтәбеҙ. Нормаға ярашлы булмаған ағас баҫҡыс урынына янғын һағы талаптары буйынса эвакуациялау баҫҡысы ҡаралған. Хәрәкәт мөмкинлеге сикләнгән граждандарға икенсе ҡатҡа күтәрелеү сараһы булмағанлыҡтан (бында лифт ҡуйыу мөмкин түгел - был ҡиммәт һәм бина бөләкәй), улар беренсе ҡатта хеҙмәтләндереләсәк, ә икенсе ҡаттағы экспозицияны проектор аша ҡарай аласаҡтар".

Проект авторы бинаның тышҡы күренешендәге ағастан декор элементтарын, тарихи балкон һәм башняларҙы тәү хәленә килтерергә уйлай. Икенсе ҡаттың кирбес стенаһы нығытыласаҡ. Әхмәтзәки Вәлидигә бюст бер аҙ һулғараҡ күсереләсәк, сөнки янғын һағы положениеһы буйынса машинаға юл кәрәк. Капиталь ремонттан тыш, тейешле коммуникациялар: һыу үткәргес һәм канализация эшләү ҡарала, газ менән йылытыу ҡорамалы яңыртыласаҡ. Видеокүҙәтеү, сигнализация, тышҡы яҡтан яҡтыртыу эштәре башҡарыла. Бина янындағы биләмәлә күмәк саралар өсөн терраса, тирмә ҡороу өсөн махсус урын әҙерләнә. "Экспертиза тарафынан раҫланған смета документацияһы буйынса бөтөн был эштәр 50 млн һум тәшкил итәсәк. Подрядсы билдәләнеү менән реставрация эштәре башланасаҡ. Ҡайтанан тергеҙелгәндән һуң бина конструкцияһы кәм тигәндә 100 йыл торасаҡ әле", - ти Рөстәм Әлибаев.

***Белешмә.*** Темәс тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейы тарихи һәм мәҙәни мираҫ объекты булып тора. 1919 йылдың 21 февралендә бында I Бөтөн Башҡорт хәрби съезы булып, унда Башҡорт Совет Республикаһы ойошторорға ҡарар ителә һәм уның Хөкүмәте вәкәләтен алыусы Ваҡытлыса революцион комитет (Башревком) һайлана. "Башҡортостан Совет Автономияһы тураһында Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте килешеүе"н әҙерләү, ә аҙаҡ, уға ҡул ҡуйылғас, был документтың ғәмәлгә ашырылыуы менән тап Башревком шөғөлләнә лә инде. Музей фондында 3 меңдән ашыу документ иҫәпләнә, уның күпселек өлөшөн Темәс ауылы тарихы, тәүге Башҡорт Хөкүмәте һәм автономия иғлан итеү буйынса тарихи документтар һәм фотоматериалдар тәшкил итә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 23 июлгә 46 211 коронавирус сирле асыҡланған, бер тәүлектә 245 яңы осраҡ теркәлгән. Мәрхүмдәр исемлегендә - 717 фамилия, тәүлек эсендә биш кеше үлгән. Республика оперштабы хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда 852 096 кеше - вакцинаның беренсе, 545 764-е икенсе компонентын алған. Әле 668 пациент стационарҙа дауалана, 64-енең хәле ауыр, 8-е - үпкәне яһалма елләтеү аппаратында. Республикала 2125 кеше табиптар күҙәтеүендә өйҙә дауалана. Бер тәүлектә 137 дауаханан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Август уртаһында Башҡортостанда COVID-19 менән бәйле хәлдең һиҙелерлек яҡшырыуы ихтимал, тип хәбәр итте аналитик Александр Драган РБК Өфө телеканалының "Дело" программаһында. Уның һүҙҙәренсә, әле республика - вирус таралыуҙың өсөнсө тулҡынының һуңғы стадияһында, төбәктә сирҙең тиҙ таралыуы һәм эпидемиологик хәлдең насарайыуы күҙәтелә, ауырыуҙарҙың күбәйеүе ошо хаҡта һөйләй. Аналитик фекеренсә, Башҡортостанда, башҡа төбәктәрҙәге кеүек үк, 2021 йылдың сентябрендә сирләү кимәленең юғары булыуы ихтимал, ә сентябрҙә эшлекле әүҙемлектең тергеҙелеүенә һәм уҡыусыларҙың, студенттарҙың уҡый башлауына бәйле өҫтәмә хәүеф бар.

✓Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы директоры Тедрос Аданом Гебрейесус коронавирустың дельта-вариантҡа ҡарағанда ла хәүефлерәк штамы барлыҡҡа килеү ихтималлығы тураһында иҫкәртте. Гебрейесус фекеренсә, 2022 йылдың йәйенә һәр илдә халыҡтың 70 процентына прививка яһау коронавирус пандемияһын туҡтатырға һәм донъя иҡтисадын тергеҙергә мөмкинлек бирер ине.

✓Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы республика уҡытыусыларына 1 сентябргә тиклем коронавирустан прививка яһатырға тәҡдим иткәйне. Республикала уҡытыусыларҙың 46 проценты коронавирустан прививка яһатҡан да инде. Медицина күрһәтмәһенән тыш вакцинациянан баш тартҡан осраҡта уҡытыусыларға белем бирергә рөхсәт итмәүҙәре мөмкин. Министрлыҡтың 2021 йылдың 15 июлендәге бойороғона ярашлы, вакцинация үткән уҡытыусыларҙы дәртләндереү өсөн өҫтәмә ял көндәре бирелә, хеҙмәт хаҡы ла һаҡлана.

✓ *Нимәһе ғәжәп: был ваҡытлыса йылы һыу биреүҙе туҡтатыу бөтә ил буйынса күптән килгән "көнкүреш йола"һы булып нығынған, халыҡ та уға шулай тейеш тип ҡарарға күнеккән.*



БЫНАҒАЙЫШ!

# ЙӘШӘҺЕН ТАС, БИҘРӘ ҺӘМ КӘСТРҮЛ!

**Йәмле йәй көндәренең дә ҡала халкы өсөн кәйефте боҙорлоҡ яҡтары бар. "Ремонт эштәре менән бәйле һеҙҙең йортҡа 28 июндән 9 июлгә тиклем йылы һыу биреү туҡтатыла", тигән иғланды подъезд ишегенә шапылдатып йәбештереп китеүҙәре була, күп фатирлы йорттарҙа һыу һыйҙырышлы бөтөн һауыт-һаба: тас, биҙрә, кәстрүлдәр эшкә ҡушыла. Халыҡ зыҡ ҡубып ике аҙна буйы плитәлә һыу йылытып, арлы-бирле йыуынырға мәжбүр була...**

Ярай ҙа был осор отпускыңа тап килеп, ҡаланан ҡайҙалыр китеп тороу мөмкинлеге булһа. Бөгөн бит сәфәрҙәр өсөн дә юлдар ябылып тора. Дөйөм ҡала мунсаһына ла хәҙер элгәреүе икеле. Берҙән, сир йоҡтороу хәүефе һағалаһа, икенсенән, прививка хаҡында "дөкәмит" талап итеп, кире бороп сығарыуҙары бар. Унан һуң, көн дә мунсаға йөрөү ҙә кеҫәгә һуғасаҡ, ә эҫе мәлдәрҙә иртәле-кисле ҡойоноу ҙа аҙ. Шунан йөрөрһөңмө түҙеп 35 градус эҫәлә ҡара тиреңә батып. Әлеге шул тас, биҙрә, кәстрүл ярҙамға килә. Ул меҫкен кәстрүлдәрҙә әйтәм, түҙем бирһен уларға: бер смена уларҙа аш ҡайнаһа, икенсе смена ҡойоноурға һыу йылытыла. Ғаиләһе ҙур, балалы кешеләр нисек йылы һыу еткерәләр был осорҙа, үҙҙәре генә белә. Кемдәрҙер Ағиҙел йә Ҡариҙелдең болғансыҡ һыуына ла төшөп ҡарай, ләкин унан бысранып ҡына ҡайта. Заманында әсәйҙәрҙән: "Ағын һыуҙан таҙа булып булмаҫ",- тип әйткәне шул осор өсөн раҫ килһә лә, бөгөн ҙур йылғаларыбыҙ һыуы, киреһенсә, хәүефле сир сығанағы ғына булыуы ихтимал.

Нимәһе ғәжәп: был ваҡытлыса йылы һыу биреүҙе туҡтатыу бөтә ил буйынса күптән килгән "көнкүреш йола"һы булып нығынған, халыҡ та уға шулай тейеш тип ҡарарға күнеккән. Хатта Мәскәү, Питер һынлы эре элиталы ҡалаларыбыҙ ҙа был "ваҡытлыса көнкүреш проблемаһы"нан азат түгел, Өфө нимә инде... Ә бит сит илдәрҙә бындай "тәртип" ике ятып бер төштәренә лә кермәй. Улар өсөн 30-40 градус эҫәлә фатирҙа йылы һыуһыҙ йәшәү - ул ҡырағайлыҡ! Эш ниҙә һуң? Ҡайҙа нисектер, ә бына Өфөлә был "бапаҡ" менән кешене май баштарынан уҡ ҡурҡыта башлайҙар. Ярай әле алдан иғлан бирелә, ҡайһы урам-йорттарҙа йылы һыу туҡтатылыу графигы баҫылып сыға, шуныһына ла рәхмәт инде.

Быйыл да шулай булды: инженер селтәрҙәренә ремонт эштәре менән бәйле БашРТС 12 майҙан уҡ йылы һыуҙы яба башланы. Ярай, бер аҙнаға нисек тә түҙергә булыр ине, ләкин был бит тотош ике аҙна һәм унан да күберәккә һуҙыла һәм миҙгелгә 2-3 тапҡыр кире ураП килә. Ошоға тиклем халыҡ әллә ни өндәшмәй генә түҙеп килһә лә, ризаһыҙлыҡтар, дәғүәләр ҙә күпләп йыйыла килгән, күрәһең. Йәй айҙары йылы һыу менән тәьмин итеү мәсьәләһе сәйәсмәндәр һәм дәүләт структуралары вәкилдәрен дә борсой башланы, ахыры. Һуңғы ваҡыт үҙәк матбуғаттың был хаҡта яҙа башлауына ҡарағанда. Ҡағыҙҙа булараҡ, йыл һайын йылытыу миҙгеле башланыр алдынан коммуналь хеҙмәттәр һыу үткәргес торбаларҙы тикшерен сыға. Шуһыҙ булмай: авария-фәләндә алдан иҫкәртеү мотлаҡ, һүҙ ҙә юҡ. Ә бына был юҫыкта проблема булмаған Көнбайыш Европа илдәрендә торбалар сыҙам, заманса ныҡ материалдарҙан етештерелә, улар оҙаҡҡа сыҙай, аварияһыҙ эшләй. Күп кенә эре ҡалаларҙа иһә һыу үткәргестәрҙең резерв системаһы ғәмәлдә. Төп системала ремонт эштәре башланһа, резерв үткәргестәр эшкә ҡушыла, ә беҙҙә - кәстрүлдәр...

Ни өсөн сит илдәр тәжрибәһе Рәсәйҙә лә ҡулланылмай һуң? Мәскәүҙә, мәҫәлән, 2005 йылда уҡ яңы сыҙам полимер торбаларға күсә башлау хаҡында мәсьәлә күтәрелеүгә ҡарамаҫтан, бында ла "һәр ваҡыттағыса", "рәсәйсә" килеп сыға. Дөрөҫөрәге, бер ни ҙә килеп сыҡмай. РФ Төҙөлөш министрлығы һәм Дәүләт Думаһының Энергетика буйынса комитеты ҡорос торбаларҙан сифатлы, ныҡ полимерға күсеүҙең оҙаҡҡа һуҙыласаҡ эш булыуын һәм хатта бының мөмкин дә түгеллеген белдерә. Ә икенсе вариант - Мәскәүҙең ҡайһы бер райондарында булдырылған резерв системаһы ла үҙен аҡламай. Ә бит ил буйынса коммуналь инфраструктура 70-80 процентҡа тиклем туҙған, ти белгестәр һәм әлегәсә 3, 7, хатта 14 көнгә эҫе һыуҙы ябып та бөтөн тишектәрҙе лә ямап сығыу мөмкин түгел. Тағы бер "рәсәйсә" мөнгелек проблема - аҡса юҡлыҡ. Ә ҡайҙа һуң торлаҡ майҙанының һәр кв.метрынан йыйыла килгән капремонт аҡсаһы? Бына шунда инде беҙҙең триллиондар! Ләкин... был аҡса ла төп тәғәйенләнешендә файҙаланылмай, ә әлеге лә баяғы тишек ҡаҙна тоғонда юҡҡа сығып тора, күрәһең. Ҡыҫҡаһы, йәшәһен тас, биҙрә һәм кәстрүл!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

ӘЙТ, ТИҺЕГЕҘ...

## ? *Фольклориада ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы, уның әһәмиәте ниҙә тип уйлайһығыҙ?*

***Замир ЙӘНТҮРИН, Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы директоры:*** Бөтә донъя фольклориада ҡунаҡтарының беҙҙең Сибайға ла килеп китеүе оло ваҡиғаға әүерелде. Ә унан алда Фольклориаданың тантаналы асылыуында ҡатнашыу бәхете лә тейҙе сибайҙарға. Колледжыбыҙ уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, киң билдәле сәсәниә Асия Гәйнуллина етәкселегендәге "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе ағзалары 4-6 июлдә республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы Башҡортостандан ғына түгел, ә тотош Рәсәй исеменән уңышлы сығыш яһап ҡайттылар. Бының мөһимлеге шунан ғибәрәт ине: 4 июлдә сибайҙарҙың "Урал батыр" эпосы менән сығыш яһауҙарының төп ниәте - эпосыбыҙҙы донъяға таныту менән бер рәттән, рухи хазинабыҙ буларак, "Урал батыр"ыбыҙҙы ЮНЕСКО-ның бөтөн донъя матди булмаған мәҙәни ҡомартҡылары исемлегенә индереү маҡсаты ине. Беҙҙең өсөн Фольклориаданың әһәмиәте бына шунда ла сағылды. Был халыҡ-ара сара донъя халыҡтарының ауыҙтел хазиналарын күтәрмәләүе, уны артабан үҫтереүгә стимул биреүе менән дә ифрат ҡиммәтле, тип уйлайым. Ошо ҙур, мөһим сараны үткәрешеүҙә сибайҙарҙың да тос өлөш индереүе күңелдәрҙә ғорурлыҡ тойғоһо тыуҙыра. Сығыш яһауҙан тыш, беҙҙең делегация Өфөлә Фольклориаданың төп майҙанындағы тирмәлә ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли биҙәүестәре: ҡашмау, һаҡал, селтәр, түшелдерек һәм башҡа шундай башҡорт кейеме элементтары менән бер рәттән, традицион милли орнаментлы кейеҙ өлгөләре, һуғылған буй балаҫтар, һукма шәлдәр кеүек боронғо көнкүреш кәрәк-яраҡтары күргәҙмәһе ойошторҙо.

8 июлдә иһә, әйтеп киткәнемсә, сибайҙар Швейцария, АҠШ, Коста-Рика, Албания, Черногория, Ҡырғыҙстан һәм Венгрия делегацияларын ҡабул итте. Байрамға Урал арьяғы райондарынан мендәрсә тамашасы килде, улар сит ил ҡунаҡтары менән йәнле аралашты, уларҙы ихлас башҡорт ҡунаҡсыллығы менән таң ҡалдырҙы. Был Сибай ҡалаһының донъя һәм ил кимәлендәге сараларҙы юғары кимәлдә үткәрә алыу мөмкинлеген тағы бер тапҡыр раҫланы. Тимәк, ҡалабыҙ августа буласаҡ инвест-һабантуйҙа ла һынатмаҫ, тигән ышаныс нығынды.

Фольклориаданың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, әлбиттә. Шуларҙың тағы береһе - уны ойоштороуҙа ҡатнашҡан профессионалдар - сәнғәтебеҙ белгестәре һәм етәкселәрҙең оҫталыҡ туплау тәжрибәһе менән байытылыуы. Ошо йәһәттән Сибайҙағы Фольклориада байрамын үткәреүгә күп көс һәм бөтөн иждиһатын һалған режиссерҙар Вадим Ғилманов, Нәсимә Ғиззәтуллина, балетмейстер Азат Нәбиуллин, фольклорсы Рәмил Туйсиндың, шулай уҡ башҡа мәҙәниәт һәм сәнғәт белгестәре, фольклорсылар, культурологтар, этнографтарҙың тос хеҙмәттәрен билдәләп китеү кәрәктер. Ойоштороу эштәрендә юғары профессионаллыҡ ярҙамдары өсөн БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡоваға, уның урынбаҫары Рәнис Алтынбаевҡа, Фольклориада дирекцияһы етәксеһе Артур Әлибәковҡа, Нәфисә Тулыбаеваға ла бөтөн сибайҙар исеменән рәхмәттәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Фольклориада ҡалабыҙҙың яҡшы исемен, данын донъяға таратыуға ярҙам итте, беҙ уның менән ғорурланабыҙ. Был байрам беҙ йәшәгән ерҙең үҙенсәлектәрен, туристик һәм социаль-иҡтисади мөмкинлектәрен донъяға танытты.

***Тәнзилә КЕЙЕКБАЕВА, режиссер, шағирә:*** Башҡортостанда үткән Фольклориада донъяуи күҙлектән ҡарағанда юғары кимәлдә ойошторолдо, тип әйтер инем. Бөгөнгө иҡтисади көрсөк һәм пандемия осорonda бындай сараны үткәреү юғары етәкселәр өсөн генә түгел, унда ҡатнашҡан меңәрләгән кеше - тамашасылар һәм сит ил ҡунаҡтары өсөн дә ҙур яуаплылыҡ, хатта батырлыҡ та ине ул. Уның тап беҙҙең республикабыҙ - Башҡортостанда үткәрелеүе ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Ғәҙәттә бөтә нәмәнең ҡиммәте сағыштырыуҙар аша билдәләнә. Мәҫәлән, сит илдә йәшәгән сағымда минән йыш ҡына ниндәй илдән булыуымды һорашырҙар ине. Башҡортостандан, тип яуап бирһәм, аптырап һорай торғайнылар: шундай ил бармы ни, ҡайҙа ул, тип. Шуға күрә Бөтә донъя фольклориадаһының фәҡәт беҙҙең ерҙә үтеүенә мин бик шатмын. Хәҙер иһә Башҡортостан тигән ил, уның Ағиҙел йылғаһы буйында тау башында балҡып ултырған Өфө тигән баш ҡалаһы барлығын һәм унда ерле халыҡ - башҡорттар йәшәгәнлеген бынан ары күп илдәрҙә белерҙәр. Ошо йәһәттән Фольклориаданың Башҡортостанда үткәрелеүе айырым әһәмиәткә эйә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов Рәсәйҙең Олимпия комитетына эш сәфәре барышында Олимпия комитетының ойоштороу идаралығы етәксеһе Игорь Степанов менән осрашты. Улар 2021 йылдың октябрендә Өфөлә Бөтә Рәсәй "Йәйәү йөрөү көнө" старттарын уҙғарырға планлаштырҙы. Шулай уҡ республиканың спорт министры Башҡортостандың Рәсәй президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Үмәрпаша Ханалиев менән Спорт көрәше үҙәге һәм Волейбол үҙәге төҙөлөшө өсөн федераль аҡса йәлеп итеү тураһында фекер алышты.

✓Эстонияла ҡатын-ҡыҙҙар араһында халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионаты тамамланды. Унда 9 илдән 16 спортсы, шул иҫәптән Өфөнөң "Башҡортостан" шашка клубынан Тамара Танһыҡҡужина һәм Айгөл Иҙрисова ҡатнашты. Донъяла иң яҡшыларҙы билдәләү өсөн улар 15 партия уйнаны. Турҙа Саха Республикаһынан Матрена Ноговицына енде. Донъя шашка форумының һуңғы партияһы Тамара Танһыҡҡужинаның Дарья Федорович менән уйыны булды. Яҡташыбыҙ, енел атлеттар әйткәнсә, финиш таҫмаһында Украинанан Виктория Мотричконы узып китеп, икенсе урынға сыҡты. Украин ҡыҙы - өсөнсө, Польшанан Наталья Садовска - дүртенсе, Айгөл Иҙрисова - туғыҙынсы.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының яңы генераль директоры үҙ вазифаһында эш башланы. Ул - Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең элекке урынбаҫары Ринат Бәширов. Әйткәндәй, Бәширов республика власынан хоккей кураторы һәм Клуб советы рәйесе ине. Быға тиклем "Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры вазифаһын биләгән Александр Курносов хәҙер башҡарма директор итеп тәғәйенләнде.

✓19-20 августа Сибайҙа һәм Баймаҡ районында "Урал арьяғы-2021" Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы ойошторола. Документта билдәләнеүенсә, яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау өсөн инвестиция һабантуйын уҙғарғанда барлыҡ санитар-эпидемиологик нормаларҙы һәм ҡағиҙәләрҙе үтәү мотлаҡ. Инвестиция һабантуйында федераль һәм төбәк дәүләт учреждениелары, Рәсәй һәм сит ил бизнесы вәкилдәре, инвесторҙар, эксперттар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнаша.

✓ Быйылғы уҡыу йылында республикала бөтә фәндәрҙән дә тиерлек Берҙәм дәүләт имтиханында уртаса балл артҡан. Шулай уҡ юғары балл йыйыусылар ҙа күп - 84 уҡыусы 99 балға яҙған.



ҠЫҪҠАСА

# СИТТӘР ЮҒАРЫ БАҺАЛАЙ

**Иҡтисади партнерлыҡты үҫтереү өсөн Башҡортостанға Бахрейн Короллегенең Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Әхмәт Абдулрахман Әл-Саати килде.** Ул Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров менән дә осрашты. Яҡтар туризмды үҫтереү, шул иҫәптән Өфөнән Бахрейндың баш ҡалаһы Манамаға осоуҙы ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе. Бахрейн илсеһе нефть-газ тармағы буйынса белем алыу өлкәһендә хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә ҡыҙыҡһыныу белдерҙе. Әлеге ваҡытта Өфө дәүләт нефть техник университеты менән үҙ-ара килешеп эш итеү варианттары табылған. Иглин районы башлығы Гүзәл Насирова илсегә яңы һарҡытылған балды күрһәтте. Бал менән таныштырыу сараһында уҡ башҡорт балының пилот партияһын Бахрейнға оҙатырға хәл ителде. "Мәртәбәле ҡунаҡ "Красноусол" шифаханаһына сәфәре барышында Башҡортостандың үҙенсәлекле тәбиғәтенә, республика курорт зоналарының бальнеологик һәм СПА мөмкинлектәренә юғары баһа бирҙе", - тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓ **2023 йылдың 1 ғинуарына тиклем Рәсәйҙә барлыҡ конституция һәм устав судтары бөтөрөләргә тейеш.** Шуға Башҡортостанда яңы дәүләт органын булдырырға тәҡдим ителә. "Рәсәй субъекттары конституция советтарын булдырыу мөмкинлегенә эйә була. Был - төбәк парламенттарының хоҡуғы. Тейешле норма Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында сағылыш табыр, - тип аңлатты Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачёв. - Конституция советының төп бурысы - республика хоҡуғы системаһында Конституцияның өҫтөнлөгөн тәьмин итеү һәм законлылыҡты нығытыу". Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһының Конституция судын бөтөрөү һәм яңы дәүләт органын булдырыу өсөн республика Конституцияһына үҙгәрештәр индереү талап ителә. Әлеге ваҡытта төҙәтмәләр әҙерләнә, уларҙы быйыл көҙ ҡарау күҙаллана.

✓ **Башҡортостан халҡына һәм төбәк ҡунаҡтарына айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләренә (улар республикабыҙҙа бишәү) инеүҙең түләүле булыуы хаҡында иҫкәртәләр.** Хәҙер Асылыкүл, Ҡандракүл тәбиғи паркына инеү - 250, Мораҙым тарлауығы, Еҙем һәм Ирәмәлдә булыу өсөн 200 һум түләргә кәрәк. Унда күпме ваҡыт булыу иҫәпкә алынмай, тип хәбәр итә Айырым һаҡланыусы биләмәләр буйынса дирекция. Тәбиғәт парктарында булыу түбәндәге кешеләргә бушлай рөхсәт ителә: пенсионерҙар, мәктәпкәсә һәм мәктәп йәшендәге балалар, аҙ килемле ғаиләләр, күп балалы ғаиләләр, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, инвалидтар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр. Билдәләнеүенсә, билет һатыуҙан тупланған аҡса тәбиғәт паркынан сүп-сар сығарыуға, коммуналь хеҙмәттәр өсөн, паркта эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы, биләмәлә төҙөкләндереү, уны тәртиптә тотоу һәм мәғлүмәт аншлагтары ҡуйыу маҡсаттарында тотоноласаҡ. Айырым һаҡланыусы тәбиғәт биләмәләрендә булыу өсөн мәжбүри түләү тәртибе РФ Хөкүмәте тарафынан 2020 йылда уҡ индерелгәйне. Башҡортостанда хаҡтар ошо йылдың апрелендә раҫланды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТЫУҒАН ЙОРТТА УҠЫҒЫҘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл алған мәктәп тамамлаусылар менән осрашты. Республика етәксеһе ике фәндән юғары балл йыйған йәштәргә Башҡортостан Республикаһы Башлығының Рәхмәт хатын тапшырҙы һәм уларҙың һорауҙарына яуап бирҙе. Осрашыу ҡатнаш онлайн һәм оффлайн форматта уҙҙы.**

Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, быйылғы уҡыу йылында республикала бөтә фәндәрҙән дә тиерлек Берҙәм дәүләт имтиханында уртаса балл артҡан. Шулай уҡ юғары балл йыйыусылар ҙа күп - 84 уҡыусы 99 балға яҙған. "Уңыштарығыҙға шатмын! Һеҙгә пандемия, коронавирус сикләүҙәре ваҡытында уҡырға һәм һынау тоторға тура килде. Ләкин ныҡлап әҙерләнеп, алға ҙур аҙым яһай алдығыҙ. Был, һис шикһеҙ, уныш, - тине Радий Хәбиров. - Хәҙер һеҙгә тормоштағы иң мөһим ҡарарҙарҙың береһен ҡабул итергә - юғары белем алыу өсөн вуз һайларға кәрәк. Күптәрегеҙ республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттарында тҡталды. Ҡайһы берәүҙәр башҡа төбәктәргә уҡырға китә. Диплом алып, яңы белем һәм компетенциялар менән тыуған төйәгегеҙгә ҡайтһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Әйткәндәй, Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында уҡыуын дауам итергә теләгәндәр өсөн 150 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған премия булдырҙыҡ".

Аралашҡанда мәктәп тамамлаусылар Башҡортостан вуздарына уҡырға ингәндә льготалар, һәләтле уҡыусыларға - федераль олимпиадаларҙың төбәк этаптары еңеүселәренә матди ярҙам менән ҡыҙыҡһынды.

# УҢЫШ МУЛ БУЛМАҺА ЛА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика баҫыуҙарында уңыш йыйыу эштәре башланыуын иғлан итте.**

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, көндәрҙең аномаль эҫе тороуы сәбәпле, уныш йыйыу ғәҙәттәгенән ике аҙнаға алдараҡ башланды. "Ужым культуралары өлгөргән дә инде, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Әйе, быйыл мул уныш көтмәйбеҙ. Ҡояш ҡыҙҙырҙы, ямғыр яуманы - быларҙың барыһы ла аграрийҙар файҙаһына булманы. Башҡортостандың күпселек районДарЫ ҡоролоҡтан зыян күрҙе. 26 муниципалитетта ғәҙәттән тыш хәл режимы иғлан иттек. Әммә төүге 30 мең тонна ашлыҡ - бурала".

Республика етәксеһе әйткәнсә, әлеге ваҡытта уртаса уңыш - гектарынан 15,3 центнер. Ямғыр яуған төбәктәрҙә күрһәткес юғарыраҡ - 28 центнер. "Урып-йыйыу кампанияһы йомғаҡтары буйынса аграрийҙар республиканы иген менән тәьмин итер тип ышанам. Иң мөһиме - климаттың беҙҙең агросәнәғәт комплексына тәьҫирен нисек кәметеп булыуын күҙ алдына килтерәбеҙ", - тине Радий Хәбиров. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылда Урал арьяғында замандса һуғарыу системаһын булдырыу буйынса инвестиция проекты башлана.

# КҮҘӘТӘЛӘР!

**Былтыр "Башҡортостан Республикаһы юл хужалығын үҫтереүҙең дөйөм система саралары" төбәк проекты сиктәрендә 471 фотовидеотеркәү комплексы сафҡа индерелде. Әле Башҡортостанда 1015 юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплексы эшләй, 946-һы - стационар, 63-ө - күсмә, алтауһы - мобиль комплекс.**

2021 йылдың башынан Башҡортостан биләмәһе аша үткән федераль әһәмиәттәге юлдарҙа юл фажиғәләренең артыуы күҙәтелә. Шуға күрә республика етәксеһе Радий Хәбиров федераль әһәмиәттәге дөйөм файҙаланыу автомобиль юлдарында өҫтәп 100 берәмек юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплексын ҡуйырға ҡушты.

"Федераль трассаларҙа тиҙлек режимын үтәүҙе контролдә тотоуҙы көсәйтеү һәләк булғандар һанын кәметеү буйынса тәьҫирле сара булып тора. Быға юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү камералары һанын арттырыу иҫәбенә өлгәшергә мөмкин, ошо хаҡта белгән водитель тиҙлекте арттырмай", - тине "Башҡортостан Республикаһының транспорт дирекцияһы" етәксеһе Мансаф Низакаев.

"Башҡортостан Республикаһының транспорт дирекцияһы" һәм "Башинформсвязь" йәмғиәте әлеге ваҡытта булған 100 берәмек фотовидеотеркәү комплексын күсереү өсөн дәүләт контрактына өҫтәмә килешеү төҙәнә. Был эш башланды ла инде. Хәҙер Р-240 Өфө - Ырымбур һәм М-5 "Урал" федераль трассаларында 15 фотовидеотеркәү комплексы бар. Барлыҡ 100 фотовидеотеркәү комплексын 2021 йылдың 20 авгусына тиклем файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

# НИНДӘЙ ҺӨНӘР КӘРӘКЛЕ?

**Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында алдағы өс йылда һорау менән файҙаланасаҡ һөнәрҙәрҙе билдәләнеләр.**

Билдәләнеүенсә, 2021-2023 йылдарҙа республикала айырыуса ауыл, урман һәм балыҡ хужалыҡтары өлкәләренә белгестәр кәрәк буласаҡ. "Был күҙәтеүҙәрҙең хеҙмәт баҙарындағы ысынбарлыҡ менән тура килеүе башлыса власть, урындағы үҙидаралыҡ органдары һәм эш биреүселәр менән үҙ-ара йоғонтоло эшләүе, дөрөҫ мәғлүмәт менән алмашыныуына бәйле. Бөгөн республикала квалификациялы кадрҙарға һәм сифатлы мәғлүмәт менән алмашыуға мохтаж 80 мендән ашыу ойошма эшләй. Быны өсөн махсус ресурс булдырылған, унда эш биреүселәр үҙенең ниндәй кадрҙарға мохтажлыҡ кисереүе хаҡында белдерә ала", - ти Башҡортостан ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Юрий Мельников.

2020 йылда эшләнгән күҙәтеүгә ярашлы, яҡындағы өс йылда квалификациялы белгестәргә һәм эшсе кадрҙарға ихтыяж түбәндәгесә: 2021 йылда - 92,3 мең кеше, 2022 йылда - 95,0 мең кеше, 2023 йылда - 95,8 мең кеше. Белем кимәле буйынса өҫтәмә кадрҙар ихтыяжы шулайыраҡ: квалификациялы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр - 12,9 мең кеше; урта звено белгестәр - 14,7 мең кеше; юғары белемле белгестәр - 66,7 мең кеше.

Ауыл, урман, балыҡсылыҡ хужалығына - 4,0 мең кеше, атап әйткәндә механизаторҙар, тракторсылар, комбайнсылар, ауыл хужалығы техникаһын ремонтлаусы белгестәр кәрәк. Шулай уҡ техника һәм ер өҫтө технологиялары өлкәһенә 2,0 мең кеше, йәғни автомеханик, тимер юлы төҙөләш машиналары машинисы, юл-төҙөләш машиналары машинисы, техник-электромеханиктарға ихтыяж бар. Машина төҙөү тармағына 1,3 мең кеше - иретеп йәбештереүселәр, металл эшкәртеүсе станоксылар кәрәк. Техника һәм төҙөләш технологияһы өлкәһендә 1,0 мең кеше, йәғни дөйөм төҙөләш эштәре мастерҙарына ихтыяж бар.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓19 июлгә ҡарата күрһәткестәр буйынса, Өфөнөң Дуҫлыҡ монументы тәңгәлендә Ағиҙел йылғаһы кимәле минус 147 сантиметр булған. Ә Өфө районы тәңгәлендә йылға кимәле 50 сантиметрға төшкән. Ағиҙелдең экстремаль һайығыуы һыуһаҡлағыстарҙағы һыуҙың сифаты насарайыуға һәм судноларҙың йөк-пассажир ташыуҙарына кире йоғонто яһауы мөмкин. Кама һыу бассейны идаралығында әйтеүҙәренсә, һуңғы йылдарҙа сәнәғәт предприятиелары, энергетиктар йылғаларҙың һай кимәле шарттарында эшләүсе ҡоролмаларҙы модернизациялаған. Был ҡулланыусыларҙы һыу менән тәьмин итеүҙәге ҡатмарлыҡтарҙы иҫкәртергә тейеш.

✓Рәсәй Дәүләт автоинспекцияһы ҡала урамдарында тиҙлекте сәғәтенә 60 километрҙан 30-ға тиклем кәметеү идеяһын хупланы. Рәсәй Эске эштәр министрлығы Хәүефһеҙ юл хәрәкәте фәнни үҙәге начальнигы Дмитрий Митрошин быны һәр урам өсөн айырым эшләргә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Уның әйтеүенсә, тиҙлек ни тиклем кәм булһа, шул тиклем үлем осраҡтары ла аҙыраҡ. Тиҙлекте кәметеүҙе башҡарма власть органдары хәл итә, ә ЮХХДИ контролдә тота. Тиҙлеккә ҡағылышлы яңы сикләүҙе индереү өсөн урам-юл селтәренә ревизия эшләү талап итә.

✓Башҡортостанға идара итеү үҙәгенең һәм республика Хеҙмәт министрлығының чат-ботына 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға пособиелар түләү буйынса 5 867 хәбәр ебәрелгән. Хәҙерге ваҡытта республикала 38 меңдән ашыу ғаилә 2021 йылдың 1 апреленән индерелгән яңы шарттар буйынса социаль түләүҙәр ала. Шуның 28 меңе - максималь күләмдә. Башҡортостандың Республика менән идара итеү үҙәге хәбәр итеүенсә, чат-бот халыҡҡа кәрәкле мәғлүмәт алырға ярҙам итә, ә Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәгенә һәр мөрәжәғәт буйынса уйланылған ҡарар ҡабул итергә мөмкинлек бирә.

✓Өфө ҡалаһы эшмәкәрлеген тәьмин итеү идаралығында - яңы етәксе. Өфө мэры Сергей Греков Дим районы башлығының элекке беренсе урынбаҫары Аскар Батталовты ошо вазифаға тәғәйенләү тураһында иғлан итте. "Ул беҙҙең дөйөм бурыстар менән яҡшы таныш", - тип билдәләне баш ҡала хакимиәте башлығы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алда идаралыҡ етәксеһе вазифаһында Антон Тристан эшләне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Халыҡтың әүҙемлеген арттырыу маҡсатында 14 июлдән 28 августа тиклем яңы вакцинация үҙәгендә прививка эшләткән граждандар араһында республика шихафаналарына юлламалар уйнатыла.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЭШТӘР - ҮҘ ЯЙЫНДА

**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә Ҡорбан байрамынан һуң үткәнлектән, көн тәртибендәге мәсьәләләрҙе ҡарауҙан алда мэр Сергей Греков барлыҡ мосолмандарҙы оло байрам менән тәбрикләне һәм Өфө мәсеттәрендә үткән сараларҙа барлығы 6,5 мең кеше ҡатнашҡан, ҡорбандар салынған, тип билдәләне.**

Артабан сығыш яһаусылар бөгөн актуаль булған мәсьәләләр - баш ҡала урамдарындағы юлдарҙы ремонтлау, республикалағы һәм баш ҡалалағы эпидемиологик хәл-торош, яңы вакцинациялау үҙәгенең эше тураһында мәғлүмәттәр еткерҙе. Билдәләнеүенсә, 21 июлгә ҡарата баш ҡалала барлығы таҗзәхмәт менән сирләүҙең 14399 осрағы теркәлгән, бер тәүлектә был һан 52-гә артҡан.

"Башспирт" акционерҙар йәмғиәтенең хеҙмәтте һаҡлау һәм производство контроле хеҙмәте начальнигы Петр Микрюков компания предприятиеларында ковидҡа ҡаршы алып барылған саралар менән таныштырҙы. Улар баш ҡала предприятиелары араһында хеҙмәткәрҙәренең вакцинацияланыуы буйынса иң алда барыусыларҙың береһе - 72,3 процент хеҙмәткәр прививка эшләткән. Быйыл февралдә предприятие теләүселәр өсөн организмда коронавирусҡа антиматдәләр булыу-булмауын асыҡлау өсөн бушлай тест эшләтеүҙе ойоштортҡан.

Йылдың тәүге яртыһында Ленин районының социаль-иҡтисади күрһәткестәре һәм уның үҫешендәге өҫтөнлөктәр тураһында район хакимиәте башлығы Олег Котов һөйләп үтте. Хәҙерге ваҡытта 91 120 кеше йәшәгән район тотороҡло үҫеш кисерә. Демографик планда ла бында йылына 2 процент үҫеш (1790 кеше) күҙәтелгән. Районда 19 эре һәм урта предприятие эшләй. Шул уҡ ваҡытта эшһеҙлек проблемаһы ла бар, әммә ул кәмеүгә табан бара: был күрһәткес дөйөм ҡала күрһәткесенән 1,9 процентҡа кәмерәк һәм 2,6 процент тәшкил итә. Иҫәптә 924 кеше тора, йыл башынан алып теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 1780 кешегә кәмегән. Район биләмәһендә 4 мең хужалыҡ субъекты - ойошма һәм 2195 шәхси эшҡыуар бар. Торлаҡ төҙөлөшө лә уңышлы үҫешә, шул уҡ ваҡытта алданған өлөшсөләр проблемаһы ла көн үҙәгендәге мәсьәлә булып ҡала. Ленин районында улар һаны 320 кеше. Өфө ҡалғаһенең төҙөлөүенә 450 йыл тулыуҙы ҡаршылап, районда бер нисә социаль әһәмиәтле объект, шул иҫәптән 1225 урынлыҡ мәктәп һәм 250 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөү ҡаралыуы тураһында ла мәғлүмәт еткерелде.

Юғары технологиялар заманында яһалма интеллект тормошобоҙға көндән-көн нығыраҡ үтеп инә бара, тормошто еңелләштерә. Оператив кәңәшмә һуңында "Инженерный стапель" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры Роберт Бәхтиев компанияның инновацион проекттары тураһында һөйләне. Инженер стапеле - яһалма интеллект ярҙамында заманса түләүҙәрҙе һәм объекттарҙы таныу системаһын эшләүсе технологик компания. Унда әлеге ваҡытта 30 кеше эшләй. Компания бер нисә, шул иҫәптән онлайн-кассалар һәм терминалдар һәм яһалма интеллект өлкәһендәге проектты тормошҡа ашыра. Мәҫәлән, уларҙың I-SPOK - кассирһыҙ касса системаһының Рәсәйҙә аналогы юҡ. Әле был системаны РосТехПитание (УМПО) һәм ГазПромПитаниеға индереү эштәре бара. "РобоСтраж" - яһалма интеллект базаһында хәүефһеҙлек тәьмин иткән инновацион система. Уның базаһы даими рәүештә хоҡуҡ боҙоусылар тураһындағы мәғлүмәт менән тулыланып тора һәм ул сауҙа залында йәки территорияла күренеү менән система һаҡсыларға хәбәр итә", - тип һөйләне Роберт Бәхтиев.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*КӨНАУАЗ*

# ЙӘШЕРӘКТӘР СИРЛӘЙ...

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә коронавирус инфекцияһы таралыуға юл ҡуймау мәсьәләләре буйынса брифинг үтте.**

Сара модераторы, хакимиәттең Мәғлүмәт-аналитика идаралығы - матбуғат хеҙмәте начальнигы Тәлғәт Зәйнуллин илдә таҗзәхмәт инфекцияһына бәйле хәл-тороштоң көсәргәнешле булыуы һәм уның артабан таралыуын туҡтатыу өсөн ҡайһы бер төбәктәрҙә яңы сикләүҙәр индерелеүен билдәләне. Баш ҡалала иһә хәл-торош контролдә тотола, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары тотороҡло эшләүен дауам итә, халыҡты күпләп вакцинациялау ойошторола, бының өсөн барлыҡ шарттар булдырылған: вакцинациялауҙың мобиль пункттары эшләй, шулай уҡ баҡсаларҙа күсмә пункттар эш алып бара.

Галина Пермина республиканың баш ҡалаһында ауырыу статистикаһы менән таныштырҙы һәм инфекцияны таратмау өсөн ҡулланылған саралар тураһында һөйләне: "Сирләүҙе логик процесс тип ҡылыҡһырлаһаҡ, бөгөн ул күберәк 30-49 йәшлектәр араһында тарала. Шулай уҡ 53-64 йәшлектәр ҙә сирләүселәрҙең ҙур һанын бирә. Улар - тап бөгөн ҡаланың предприятие-ойошмаларында эшләгән иң әүҙем төркөм",- тине Галина Яковлевна һәм коронавирус инфекцияһының вакцинациялау юлы аша идара итеп булған сирҙәр рәтенә күсеүен дә белдерҙе.

Халыҡты вакцинациялауҙың нисек ойошторолоуы һәм ниндәй пункттар эшләүе тураһында Әлфирә Баҡыева һөйләне. Бөгөн баш ҡала территорияһында 588650 кеше вакцинацияланырға тейеш һәм шуларҙың 50 проценты беренсе компонентты алған да инде. Икенсе компонентты алыусылар - 28 процент. Шулай уҡ 60 йәштән ололарҙы вакцинациялау ҙа иғтибар үҙәгендә. Был категориянан 178 100 кеше вакцинацияланырға тейеш, әле 49 процент прививка эшләткән. Ҡаланың эре предприятиеларында 47 процент хеҙмәткәр вакцина эшләткән. Бигерәк тә спорт, мәғариф, хеҙмәтләндереү баҙары һәм мәҙәниәт учреждениелары әүҙемлек күрһәтә.

Билдәләнеүенсә, бөгөн баш ҡалала вакцинациялауҙың 25 пункты эшләй, шулай уҡ "Торатау" конгресс-холы базаһында иң ҙур үҙәк асылды. Унда ике сменала иртәнге 8-ҙән киске 8-гә тиклем бер үк ваҡытта 10 бригада ялһыҙ эшләй, көнөнә 1500 кешене хеҙмәтләндереү планлаштырылған. Халыҡтың әүҙемлеген арттырыу маҡсатында 14 июлдән 28 августа тиклем яңы вакцинация үҙәгендә прививка эшләткән граждандар араһында республика шихафаналарына юлламалар уйнатыла. Бының өсөн үҙенсәлекле кодлы флаерҙар бирелә һәм улар "Сәләмәт Өфө" сайтында теркәлергә тейеш. Шулай уҡ баҡсаларҙа вакцинациялау пункттары эшләүе тураһында ла ентекле мәғлүмәт бирелде. Ул Дим районы кордонынан башланһа, 16 июлдән Орджоникидзе районы территорияһындағы баҡсаларҙа эшләй башланы. Баҡсаларҙа вакцинацияланыусыларҙы ла бүләктәр көтә.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӨФӨ ТУРАҺЫНДА...

**"Өфө - хеҙмәт герой-ҡалаһы" документаль фильмының youtube-премьераһы булып үтте.**

"Өфө - хеҙмәт герой-ҡалаһы" фильмы Рәсәй Федерацияһы Президенты гранты, шулай уҡ рәсми кешеләр һәм республика халҡы ярҙамында төшөрөлгән. Был документаль фильм - өфөләр хаҡында. Унда тыл эшсәндәре, уларҙың яҙмышы һәм ҡаһарманлығы күрһәтелгән. Үҫмерҙәр, йәштәр араһында ойошторолған һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, һуғыш ваҡытында ут һыҙығынан тыш та ҡаһарманлыҡ ҡылынғанын күптәр белмәй. Тылдағы тормош та еңелдән булмаған, уның дан яуламаған үҙ геройҙары байтаҡ. Һуғыш йылдарындағы Өфө хаҡында фильм - тап тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү тураһында.

Билдәле булыуынса, 2020 йылда Рәсәй Президенты баш ҡалабыҙға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исемен бирҙе. Ошо темаға төшөрөлгән фильм - Еңеүҙе яҡынайтҡан Өфөнөң тыл эшсәндәренә хөрмәт билдәһе ул. Рәсми премьеранан һуң "Өфө - хеҙмәт герой-ҡалаһы" документаль фильмы республиканың ҡала-райондары кинотеатрҙарында: 26 июлдә - Ҡырмыҫҡалыла, 29 июлдә - Красноусолда, 2 августа - Салауатта, 4 августа - Кушнаренкола, 5 августа - Бәләбәйҙә, 9 августа - Ишембайҙа, 12 августа Дүртөйлөлә күрһәтелә. Шулай уҡ 30 сентябргә тиклем фильмды Баймаҡта, Бишбүләктә, Борайҙа, Үрге Ҡыйғыла, Дыуанда, Ермолаевола, Ҡариҙелдә, Мәсәғүттә, Мораҡта, Приютовола, Раевкала, Иҫке Балтаста, Иҫке Собханғолда, Стәрлебашта, Саҡмағошта, Шаранда ҡарарға була. Ә сентябрҙә фильм Мәскәүҙә В.Лановой исемендәге хәрби-патриотик кинофестивалендә ҡатнаша.

# ТУҒАН ТЕЛДЕ ҺАЙЛА!

**Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцовтың 31 майҙағы 286, 287-се бойороҡтары менән башланғыс дөйөм һәм төп дөйөм белем биреүҙә яңы федераль дәүләт стандарттары раҫланды.**

Улар Рәсәй халыҡтарының мәҙәни күп төрлөлөгөн, тел мираҫын һаҡлауға һәм үҫтереүгә, туған телде өйрәнеү һәм туған телдә уҡыу мөмкинлеге хоҡуғын тормошҡа ашырыуға, илебеҙҙең күп милләтле халҡының рухи һәм мәҙәни ҡиммәттәренә эйә булыуға йүнәлтелгән.

Уҡыу пландары РФ-ның дәүләт телдәрен, шулай уҡ туған телде, субъекттарҙың дәүләт телдәрен, шул иҫәптән рус телен дә уҡытыуҙы һәм өйрәнеүҙе тәьмин итә. Мотлаҡ өйрәнеү өлкәһендә "Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу" (башланғыс кластарҙа), "Туған тел һәм туған әҙәбиәт" (дөйөм төп белем биреү кимәлендә) индерелгән, тимәк, ата-әсәләрҙең (балаларҙың законлы вәкилдәре) ғаризаһы һәм белем биреү ойошмаһының мөмкинлеге булғанда туған тел йәки дәүләт теле, туған телдә әҙәби уҡыу кеүек предметтар өйрәнелә аласаҡ. Белем биреү процесында ҡатнашыусылар булдырған уҡыу планында, шулай уҡ ата-әсәләр һайлауы буйынса, уҡыусыларҙың этномәҙәни ихтыяжын иҫәпкә алған предметтар ҙа уҡытылыуы мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Күҙҙәргә

❖Күҙ насар күргәндә иртә яҙҙан алып көҙгә тиклем кесерткән ашау файҙалы. Бының өсөн бер ус кесерткәнде ағып торған һыуҙа йыуып, һығырға. Саҡ ҡына тоҙ ҡушып, күбекләнгәнсе ус менән ыуаларға. Ошондай бер нисә ус кесерткәнде ризыҡланғандан һуң көнөнә 1-2 тапҡыр ашарға. Тәүге көндәрҙә кесерткән эсәктәрҙе йомшарта.

❖5 ҡалаҡ йәш кесерткәнгә 200 мл һыу ҡойоп, 3-5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Уның менән бергә көнөнә 2 тапҡыр ашағандан һуң 1-2 балғалаҡ арпа ҡуры эсергә.

❖Петрушка һәм кишер һуттарын 1:3 нисбәттә ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда берәр ҡалаҡ эсергә.

### Ҡурылдай астмаһы

Ваҡланған 2 ҡалаҡ шалҡанға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмәне тигеҙ бүлеп көнөнә 4 тапҡыр, йәки төнгөгә ҡарай 1 стаканды тотош эсергә.

### Сәсәтмә

❖Ҡара ҡарағат емеше бала сәсәтмә (коклюш) менән ауырығанда ярҙам итә. Дауа өсөн 1 ҡалаҡ ҡара ҡарағат емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылы әйбер менән төрөргә һәм 2 сәғәт төнәтергә. Баланың йәшенә ҡарап, көнөнә 4 тапҡыр сирекләп йәки яртышар стакан эсерергә.

❖1 ҡалаҡ ваҡланған ялан туҡранбашының үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, әйбер менән төрөргә һәм 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә. Ашарҙан 20 минут алда көнөнә 4 тапҡыр балаға йәшенә ҡарап 1-әр ҡалаҡ, йә 2 ҡалаҡ, йә сирек стакан эсерергә.

### Бөйөр

Бөйөрҙәге ҡомдо күрәгә сығарырға ярҙам итә. Бының өсөн ас ҡарынға 200 грамм күрәгә ашарға кәрәк. Төшкә диклем бер нәмә лә ашарға һәм эсергә ярамай. Дауаланыуҙың 8-10 көнөнә бәүелдә ҡом күренә. Дауаланыу былай барырға тейеш: 10 көн күрәгә ашарға, 10 көн туҡтап торорға һәм ҡабатларға. Тулыһынса һауығыу өсөн 10 кг күрәгә ашау кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Һәр бер халыҡ йыры айырым бер тарихҡа нигеҙләнгән икәне беҙгә яҡшы мәғлүм. Шуға ла ҡурайсылар конкурсында ҡатнашыусыларҙан оҙон көйҙө башҡарыу менән бер рәттән, уның тарихын һөйләп биреү мотлаҡ талап ителә.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Ҡулланылышта ағас булмаған ауыл тормошон күҙ алдына ла килтереп булмай. Башҡорттарҙың малсылыҡ-игенселек көнкүрешендә малсылыҡ сеймалы һәм металдар менән бер рәттә ағас материалдар борондан урын алған. Ағас торлаҡ һәм хужалыҡ биналарын төҙөүгә, эш ҡоралдары, һауыт-һаба, юл йөрөү саралары, кәрәк-яраҡтар эшләү өсөн тотонолған. Эш өсөн кәрәкле әйберҙәр яһалған. Әммә күбеһе (кәмә, ҡатмарлы яһалышлы яндар, урынағастар, көбө һәм аш-һыу һауыттары) төҙөлөшөнөң уйланып етелеүе, биҙәктәренең ентекләп, урынына еткереп эшләнеүе буйынса сәнғәт өлгөһөнә бәрәбәр булған. Әйберҙәрҙең камил үрнәге тиҫтәләгән быуын оҫталарының тәжрибәһе менән барлыҡҡа килгән.

Башҡорт халыҡ сәнғәтенең бер традицион төрө - ағасты художестволы эшкәртеүгә - тикшеренеүселәр һуң ғына иғтибар итә. XIX быуаттың һуңғы ун йыллығына тиклем фәнни ҙә, публицистик та әҙәбиәттә башҡорттарҙың ағас семәрләүе тураһында аныҡ мәғлүмәттәр булмаған. XVIII быуаттағы академик экспедициялар ҡатнашыусылары П.С. Паллас һә И.И. Лепехин, аҙаҡ XIX быуаттың сәйәхәтселәре һәм ғалимдары ла күпселек ағастың сәнәғәттә һәм хужалыҡтағы тар ҡулланылышы тураһында яҙған (күмер үртәү, ыҫмала һәм дегет ҡыуыу, йүкә һыҙырыу, утын әҙерләү). Тап ошо төр эшмәкәрлектәрҙе күҙ уңында тотоп яҙа авторҙар һәм хатта тау-урман төбәгендә йәшәгән ҡатайҙар һәм бөрйәндәрҙә булған тикшеренеүселәр ҙә (А. Игнатьев, Л. Бергхольц) башҡорт һырсыларының үҙенсәлекле оҫталығын аса алмаған. Элек малсы булған халыҡ ултыраҡ тормош талап иткән һөнәрҙәр менән етди шөғөлләнә алмай, тигән кире ҡараш башҡорт ирҙәре "оҫталыҡ менән шөғөлләнмәй һәм бер ниндәй кәсептәр белмәй" йәки "әгәр һалабаштан сбруй ишеү, һалабаш бәйләү, септә һуғыу һәм һалабаштан ат ябыуы эшләүҙе кәсеп тип иҫәпләмәгәндә, башҡорттар бер төрлө һөнәрҙәр менән дә шөғөлләнмәй" тигәнерәк ҡәтғи фекерҙәр тыуҙырған. Иң яҡшы осраҡта башҡорт кәсептәренең яңы тамыр йәйеп килеүе тураһында әйтелә. Ә шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың көнкүрешен тасуирлаған мәҡәләләрҙә ағас һауыт-һаба, ҡымыҙ көбөләре һәм ижауҙары, эскәмйәләр һәм семәрле аҫлыҡтар телгә алына. Тикшеренеүселәр был әйберҙәргә ҡарап, шуларға ярашлы һөнәрҙәр ҙә үҫешеүе тураһында уйланырға тейеш булған да бит. Әммә был фекер һирәк осраҡта ғына тыуған.

1882 йылда Мәскәү ҡалаһында уҙған Сәнғәт-сәнәғәт күргәҙмәһендә "урындағы сәнғәт әҫәрҙәре" араһында Ырымбур губернаһынан семәрле башҡорт ижауы, ағас туҫтаҡ, "приборлы" эйәр, боронғо ян, ҡурай һәм Европа обывателдәре күҙлегенән экзотик һаналған әйберҙәр ҡуйылған. Әйткәндәй, семәрле ижауҙы "Толковый словарь живого великорусского языка" китабы авторы В.И. Даль күргәҙмә өсөн бүләк итә. Аҙаҡ был әйберҙәр Дашков (Румянцев) этнография музейы фондтарында ҡала. Һуңыраҡ музей тағы ла 1889 һәм 1890 йылдарҙа антрополог, этнограф П.С. Назаров Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышынан йыйған бай йыйылма менән дә тулылана. Ғалим бөрйән һәм үҫәргән ырыуҙары вәкилдәрендә, Һаҡмар йылғаһының үрге ағымындағы түңгәүерҙәрҙә, Ыҡтың көньяғында үрге ағымында йәшәгән ҡыпсаҡтарҙа була. Ул бүләк иткән өс тиҫтәнән артыҡ әйберҙәр араһында 2 семәрле ижау, ағас ҡалаҡтар, һалманы һурпанан һоҫоу өсөн ҡалаҡ, туҡыу һоҫаһы һәм ҡабаһы, көпшә, ярма өсөн һөҙәк улаҡ һ.б.булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан**

*ШАНДАУ*

# ҺӘР ЙЫРЫБЫҘ...

## халҡыбыҙ рухын данлай

**Ғаиләбеҙ менән яратып уҡыған "Киске Өфө" гәзитендә (24-се һан) башҡорттоң оҙон көйҙәренә бәйле "Һәр башҡорт оҙон көй башҡарһа... " тигән баш аҫтында бик йөкмәткеле, шул уҡ ваҡытта ғибрәтле мәҡәлә баҫылып сыҡты. Иманым камил, мәҡәлә гәзит уҡыусыларҙың береһен дә битараф ҡалдырмағандыр, моғайын, тик ниңәлер уның буйынса үҙ фекерен белдереүселәр күренмәй әле.**

Яҙыуға әллә ни оҫталығым булмаһа ла, түҙмәнем, үҙемдең уйҙарымды ҡағыҙға төшөрөүҙе бурысым тип күрҙем. Был мәҡәләнең авторы заманыбыҙ зыялыларының береһе, танылған ҡурайсы ғына түгел, ә талантлы журналист, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Юлай Ғәйнетдинов. Һүҙемдең башында уға, шулай уҡ мәҡәләне баҫтырып сығарған "Киске Өфө" гәзитенә рәхмәтемде белдерәм. "Башҡорт халҡының милли характеры бигерәк тә оҙон көйҙә тулы бирелгән", - тип бик дөрөҫ әйтелгән унда. Характеры ғына түгел, ә бөтөн тарихы ла, тип әйтергә кәрәк.

Әмәлгә ҡалғандай, гәзиттең ошо һаны сыҡҡан көндәрҙә мин тап халыҡ йырҙары хаҡындағы әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһына инем. Ысынлап та, башҡорт халҡының тарихын ентеклерәк өйрәнәйем, тиһәң, уның боронғо йырҙарын, оҙон көйҙәрен яҡшы белеү мотлаҡ икәненә инандым. Әйтеүемсә, был көндәрҙә мин әҙәби ғилем аҡһаҡалы, филолог, академик һәм яҙыусы Ғайса Хөсәйеновтың "Тормош" тип аталған парсалар китабын уҡып сыҡтым. Әҫәрҙең "Ижад" тигән бүлегендә башҡорт халыҡ йырҙары хаҡында шулай уҡ бик күп мәғлүмәттәр бирелә. "Башҡорт йырҙары - үҙе бер тарих. Һәр бер атаҡлы йыр үҙе бер драматик поэма", - тип яҙа автор һәм яҙыусы Сәғит Агиштың, халыҡ йырҙарының хатта бер фразаһында романлыҡ материал ята, тигән һүҙҙәрен килтерә. Һәр бер халыҡ йыры айырым бер тарихҡа, легендаға нигеҙләнгән икәне беҙгә яҡшы мәғлүм. Юҡҡа ғынамы ни, республика ҡурайсылар конкурсында ҡатнашыусыларҙан оҙон көйҙө башҡарыу менән бер рәттән, уның тарихын һөйләп биреү мотлаҡ талап ителә. Бик дөрөҫ шарт ҡуйылған, сөнки һәр бер оҙон көй халҡыбыҙ тарихын көйләй һәм һөйләй. Ана шул легенда һәм тарихтарҙан, Сәғит Агиш әйтмешләй,тотош драматик әҫәрҙәр серияһы тыуған да инде: "Ашҡаҙар", "Шәүрәкәй", "Башҡорт туйы" (М.Буранғолов), "Маҡтымһылыу" (Д.Юлтый), "Ҡарлуғас" (Б.Бикбай), "Серле ҡунаҡ" (Ш.Шәһәр), "Шәрәф ҡасҡын" (Т.Морат), тип яҙа Ғ.Хөсәйенов. Яҙыусы был әҫәрендә шулай уҡ кантон йырҙары һәм ҡасҡындар хаҡындағы йырҙар буйынса ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә.

Шундай киң билдәле рухи хазиналарыбыҙҙы ла үҙләштерергә батырсылыҡ итеп, урлап-йолҡоп маташыуҙар күңелдә нәфрәт уята. "Киске Өфө"лә яҙылыуынса, тарихта һай йөҙөүсе, әллә башҡа сәбәптән, ҡайһы бер татар авторҙарының беҙҙең донъяла берҙән-бер дан ҡурайыбыҙҙы ғына түгел, йыр-көйҙәребеҙҙе лә үҙләштерергә маташып ятыуҙары тарихта булмаған ояттһыҙлыҡ тураһында һөйләй. Ә, бәлки, наҙанлыҡтыр ҙа был.

Юлай Ғәйнетдиновтың был мәҡәләһе башҡорт халҡының боронғо йыр - оҙон көйҙәрен башҡарыусы атаҡлы йырсыларыбыҙ Абдулла Солтанов, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Рамаҙан Йәнбәков, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Сөләймән Абдуллин, Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Ғәли Хәмзин һәм башҡаларҙың фоторәсемдәре менән биҙәлгән. Бына ул халҡыбыҙҙың оҙон көй, боронғо йыр-моңдары рыцарҙары! Йырҙарыбыҙ-көйҙәребеҙҙе уларҙан да абруйлыраҡ, уларҙан да дәлиллерәк, уларҙан да талантлыраҡ яҡлаусы һәм һаҡлаусылар юҡтыр. Ут күршеһе моңон урлау - тарихта булмаған ояттһыҙлыҡ. Халҡыбыҙ әйтмешләй, урлыҡ башы - алдыҡ, урлыҡ башы - хурлыҡ; урлаған менән урт тулмаҫ, урлағандан итәк-ең оҙаймаҫ.

"Һәр башҡорт оҙон көй башҡарһа, тарихы юғалмаясаҡ..." тигән был мәҡәләне уҡығында рухи хазиналарыбыҙ өлгөләренә бысраҡ ҡулдарын һуҙған әҙәмдәрҙең ҡылығынан нисек ярһыуымды белһәгеҙ икән... Ләкин мәҡәлә авторы Юлай Ғәйнетдинов әлеге уғрылар адресына һеңдерә генә әйтеп, был хаҡта интеллигенттарса әҙәпле тон менән бәйән итеүе миңә, бер яҡтан, аңлашылды: автор үҙенең хаҡлығына ышана. Башҡорт моңон үҙләштереү мөмкин түгел, уның һәр нотаһы башҡорттоҡо, һәр һүҙе башҡорт тарихын һөйләй, халҡыбыҙҙың һынмаҫ рухына, тарихына дан йырлай. Ә намыҫын юйғандар менән әрепләшеү, яманлашыу халҡымдың рух кимәленә тәҫ түгел. Заманында, 1918 йылда уҡ, әлегеләй "дуслар"ға төбәп, бөйөк Бабич әйтмешләй, "...һеҙҙең менән яуаплашыуҙы үҙебеҙҙең ғәли йәнәптәре башҡорт йөрәгенә кәмселек тип беләбеҙ..." Ә шулай ҙа күңелгә бик ауыр... Башҡалар был хаҡта ни әйтер?

**Мәҙинә АЛЛАБИРҘИНА,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

*АФАРИН!*

# ИЖАДТА...

## үҙ юлын эҙләүселәр



**"Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы "Ҡош юлы" йәштәр хәрәкәте менән бергә "Ҡош юлы. Балалар" дүртенсе телевизион конкурстың финалын үткәрҙе.**

Бөтә республиканан 10 бала проекттың финалына йыйылды. Беренсе көндө "Йәйғор" шифаханаһында улар үҙҙәренең сығыштарын әҙерләне. Тимер Йосопов, Альбина Шәмсетдинова, Ришат Сөләймәнов, Ренат Абдулов һәм Илмира Имамова үҫмерҙәр менән йыл башынан эшләне. Уларҙың йәнле аралашыуын телетамашасы аҙна һайын Башҡортостан юлдаш һәм "Тамыр" каналдарында ҡараны. Билдәле музыкант, "Башкавер" төркөмө етәксеһе Илгиз Муллағаләмовтың оҫталыҡ дәресе, телепроект өсөн интервью, репетициялар, киске ултырыуҙар - быларҙың барыһын да ойоштороусылар балалар өсөн әҙерләне.

Финал концерт С. Аксаков исемендәге баҡсала үтте. Унда ҙур ижадҡа тәүге аҙымын яһаған балаларҙың йыры яңғыраны. Күбеһе үҙе сығарған йырҙы башҡарҙы. Уларҙы "Ҡош юлы" йәштәр фестивале лауреаттары, билдәле автор башҡарыусылар Тимур Ямалов, Миңзәлә Яхина, Артур Кәбиров, Рөстәм Миһранов, шағирә Наҙгөл Ғәлиева, "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина баһаланы. Гөлназ Ҡолһарина билдәләүенсә, "Ҡош юлы. Балалар" гитара һәм йыр тураһында ғына түгел. Ул был тормошта үҙеңде, һүҙеңде, юлыңды табыу тураһында ижади реалити-шоу.

Финалға сығыусы Әбйәлил районынан Фидан Абдуллин, Күгәрсен районынан Илүзә Ҡыҙрасова һәм Алһыу Ғәббәсова, Дыуан районынан Зарина Әхмәтғәлина, Өфөнән Арыҫлан Мостафин, Белорет районынан Гөлдәриә Ғималетдинова диплом һәм "Музыкаль арсенал" магазинынан сертификат, махсус номинацияларҙа призлар менән бүләкләнде. Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров "Тамыр" телеканалы режиссеры Ләйсән Мәзитоваға Рәхмәт хаты, Мәләүез ҡалаһынан өсөнсө урын яулаған Айбулат Әхмәтшинға исемле сәғәт тапшырҙы. Ейәнсура районынан икенсе урынға сыҡҡан Рәлиф Бикташев "Самрау" нәшриәте призына лайыҡ булды. Беренсе урынды һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы призын Әбйәлилдән Динислам Ишмырҙин алды. Конкурстың Гран-приһын һәм төп призын Әбйәлилдән Нәркәс Баймырҙина яуланы. Уны меценат музыкант Рөстәм Миһранов тапшырҙы.

✓ Ергән ыҙанында юрматы ырыуы башҡорто Килмәк Нөрөшов етәкселегендәге ихтилалсылар Вологда драгун полкына һөжүм итә, батша һалдаттары, юғалтыуҙарға дусар ителеп, ҡасып ҡотола.



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ДЫУАН - ТАБЫНДАРҒА ТУҒАН



Байлар олоҫоноң барҙаҡлы башҡорто Дөмәй Ишкәев 1706 йылда, Ҡаҙан властарына буйһонмайынса, Әстерхан аша Мәскәүгә юллана. Әммә Ҡаҙанда вице-губернатор вазифаһын биләгән Н. Кудрявцев баш бирмәҫ башҡортто Мәскәүҙән тотоп алып ҡайтырға бойора. Дөмәй Ишкәев Ҡаҙанға алып киленә, уны бында язалап үлтерәләр. Башҡорт илендә оҙайлы ихтилал башланып китә, ул 1704 йылдан 1711 йылға тиклем бара. Ихтилал башында күренекле башҡорт батыры Алдар Иҫәкәев тора.

Яуыз А.Сергеев башҡорт етәкселәрен алдаштырып, Ҡаҙан ҡалаһына мәжлескә саҡыра, бында уларҙы төрлөсә мәсхәрә итәләр: "...вина и меду поставя и зелья положа, в неволю поил, кто и век свой меду и вина не пивали, азей и муллов и ахунов их поил; а ежели кто не станет пить, тех бив палками и насильно поил, и напившися де лежали без памяти, и лежачих де людей порохом палил, солому огнем зажигал, на руки свечи прилеплял, другим в горсти пороху насыпав огнем палил, а збережась лежалых людей сызнова подняв по неволе поил хотя поморить... всякому пьяному лежачим людям, держав против солнца зеркало свое, рожи и головы жег и, который тронется, еще поил, чтобы поморить..."

Быны әшәкелек башҡорттарҙа нәфрәт уята, улар рус полктарына ҡаршы уңышлы операциялар уҙғара, П.Хохловтың 1300 кешенән торған Өфө полкын тар-мар итә, С.Аристовтың һәм И.Риддерҙың драгун һәм һалдат полктарын ҡыҫырыҡлай, хатта Ҡаҙан ҡалаһын штурмларға ниәт итә. Алдар тарханға Көсөк хан улы Морат солтан ярҙамға килә, улар Ҡаҙан ханлығын тергеҙеү планын ғәмәлгә ашырырға уйлай. Башҡорт ихтилалы хаҡындағы хәбәрҙәр бик алыҫ илдәргә тиклем барып етә. Ошо хаҡта рус тарихсыһы С.М. Соловьев ошолай яҙа: "В 1707 году уфимский башкирец, назвавшись султаном, ездил в Константинополь и Крым просить помощь делу единоверцев; потом пробрался на Кубань, оттуда к горским народам, чеченцам, мичкисам, аксайцам, и прельстил их, выдавая себя за святого и за султана башкирского. Горцы провозгласили его своим владыкою. Скоро пристали к нему кумыки, аграханские козаки-раскольники, терские кочевые окочены и татары. Собравшись со всеми этими народами, святой султан подошел 12 февраля 1708 года к Терской крепости, сжег слободы и острог".

Ошо осорҙа шведтар менән һуғыш хәрәкәттәре алып барған Петр I 1709 йылда Сенатҡа башҡорттар менән килешеүгә өлгәшеү хаҡында бойороҡ биреп, граф И.Г. Головинды (канцлер Г.И. Головиндың улын) махсус грамота менән башҡорттарға ебәрә: "...чтобы они, башкирцы, были его царскому величеству в подданство по-прежнему, а за то обнадежить его царского величества милостию... Ежели они, башкирцы, притом будут просить, чтоб их в Казани не ведать и в том его государевой милостию их обнадежить".

Батша властарын Башҡорт ерҙәренә һалым түләүҙән ҡасып килеүселәрҙең күбәйеүе лә борсой. Башҡорттар ҡасҡындарҙы властарға тотоп биреүҙән баш тарта. Мәҫәлән, капрал Вепрейскийҙың рапортында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "Дуванейской волости башкирцы, собрався многолюдством, беглецов отбили...". Ихтилал тағы ла бер нисә йыл дауам итә. Властарға башҡорттарҙың талаптарын үтәүҙән башҡа әмәл ҡалмай. Фельдмаршал Б.П. Шереметев Ф.А. Головинға 1706 йылда уҡ ошолай мөрәжәғәт итә: "Не надобет их слишком злобить, полно нам покуда шведов". Ә Ҡаҙан губернаторы П.М. Апраксин 1709 йылда Петр I яҙған хатында ныҡ зарлана: "О тех башкирцах доношу тебе, государю: народ их проклятый, многочисленный и военный да безглавный, никаких над собою начал, хотя б так, как на Дону, подобно атаманы, и таких не имеют".

Башҡорт халҡы менән батша хөкүмәте араһындағы килешеүгә тик 1728 йылда ғына өлгәшелә. Мәскәүгә, батша һарайына башҡорт делегацияһы килә, уларға император Петр II ошолай аталған исемле Указы тапшырыла: "Об отделении Уфимской провинции от Казанской губернии, о состоянии оной в особенном ведомстве Сената". Өфө воеводаһына башҡорттарҙы ҡыйырһытыу ҡәтғи тыйыла: "башкирцам и прочим иноверцам никакого озлобления и обид и налог отнюдь никому никаких не чинить... и во всем поступать по данным вам от Предков Наших Великих Государей жалованным грамотам". Шулай уҡ башҡорт вәкилдәренә туранан-тура батша хөкүмәтенә мөрәжәғәт итеү хоҡуғы ла бирелә: "А когда вы пожелаете для челобитья и всяких своих нужд ехать к Москве или в Сенат, тогда для проезду давать ему вам проезжия письма за своею рукою, а воспрещения в том вам не чинить". Башҡорттарға тик бер генә шарт ҡуйыла, ул батшаға тоғролоҡ һаҡлауҙан ғибәрәт: "...того ради надлежит вам, видя Нашу Императорского Величества к себе милость, служить Нам верно, как деды и отцы ваши служили и положенный ясак платили и беглых русских, мордвы, чуваш и черемис и никаких народов людей, подданных Наших, не принимать и не держать". Шулай итеп, башҡорт халҡы Рәсәй составында үҙҙәренә электән бирелгән айырым хоҡуҡтарын яңынан тергеҙеүгә өлгәшә, бер ни тиклем кимәлдә Рәсәй империяһының үҙаллыҡ хоҡуғы булған өлөшө булып ҡала.

Әммә Башҡорт илендә тыныс тормош оҙаҡҡа һуҙылмай. Батша чиновнигы И.К. Кирилов Ырымбур ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу маҡсатында 1735 йылда Үр (Орь) йылғаһы буйына килә.

Көньяҡ башҡорттары бының менән һис килешергә теләмәй: Ергән ыҙанында юрматы ырыуы башҡорто Килмәк Нөрөшов етәкселегендәге ихтилалсылар Вологда драгун полкына һөжүм итә, батша һалдаттары, юғалтыуҙарға дусар ителеп, ҡасып ҡотола. Был 1735 йылдан 1740 йылға тиклем һуҙылған ихтилалдың башы була. Быға тиклем Һиндостан тарафтарына хәрби поход ойоштороргa ниәт иткән империя генералдарына батша барса көстө башҡорттарҙы баҫтырыуға йүнәлтергә бойора. Был хаҡта тарихсы А.И. Добромыслов шундай мәғлүмәт бирә: "...башкиры во главе с Кильмяк-Абызом... пришли к заключению, что с постройкой города и крепости на устье Ори Башкирия постепенно будет окружена с восточной стороны и таким образом навсегда войдет в состав России, и, кроме того, не будет никакой возможности возвратить от киргиз те земли (северные части нынешней Тургайской области), которые они отняли у них..."

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Сталинградтан - Ворошиловградҡа!

1943 йылдың ғинуары аҙаҡтарында Көньяҡ-Көнбайыш фронты командующийы, армия генералы Н.Ф. Ватутин һәм 5-се танк армияһы командующийы, генерал-лейтенант П.Л. Романенко 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры М.М. Шаймуратов исеменә телеграмма ебәрә. Улар генерал-майорҙы һәм дивизияның шәхси составын 1943 йылдың ғинуарында уҙғарылған боевой операцияларҙа өлгәшкән уңыштары менән ҡотлай. 26 ғинуарҙа Юғары Башкомандующий И.В. Сталиндың рәхмәт белдереүе (благодарность) иғлан ителә. Рәхмәт дивизияның барса шәхси составына белдерелә.

1942 йылдың ноябренән бирле дошман менән ҡаты бәрелештәрҙә туҡтауһыҙ йән аямай һуғышҡан дивизия ысын ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтә, әммә уның төҙүге составының күпселеге (башлыса, башҡорт яугирҙары) сафтан сыға: бик күптәр йә яралана, йә яу яландарында башын һала. Тап шул ваҡытта дивизия яңы алынған яугирҙар менән тулыландырыла - шаймуратовсылар исемлегенә 900 һалдат өҫтәлә.

1943 йылдың 27 ғинуарында тантаналы шарттарҙа һалдат һәм офицерҙарҙың дөйөм йыйылышы уҙғарыла, унда дивизия командиры Минлеғәли Шаймуратов, полк политругы Сәғит Әлибаев, башҡа офицерҙар һәм рядовой һалдаттар сығыш яһай. Комдив үткән алыштарға анализ яһай, батырлыҡ өлгөләре күрһәткән яугирҙарға рәхмәт белдерә. Йыйылышта 117 командир һәм рядовойға орден һәм миҙалдар тапшырыла. Ә алда дивизияны яңы яу-алыштар көтә - Ворошиловград (хәҙерге Луганск) ҡалаһын алыу беҙҙең ғәскәрҙәргә Донбасс ерен дошмандан тулыһынса азат итеү өсөн үтә мөһим була.

Генерал-лейтенант Д.Д. Лелюшенконың 3-сө гвардия армияһы 29 ғинуарҙа немецтарҙың Донбасстағы армия төркөмөнә ҡаршы хәрби операцияға ҡушыла, ә 2 февралдә 8-се атлы корпус та (112-се Башҡорт дивизияһы - уның составында) ошо армия ҡарамағына күсерелә. Беҙҙең ғәскәрҙәр 4 февралдә Ворошиловград ҡалаһына яҡынлаша, әммә бында дошмандың бик көслө оборона һыҙығына юлыға.

8-се атлы корпус та 31 ғинуарҙа уҡ Ворошиловград йүнәлешендә һөжүмгә күсеү хаҡында боевой приказ ала. 112-се дивизия 1943 йылдың 2 февралендә боевой приказда билдәләнгән тораҡ пункттар йүнәлешендә походҡа ҡуҙғала. Дивизия колоннаһы башында 275-се полк һәм 101-се артиллерия-миномет дивизионы бара. Дошман Надеждино ауылы янында ҡоролған засаданан беҙҙең яугирҙарға ут яуҙыра башлай, уның 5 танкыһы, бер ротаға яҡын пехотаһы атакаға күтәрелә. Әммә беҙҙең яугирҙар немецтарҙың 2 танкыһын яндыра, 50-гә яҡын һалдат һәм офицерын юҡ итә. Дошман сигенергә мәжбүр була. 2 саҡрымлап алға барғандан һуң фашистар яңынан һөжүм башлай, алыш көн буйына дауам итә. 275-се һәм 313-сө полк атлыҙары дошманды Белоскелеватый ауылының төньяҡ яғына тиклем дөрөп алып бара. Бында, Лысый - Белоскелеватый - Орловка - Поповка ауылдары рубежында, дошмандың бик ныҡлы, көсәйтелгән оборона пункттары була. Беҙҙең яугирҙар өҫтөнә дошман туҡтауһыҙ мина-снарядтар яуҙыра, танкыларға ышыҡланып, немец һалдаттары һөжүмгә күсә. Әммә корпус артиллерияһы, гвардия минометтары ("катюшалар") уты аҫтында дошмандың 900 һалдаты яу яланында ятып ҡала. Ошо рубеждағы алыштар бер нисә көнгә һуҙыла, 8-се кавкорпустың 112-се һәм 55-се атлы дивизиялары ла күп юғалтыуҙар кисерә. 275-се полк командиры Хөсәйен Иҙрисов, уның политбүлек буйынса урынбаҫары Сәғит Әлибаев яралана, дивизия командиры урынбаҫары, полковник А. Березко һәләк була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ике әҙәби телле халыҡтарҙың телдәре генә түгел, үҙҙәре лә юҡҡа сығып бара. Мәҫәлән, мордвалар - эрзә һәм мокша. Улар Волга буйы халыҡтарынан иң интенсив урыҫлашыу процесын кисерә.*

# СИРАТТАҒЫ

## Башҡорт теленең

**Уның барлыҡ дәрәжәләрен һәм регалияларын һанап сығырға ғына ла оҙаҡ ваҡыт кәрәк булыр ине, моғайын. Әммә ул быға мохтаж түгел, хатта бары тик исем-шәрифен әйтеү ҙә етә - һәр кемдең күҙ алдына уның сағыу образы тып итеп килеп баҫа. Башҡортостаны өсөн бихисап матур эштәр башҡарған, меңәрләгән бала һәм уҡытыусы өсөн талапсан һәм һәр белем усағының проблемаһын күреп, уларҙы хәл итергә тырышҡан министр, юғары уҡыу йортонда белем биреү системаһына яңы һулыш өргән педагог, республиканың фән күгендә әллә күпме алтынға бәрәбәр хеҙмәттәр ҡалдырған һәм йәш кадрҙар тәрбиәләгән ғалимә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын үҙ артынан әйҙәүсе лидер, яҡындары өсөн өҙөлөп торған туған, яҡташтары өсөн ғорурлыҡ, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, килендәре өсөн һөйөклө әсәй, ҡәйнә һәм өләсәй. Быларҙың барыһы ла бер кешенең - филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВАның биографияһының ҡыҫҡа ғына бер өлөшө. Был юлы уның менән башҡорт теленең дәүләт статусы алыуына 100 йыл тулыу уңайынан башҡорт теле, уға бәйле мәсьәләләр тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**Бөгөн һеҙ башҡорт тел ғилемендә ҙур урын алып торған шәхестәребеҙҙең береһе. Ошо һуҡмаҡҡа юлды кем һалды, туған телгә һөйөү сығанағы ҡайҙан башланды?**

- Был сығанаҡ минең ғаиләм, ауылымдыр тип уйлайым, сөнки беҙҙең ауыл хәҙерге көндә Учалы, Белорет райондары һәм Силәбе өлкәһе территорияһының бер өлөшө килеп кисешкән урында урынлашҡан. Ҡырҡты тауҙарының дауамы беҙгә килеп етеп, Киләй тауы буйында ултыра, ә беҙҙән артабан Силәбе яҡтарына ҡаҙаҡ далалары - боронғо Оло дала китә. Тауға һыйынып ҡына ултырғас, элек хәүеф-хәтәр булғанда тиҙ генә тауға ҡасып, шунан һөжүмде кире ҡаҡҡан халыҡ. Ысынлап та, беҙҙә һуғыштар күп булған. Үҙебеҙҙең археологтарҙы алып барып, ауыл эргәһендәге ҡурғандарҙы, ауыл эргә-тирәһен ҡараттырғайным, сөнки элек ямғыр яуып үтһә, беҙҙең ауыл урыны булған Һарыҡтүбә тигән ергә барып, мәрйен сүпләй инек. Һәм ауылдағы һәр ҡыҙҙың үҙҙәре эшләп алған ваҡ ҡына мәрйенле муйынсағы була торғайны. Халыҡ, беренсенән, төрлө ырыу-ҡәбилә һәм килгән килмешәктәр менән аралашып йәшәгән, тип уйлайым.

Тел күҙлегенән ҡарағанда, көнсығыш диалект менән көньяҡ диалект беҙҙә килеп тоташа. Шуға күрә ҡайһы бер атамалар беҙҙә бер төрлө, күрше ауылда икенсе төрлө, ҡайһы бер уртаҡ атамалар ҙа бар. Мин уларға бала саҡтан иғтибар иттем. Сөнки Рәхмәт ауылы - ул атайымдың, беҙҙән төп ырыу ауылы, ә ете генә километр арала шул уҡ күбәләк ырыуынан инәйемдең ауылы. Минең инәй тип әйтеүем шул ауыл менән бәйле, ә Рәхмәттә әсәй тип һөйләшәләр. Минең, һеңлемдең теле инәй тип асылған.

Тағы бер йоғонто: ауыл эргәһендәге тауға еләккә йөрөй торғайныҡ. Бер тына еләк йыйғас, беҙҙе эйәртеп алып сыҡҡан әбейҙәр ултырып алып тарих һөйләй торғайны. Улар менән бергә ҡаҙ бәпкәләре лә көтә инек. Ана шул әбейҙәр менән һөйләшеү беҙҙең өсөн тәрбиә мәктәбе булған, шул уҡ ваҡытта улар телебеҙгә һөйөү ҙә тәрбиәләгән. Башҡорт традицияһында атайҙар менән ҡыҙҙарҙың һөйләшеп ултырыуы бик юҡ, инәйем дә донъя көтөп, балалар ҡарап, беҙҙең рухи тәрбиәгә әллә ни тәьҫир итте тип әйтә алмайым. Ә бына өләсәйҙәр, ауылдың әбейҙәре был йәһәттән оло йоғонто яһағандыр, моғайын. Шул уҡ ваҡытта үҙемдә лә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ көслө булғандыр, гелән генә "Нинә улай, нинә былай?" тип төпсөшә торғайным. Телдең төбөнә төшөргә тырышыу, ҡыҙыҡһыныу шул ваҡыттарҙа уҡ барлыҡҡа килгәндер. Ә 8-се класты тамамлап, Белорет педагогия училищеһына уҡырға барғас, төркөмөбөҙҙөң яртыһын тиерлек Инйәр буйы ҡыҙҙары һәм малайҙары тәшкил итте. Уларҙың: "Анта-мынта йөрөгәнтә, тараҡ, палта ҡулымта",- тип, "а" өнөн тамаҡ төбөнән сығарып, ә инде ялғауҙар һәм ҡушымталарҙың бөтәһенең дә яңғырау, һаңғырау варианттарында әйтелеүе беҙҙең өсөн бер тетрәнеү булды. Ошо үҙенсәлектәргә иғтибар итеү ҙә телгә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырғандыр тип уйлайым.

Ул заманда студенттар бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа йөрөшә торғайныҡ. Бер әхирәтемә барғас, уның әсәһе: "Фирҙәүес, кәбәркәгә сығып, баҡырсаны индер әле", - тине. "Сығып" һәм "индер" тигәнен анланым, ҡалғандарын анламаным. Шунан ҡарап тороп-тороп йөрөп индем дә, әхирәтемдән: "Кәбәркә, баҡырса нимә була ул?" - тип һорайым. Башҡорт теленең диалекттарына шул ваҡытта ныҡ иғтибар иткәнмендер, ул шул тиклем минең күңелемә һалынғайны. Артабан БДПУ-ла уҡыған ваҡытта "Инйәр буйы һөйләше үҙенсәлектәре" тигән мәҡәлә яҙҙым, шул мәҡәләм менән Мәскәүгә барып, Николай Дмитриевтың юбилейына арналған конференцияла сығыш яһаным. Фәнни етәксем Рәйсә Халиҡова менән берлектә яҙылған ошо мәҡәләм буласаҡ остазым Әҙһәм Рәхим улы Тенишев ярҙамында, әлбиттә, төркиәтселәрҙең ул ваҡытта "Советская тюркология" тигән иң абруйлы журналында баҫылып сыҡты. Һәм артабан аспирантураға ингән ваҡытта Әҙһәм Рәхим улы шул теманы артабан үҫтерергә кәңәш итте. Кандидатлыҡ диссертациямды башҡорт теленең фонетикаһы буйынса яҡланым. Ошо темаға инеп киттем дә, ошо юл мине һуңынан дөйөм тел тарихына, этнографияға, мәҙәниәт, ил тарихына алып сыҡты.

**Быйыл башҡорт теленең дәүләт статусы алыуына 100 йыл тулды. Һеҙ Башҡортостан мәғарифына ла, фәненә лә билдәле өлөш индергән, уҡытыу системаһының да уртаһында ҡайнап йөрөгән кеше буларaҡ, әҙәби телде ҡабул итеүҙә ниндәйҙер эшләнеп бөтмәгән мәлдәр булған тип уйлайһығыҙмы?**

- Әлбиттә, ул заманда бәхәстәр күп булған, төрлө диалекттар вәкилдәре үҙҙәренең үҙенсәлектәрен тәҡдим итергә тырышҡан һәм ниндәйҙер өлөштәрен индергән дә. Әммә ул ваҡытта барыбер дөрөҫ ҡараш булған һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул ителгән. Ни өсөн? Әгәр шул заманда бөгөн дә бик күп бәхәстәр тыуҙырған төньяҡ-көнбайыш диалектын телгә нигеҙ итеп алһаҡ, хәҙер телебеҙ татар теленә әйләнер, башҡорт телен бөтөнләй юғалтыр инек. Шул осор телселәре әҙәби телгә нигеҙ итеп татар теленән айырылған үҙенсәлектәрҙе алған. Шул ваҡыттарҙа уҡ башҡорт теле - татар теленең диалекты, тигән бәхәстәр барған. Хатта билдәле төркиәтселәр шулай тип яҙған. Шул заманда йәшәһәм, мин дә башҡорт әҙәби теле яҡлы булыр, уның үҙенсәлекле өндәрен, өндәр, морфологик системаһын күрһәтер инем.

Лексикаға килгәндә инде, башҡорт теленең лексикаһы бөтөнләй татар теленекенән айырыла. Беҙҙең икмәк-тоҙлоҡ ҡына һүҙҙәр уртаҡ, төпкә төшә башлаһаң, лексика бөтөнләй боронғо, сөнки беҙҙең менталитет, мәҙәниәт икенсе, шөғөлдәребеҙ, кәсептәребеҙ - бөтә нәмә айырым булған. Мин шул заман ғалимдарының тап телде айырып торған мәлдәрҙе һайлауҙарын дөрөҫ тип ҡабул итәм. Артабан, әлбиттә, телде байытыу буйынса эш барған, йәғни һәр диалекттан нимәләр алғандар, нимәләр төшөп ҡалған.

**Бөгөнгө хәл-тороштан сығып фекер йөрөтһәк, башҡорт теле алдында торған проблеманы нисек хәл итергә: артабан да әҙәби телдә генә уҡытыуҙы ҡалдырыргамы, әллә төньяҡ-көнбайыш диалектта уҡытыуҙы ла индерергәме?**

- Беҙҙә әҙәби һәм рәсми, дәүләт теле тип танылған башҡорт теле берәү генә. Әгәр ике әҙәби тел булдырабыҙ тиһәк, башҡорт теленең тамырына балта сабыу буласаҡ, сөнки әле бер әҙәби телде үҫтереүгә аҡса еткерә алмайбыҙ. Чиновниктарҙың юғары вазифалыһы ла, иң бәләкәйе лә бер генә яуап бирә - аҡса юҡ. Мәҫәлән, "Башҡорт халҡы тарихы"ның бер томын сығарыу өсөн генә 1,5 миллион һум аҡса кәрәк булды. Хәҙер беҙгә ундай аҡсаны кем бирә? Шундай аҡса юҡ шарттарҙа аҡсаны бүлгеләү нимәгә килтеререн күҙаллау ҙа ҡурҡыныс. Бөгөн гранттарҙы дәүләттән аҡса алыусы бюджет ойошмаларына бирмәйҙәр, ә төрлө коммерция булмаған йәмәғәт ойошмалары - улар осраҡтан-осраҡҡа ғына эшләүселәр. Шуға мин икенсе әҙәби тел булдырыуға, беренсенән, иҡтисади йәһәттән ҡаршымын.

Икенсенән, минең күҙәтеүҙәрем буйынса, ике әҙәби телле халыҡтарҙың телдәре генә түгел, үҙҙәре лә юҡҡа сығып бара. Мәҫәлән, мордвалар - эрзә һәм мокша. Беҙҙә бит уларҙағы кеүек ике генә түгел, 40-тан ашыу ырыу һәм һәр ҡайһыһының үҙ һөйләше. Мордвалар уртаҡ ҡарарға килә алмағанға күрә, ике әҙәби телдәре бар, бөгөн улар Волга буйы халыҡтарынан иң интенсив урыҫлашыу процесын кисерә.

Уҙған быуаттың 80-се йылдарында Алтайҙа Алтай теле грамматикаһының 100 йыллығына арналған ҙур конференция үтте. Шунда көнсығыш алтайҙарҙың төньяҡ алтайҙарға көньяҡ алтай телен көсләп тағыу мәсьәләһе буйынса фекер алышыу һәм бәхәс барҙы. Бер этнограф: "Үҙем төньяҡ алтай телен йөрөтөүсе. Шуға ҡарамаҫтан, беҙгә ике рәсми тел булдырыу ярамай. Беҙгә көньяҡ диалектка нигеҙләнгән әҙәби алтай теленән баш тартырға кәрәкмәй, юҡһа, былай ҙа бәләкәй халыҡбыҙ (60 мең самаһы), бөтәсәкбеҙ", - тип, төрлө дәлилдәр килтереп сығыш яһаны. Әммә Мәскәү ғалимдары ла хуплағас, телде телеут, чалҡан һ.б телдәргә бүлгеләнеләр һәм бөгөн уларҙа төньяҡ диалектта айырым дүрт рәсми тел барлыҡҡа килде, бишенсеһе - әҙәби тел. Бөгөн алтайҙар интенсив рәүештә телдәрен юғалта. Сөнки төньяҡ алтайҙар урман-тау араһында нисек теләгән - шулай йәшәгән, эргәһендә урыҫтар булһа - урыҫлашҡан, хакаслашҡан, бурятлашҡан. Әҙәби тел берәү генә булһа, бәлки, улай булмаҫ ине.

Әгәр ҙа беҙҙә лә төньяҡ-көнсығыш диалектын айырым әҙәби тел итһәләр, был берләшеүгә килтермәйәсәк, киреһенсә, айырасаҡ. Төньяҡ-көнбайыш диалекты бөгөн оло быуында ғына һаҡланған, ә йәштәр ул диалектты бөтөнләй белмәй. Баҙы йылғаһы буйында "бармаҙы, килмәҙе" тип һөйләгән кешеләр бөгөн юҡ. Ололар бар, әммә уҡытыу, уҡыу һәм бала-сағаға белем биреү, фекер һалыу татар әҙәби телендә алып барыла.

Диалект телдәре йәшәһен, улар һөйләү теле. Мин дә ауылыма ҡайтһам, улар мине ҡабул итһендәр, тип, ололар менән уларса һөйләшергә тырышам. Йәғни халыҡ һөйләшһен ул, диалект телдәрен мөмкин тиклем һаҡларға кәрәк, әммә уны рәсми әҙәби тел итеү - ул зыян. Диалекттың үҙенең урыны бар, әҙәби телдең - үҙ уры-

*Ул заманда бәхәстәр күп булған, төрлө диалекттар вәкилдәре үҙҙәренең үҙенсәлектәрен тәҡдим итергә тырышҡан һәм ниндәйҙер өлөштәрен индергән дә. Әммә ул ваҡытта барыбер дөрөҫ ҡараш булған һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул ителгән. Ни өсөн? Әгәр шул заманда бөгөн дә бик күп бәхәстәр тыуҙырған төньяҡ-көнбайыш диалектын телгә нигеҙ итеп алһаҡ, хәҙер телебеҙ татар теленә әйләнер, башҡорт телен бөтөнләй юғалтыр инек. Шул осор телселәре әҙәби телгә нигеҙ итеп татар теленән айырылған үҙенсәлектәрҙе алған. Лексикаға килгәндә инде, башҡорт теленең лексикаһы бөтөнләй татар теленекенән айырыла. Беҙҙең икмәк-тоҙлоҡ ҡына һүҙҙәр уртаҡ, төпкә төшә башлаһаң, лексика бөтөнләй боронғо, сөнки беҙҙең менталитет, мәҙәниәт икенсе, шөғөлдәребеҙ, кәсептәребеҙ - бөтә нәмә айырым булған. Мин шул заман ғалимдарының тап телде айырып торған мәлдәрҙе һайлауҙарын дөрөҫ тип ҡабул итәм. Артабан, әлбиттә, телде байытыу буйынса эш барған, йәғни һәр диалекттан нимәләр алғандар, нимәләр төшөп ҡалған.*

***✓ Шәжәрәләр иҫке төрки һәм иҫке башҡорт телендә яҙылған. Мәҫәлән Ғ.Соҡорой, Ғ.Кейековтың китаптарын алып ҡарайбыҙ икән, уларҙа иҫке төркиһе лә, иҫке башҡорт теле лә бар. Әммә улар ошо осор теле, бөгөн ул телдәр юҡ.***

# ЯУЛАР ҮРЕ - этимологик һүҙлеге



ны. Бөтә уҡыу-уҡытыу, тәрбиә, матбуғат, мәҙәниәт теле - башҡорт әҙәби теле һәм ошо телебеҙҙе һаҡлау ғына түгел, байытыу кәрәк, әммә уның үҙенсәлеген юғалтыу ярамай.

**Әҙәби тел берәү булырға тейеш тигәнегеҙ менән килешәм, әммә мәғариф өлкәһендә ҡабул ителгән яңы законға ярашлы һәр кем үҙенең телен уҡырға хоҡуҡлы. Хатта рус теле дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыла. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының үҙҙәренең диалектында уҡырға теләүе - уларҙың хоҡуғы...**

- Ә ни өсөн тик төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тураһында ғына һүҙ алып барыла? Улайға китһә, һәр диалектта, һәр һөйләштә уҡытырға кәрәк булып сығамы? Минең ауылымдың йәки Дим буйының "ҫыйыр ҫауам" йәки "анта-бынта" тигәндең дә һөйләше әҙәби телдә түгел. Беҙҙең үҙенсәлекле өндәребеҙ төньяҡ-көнбайыш диалектында ла бар, тик улар татарса уҡытыу һөҙөмтәһендә юҡҡа сыҡҡан. Татарстандың көнсығыш райондары башҡорттарын татарҙар "ҡыҙыл быҙаулар" ти. Йәғни уларҙа ла Ҙ бар. Һауаны һауа тиҙәр, сөнки татар әҙәби телендә лә һауа. Бөгөн төньяҡ-көнбайыш башҡорттары һөйләшендәге үҙенсәлектәр юғалып бөтә яҙған, юғалып бөткән тип әйтергә лә була. Шуға бөгөн был төбәк өсөн эшләнгән әсбапты, күреп торорһоғоҙ, улар ҡабул итмәйәсәк, сөнки ул яһалма, уйлап сығарылған. Сөнки уларҙың нисәмә быуыны татар әҙәби телендә уҡыны, шуға хәҙер туған телебеҙ - татар теле тип йөрөйҙәр.

**Башҡорт халҡының төп документтарының береһе булып шәжәрәләр тора. Улар ниндәй телдә яҙылған?**

- Шәжәрәләр иҫке төрки һәм иҫке башҡорт телендә яҙылған. Тулыһынса төрки булған өлөшө бар, унда башҡорт элементтары юҡ. Мәҫәлән, юрматы шәжәрәһен алып ҡараһаҡ, унда иҫке башҡорт теле икәнлеген күрәбеҙ. Әгәр Ғ. Соҡорой, Ғ. Кейековтың китаптарын алып ҡарайбыҙ икән, уларҙа иҫке төркиһе лә, иҫке башҡорт теле лә бар. Әммә улар ошо осор теле, бөгөн ул телдәр юҡ.

**Бөгөн башҡорт шәжәрәләрен башҡа төрки халыҡтар ҙа үҙҙәренеке тип күрһәтергә тырыша, йәнәһе, уларҙың теле башҡорт теле түгел...**

- Ул ваҡытта, ул осорҙа ниндәй тел уҡытылған йәки белем бирелгән, шәжәрәләр ҙә шул телдә төҙөлгән, йәғни улар иҫке төрки телендә икән, тимәк, шул тел барлыҡ төркиҙәр өсөн дөйөм булған. Шулай уҡ ауылының, ырыуының тарихын яҙыусылар булған, улар барыһы ла иҫке төрки телендә яҙған. Әммә бынан ғына шәжәрә лә, ырыу ҙа, ауыл да башҡа милләттеке булып китмәй бит.

**Боронғо төрки теле барлыҡ төркиҙәр өсөн дә дөйөм тел булып тора, әммә ни өсөн ҡулланылышта иҫке татар теле тигән термин бар, ә иҫке башҡорт теле тигән термин юҡ. Быны нисек аңлатырға?**

- Иҫке татар теле тигән термин - ул иҫке әҙәби төрки теле. Шул осорҙағы иҫке башҡорт теле элементтарын индергән телде беҙгә лә иҫке башҡорт теле тип ҡабул итергә кәрәк. Ҡыҙанысҡа ҡаршы, быға ҡайһы бер ғалимдар ҡаршы булды. Әҙәби тел эшләүселәр ҙә иҫке татар теле тигән терминды ҡулланды, ә иҫке башҡорт теле урынына төрки теле тип кенә йөрөттөләр, шуның касафаты ул. Мин үҙем, мәҫәлән, Мәскәүҙә сыҡҡан "Башкиры" тигән китапта иҫке башҡорт теле тип яҙҙым. Дөйөм тел бит тәүҙә төрки була, шунан һәр бер төбәк үҙенең элементтарын индерә һәм иҫке башҡорт, татар, ҡаҙаҡ һ.б. телдәр барлыҡҡа килә. Үкенескә күрә, ошо терминды индермәү арҡаһында шундай хәл килеп тыуған һәм ошоноң буйынса ғына фекер йөрөтәләр. Әммә беҙгә был терминды ла ҡулланылышҡа индерергә кәрәк: иҫке башҡорт теле.

***Иҫке татар теле тигән термин - ул иҫке әҙәби төрки теле. Шул осорҙағы иҫке башҡорт теле элементтарын индергән телде беҙгә лә иҫке башҡорт теле тип ҡабул итергә кәрәк. Дөйөм тел бит тәүҙә төрки була, шунан һәр бер төбәк үҙенең элементтарын индерә һәм иҫке башҡорт, татар, ҡаҙаҡ һ.б. телдәр барлыҡҡа килә. Үкенескә күрә, ошо терминды индермәү арҡаһында шундай хәл килеп тыуған һәм ошоноң буйынса ғына фекер йөрөтәләр. Әммә беҙгә был терминды ла ҡулланылышҡа индерергә кәрәк: иҫке башҡорт теле. Беҙҙең әҙәби телебеҙ 20-се йылдарҙа ғына барлыҡҡа килгән әҙәби тел түгел. Ул иҫке башҡорт теле рәүешендә элек тә, 18-се быуатта, быуат башында, революцияға тиклем булған. Уға тиклем - төрки теле, унан алда - боронғо ҡомартҡылар теле булған. Был телдәр классификацияһы бар. Быны шуларҙы халыҡҡа еткерергә кәрәк.***

Беҙҙең әҙәби телебеҙ 20-се йылдарҙа ғына барлыҡҡа килгән әҙәби тел түгел. Ул иҫке башҡорт теле рәүешендә элек тә, 18-се быуатта, быуат башында, революцияға тиклем булған. Уға тиклем - төрки теле, унан алда - боронғо ҡомартҡылар теле булған. Был телдәр классификацияһы бар. Быны шуларҙы халыҡҡа еткерергә кәрәк. Әммә тағы бер проблема - халыҡҡа еткереп барыр өсөн кадрҙар, шул уҡ әҙәби тел, иҫке башҡорт теле һ.б. тураһында яҙырға кеше лә, ваҡыт та юҡ.

Беренсе әҙәби тел грамматикаһы - ул Дмитриевтыҡы. Икенсеһен беҙҙең институт Әхмәт Юлдашев етәкселегендә эшләй. Хәҙер өсөнсөһөн - башҡорт әҙәби теленә яңы ҡараштар менән яҙылған грамматика эшләргә кәрәк.

**Һеҙ терминологик һүҙлектәр төҙөү һәм сығарыу буйынса ла ҙур эш башҡараһығыҙ. Әммә, айҙа ла таптар булған кеүек, ҡайһы бер атамаларҙың бер урында бер төрлө, икенсеһендә - икенсе төрлө яҙылыуы бик йыш бәхәстәр тыуҙыра. Ғөмүмән, уртаҡ фекергә килеү өсөн Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Терминология хеҙмәте менән хеҙмәттәшлек булдырылғанмы?**

- Элек улар менән бик матур эшләнек. Үҙебеҙҙең һүҙлектәрҙе алып барып фекер алышыуға сығара инек. Кемдер өҫтәй, кемдер ниндәйҙер һүҙҙе алып ташларға тәҡдим итә. Әммә мәсьәләнең икенсе яғы: мәҫәлән, нәшриәттәрҙең үҙҙәренең мөхәррирҙәре бар. Шулай уҡ мәғариф буйынса ниндәйҙер һүҙлек сыҡһа, министрлыҡтың үҙ комисияһы бар һәм улар үҙҙәренсә төҙәтеүҙәр индерә, һөҙөмтәлә шундай айырмалыҡтар килеп сыға. Ошо мәсьәлә буйынса Терминология хеҙмәтендә фекер алышыу ойоштороорға тигән уй бар. Әлбиттә, был йүнәлештә эшләй торған эштәребеҙ бик күп. Дөйөм алғанда, телгә ҡағылышлы комиссияларҙың, советтарҙың, комитеттарҙың эшен күтәрергә лә күтәрергә әле. Элегерәк Хөкүмәттә тел мәсьәләһе бик йыш күтәрелә, муниципалитет башлыҡтарын баҫтырып ҡуйып кәрәктәрен бирәләр ине, бөгөн ундай талап та, тикшереү ҙә юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, комиссиялар тейешле кимәлдә эшләмәй.

**Бөгөн тәржемә мәсьәләһе лә бик киҫкен тора, кем башҡортса белә - шул тәржемә эшләй, тигәндәй. Шуға тәржемәләрҙә лә хаталар күп, хатта уйламаған һүҙҙәр осрап ҡуя. Был проблема бер бөгөн килеп сыҡмаған, әммә һаман да берҙәм тәржемә үҙәге юҡ, йәғни уларҙы бер урында белгестәр эшләргә тейеш, әммә быны өсөн ниндәйҙер структура булыуы мөһим...**

- Бер мәл Өфө ҡалаһы хакимиәте үҙенең тәржемәләрен беҙҙең институт белгестәренән тикшертеп ала торғайны. Әммә был өҫтәмә эш кеүек килеп сыға, сөнки махсус был эш менән шөғөлләнгән бүлек йәки белгес юҡ, барыһы ла эш араһында ғына эшләй ала. Ә тәржемә бит ул ябай ғына эш түгел, унда телдең, һүҙҙең үҙенсәлеген, хатта ниндәй объект, ниндәй контекста ҡулланылыуын белергә, тойорға кәрәк. Махсус тәржемә үҙәген асыу тураһында фекер күптән йәшәй һәм уны йә Башҡортостан Фәндәр академияһында, йә икенсе бер структурала ойоштороорға мөмкин. Быны йәмәғәт башланғысында ҡалдырырға ярамай, сөнки ул бик ауыр, ҙур, яуаплы эш.

Заманында беҙ һәр бер ауылдың, ҡаланың урам исемдәрен, йылғаларын, тауҙарын, барлыҡ топонимияһын тәржемә итеп биргәйнек. Хәҙер уларҙы яңынан рәткә һалып, етешһеҙлектәрен иҫәпкә алып, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды өр-яңынан эшләй ала тип уйлайым. Сөнки хәҙер топонимия һүҙлеген яңыртырға, һәр ерҙә ауылдарҙан башлап район-ҡала кимәлендә атамаларҙы алмаштырырға кәрәк.

Бөгөн шулай уҡ тағы бер проблема бар - топонимдарыбыҙ юғалып бара. Белорет районындағы Өшөрә йылғаһы - Шураға, Мәләүез районындағы Һәргәй ауылы - Сергейға әйләндерелергә генә тора. Шундай хаталар булмаһын өсөн үҙәк хеҙмәткәрҙәре урындарға сығып, тикшереп, төҙәтеп йөрөргә, урындарҙа үҙҙәренең вәкилдәрен ҡуйырға тейеш. Әлбиттә, бының өсөн эш урыны булдырырға, эш хаҡы түләргә кәрәк. Ул сағында һәр кем үҙ районының, ҡалаһының тарихи атамаларын һаҡлап ҡалырға, хаталарҙы төҙәтергә ярҙам итер һәм был эш бер осраҡтан икенсеһенә тиклем генә башҡарылмаҫ, ә даими алып барылыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙының тырышлығы, ныҡышлығы һөҙөмтәһендә Башҡортостан башҡорт теленең 10 томлыҡ академик һүҙлегенә эйә булды. Унда һәр һүҙгә аңлатма бирелә һәм ул рус теленә тәржемә ителә. Ә инде баш һүҙе инглиз һәм төрөк телендә яҙыла, сөнки бөтә донъя төркиәтселәре барыһы ла төрөк телен белә.**

**Әкрәм Бейешевтың, диалектологтарҙың һүҙлектәре, диалектологик атлас, терминологик һүҙлектәр менән бер рәттән, был фундаменталь хеҙмәт тә тел ғилемендә лайыҡлы урын алды. "Хәҙер Этимологик һүҙлек эшләү ниәтем һәм планым бар. Беҙҙең һәм беҙҙән һуңғы быуын ғалимдары бик булмағанлыҡтан, коллегаларым барыһы ла йәш, шуға эш ауырыраҡ бара, сөнки йәштәр телде белмәй, дөрөҫөрәге, һөйләшеү телен беләләр, уның төбөн, мәҫәлән, "баш" һүҙенең 30 мәғәнәһен белмәйҙәр. Ошондай шарттарҙа ла, Алла бойорһа, яйлап үҫешеп, этимологик һүҙлекте эшләп сығырбыҙ тигән өмөттәмен. Башҡорт теленең этимологик һүҙлеге - ул тел ғилеменең иң-иң юғары нөктәһе буласаҡ", - тип киләсәккә уй-ниәттәре менән бүлеште тынғыһыҙ ғалимә. Алдына алған икән, тимәк, уны тормошҡа ашырасаҡ ул.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ *Китаптың йөгонтоһон бер нәмә лә алмаштыра алмай. Күпме генә электрон баҫмалар тәҡдим ителмәһен, барыбер ҡулыңа китап алып, уға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтып, уйланып ултырып уҡыуға бер ни етмәй!*



БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте - Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй Федерацияһында иң абруйлы нәшриәттәрҙең береһе. Ул 1919 йылдың 16 октябренән бөгөнгә көнгә тиклем башҡорт, рус, татар, инглиз телдәрендә ижтимағи-сәйәси, нәфис әҙәбиәт, балалар өсөн китаптар, дәреслектәр, уҡыу-уҡытыу әсбаптарын сифатлы һәм үҙ ваҡытында сығарыу өсөн күп көс һала.**

**Китап - белем шишмәһе. Яҡшы китап - иң ғәҙел дуҫ. Уҡыған ил уңыр, уҡымаған ил туҙыр. Ташҡа баҫылған борондан килгән халыҡ мәҡәлдәрендә дөрөҫлөк ярылып ята. Ә хәҙерге заман өсөн улар актуалме? Интернет селтәре, юғары технологиялар үҫешкән мәлдә китап уҡыуға ваҡыт бармы? Ғөмүмән, китаптың әһәмиәте нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға бөгөн Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте директоры Илһам Миңлеғәле улы ЙӘНДӘУЛӘТОВ яуап бирә.**

# УҠЫҒАН ИЛ УҢЫР



**"Бөгөн кеше китап уҡымай" тигән фекер нығынып бара. Шуның менән килешәһегеҙме?**

- Былдай фекерҙе үҙе китап уҡымаған кеше генә әйтә ала. Китап уҡыу ул беҙҙе рухи яҡтан байыта, уй-фекерҙе тәрәнәйтә, башҡалар менән аралашыуҙы иркенәйтә. Һәр нәмәгә үҙ ҡарашы булған, төрлө яҡлап үҫешкән, эрудициялы шәхестең формалашыуы өсөн китап алыштырғыһыҙ дуҫ. Урыҫ та бит: "Кто не читает книгу, тот перестает мыслить", - ти. Милләт ҡото - китап ул. Ә "Китап" нәшриәте - шул ҡотто һаҡлаусы, ҡурсалаусы, ишәйтеүсе. Һәр китап - авторҙың, уны баҫмаға әҙерләгән хеҙмәткәрҙәрҙең аҡыл һәм зиһен көсө, хыял ынтылышы, күҙ нурҙары тупланмаһы.

Мәшһүр Шәйехзада Бабич: "Апасыҡ тор һәр ваҡытта, эй, китап, баҡһам һинә", - тигән. Әлеге мәлдә заман технологиялары алға киткән, кешеләр күберәк интернетта, социаль селтәрҙәрҙә ултырған мәл. Әммә халыҡ интернетҡа сумды ла, китаптан баш тартты, тимәҫ инем. Китаптың йөгонтоһон бер нәмә лә алмаштыра алмай. Күпме генә электрон баҫмалар тәҡдим ителмәһен, барыбер ҡулыңа китап алып, уға ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтып, уйланып ултырып уҡыуға бер ни етмәй! Барыбер ҙә шуны аңлай хәҙерге китап уҡыусы һәм беҙҙең нәшриәт тәҡдим иткән баҫмаларҙы һатып ала йәки китапханаларға барып уҡый. Бөгөнгә көндә бигерәк тә тарих менән ҡыҙыҡһыныусылар бермә-бер артты, улар өсөн тарихи әҫәрҙәр, повестар, хикәйәләрҙән торған йыйынтыҡтар нәшер ителә. Шиғриәт тә бушҡа ижад ителмәй ул. Беҙҙең халыҡ мөкиббән китеп шиғыр ярата. Бигерәк тә "Йөрәк һүҙе" проектынан һуң поэзияны үҙ итеүсе уҡыусыларыбыҙ бермә-бер артты, тип әйтә алабыҙ. Һәр кем үҙ зауығына тап килгән жанрҙағы китаптарҙы алып уҡый. Һәм беҙҙең нәшриәт уларҙың һәр төрлөһөн тәҡдим итә ала: проза, поэзия, фантастика, детектив, драма, комедия һәм башҡалар.

**Замана уҡыусыһын ҡыҙыҡһындырыу өсөн ниндәй темалар, жанрҙар, китаптарҙың ниндәй форматы кәрәк?**

- Китаптарҙы һәр кем үҙ зауығына ҡарап һайлай: кемдер шиғырҙарҙы бирелеп уҡый, кемдер проза йә башҡа жанрҙы һайлай. Һәр кем уҡығанынан үҙен борсоған һорауҙарға яуап табып, күңеленә дауа ала. "Минең һорауҙарыма яуапты шиғыр юлдарына һалған бит автор", тигәндә лә йыш ҡына ишетергә тура килгәне бар. Йәғни, һәр жанрҙың үҙ уҡыусыһы бар. Әлеге көндә "Китап" нәшриәте илдә һәм республикала барған мөһим ваҡиғалар айҡанлы китаптар сығарыуҙы дауам итә. Хөкүмәттең төрлө программаларына ярашлы, илдәге һәм республикабыҙ тормошондағы иҫтәлекле ваҡиғаларға айырыуса иғтибар бирелә. "Кәрҙәшлек кәштәһе", "Мәктәп китапханаһы", "Башҡортостандың арҙаҡлы шәхестәре", "Йәштәр тауышы" серияларында китаптар даими донъя күрә һәм тарала тора.

2011 йылдан нәшриәт электрон баҫмалар ҙа сығара һәм тарата башланы. Сайтыбыҙҙа һәр теләгән кеше яңы баҫмалар менән таныша, файҙалы мәғлүмәт таба ала. Китаптар ниндәй генә форматта сыҡһа ла, улар үҙҙәренең төп маҡсатына - кешеләргә аң-белем, изгелек орлоҡтары таратыуға булышлыҡ итә. Тарихи ерлеккә нигеҙләнеп яҙылған, ҡатмарлы тормошто төрлө яҡлап сағылдырған, донъяуи мәсьәләләрҙе фәлсәфәүи яҡтыртҡан романдар, күңел кисерештәрен, самими тойғоларҙы тәрәнтен һүрәтләп, саф, бөйөк хистәрҙе данлаған мөхәббәт хаҡындағы әҫәрҙәр, детектив, фэнтези повестар, хикәйәләр - һәммәһе лә уҡыусыға ят түгел.

**Киләсәктә уҡыусыларын юғалтмаҫ өсөн уларҙы бөгөндән тәрбиәләү фарыз. Йәғни, әлеге мәлдә мәктәпкә тиклемге һәм мәктәптә белем алыусы уҡыусыларҙа китапҡа һөйөү тәрбиәләү фарыз. Был тәңгәлдә нәшриәт ниндәй эштәр башҡара?**

- Был фекер менән тулыһынса килешәм, һәм ул китап уҡыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Йәғни, беҙ балаларҙы улар тыуғандан алып маҡсатлы рәүештә туған телендә уҡыуға ылыҡтырмаһаҡ, һөйөү тәрбиәләмәһәк, киләсәктә үҙ телебеҙҙә сыҡҡан гәзит-журналдарҙы, китаптарҙы уҡыусы кеше ҡалмауы ла ихтимал. Был тәңгәлдә "Китап" нәшриәтенең балалар әҙәбиәте редакцияһында кесе йәштән балаларҙың аң-белемен, зирәклеген, отҡорлоҡ, тапҡырлығын үҫтереүгә арналған итерҙәй баҫмаларға өҫтөнлөк бирелә. Бары тик уларҙы таба һәм һайлап ала белергә генә кәрәк. Әлбиттә, балаһының һәр яҡлап үҫешкән шәхес булыуын теләгән атаәсә, өләсәй-олатай башҡорт халыҡ ижадын, халыҡ педагогикаһын иркен ҡулланып, уға ерлек әҙерләй: сабый күңеленә изгелек, мәрхәмәтлек, туғанлыҡ, үҙ-ара ярҙамсыллыҡ, бер-береңә ҡарата шәфҡәтле булыу кеүек изге төшөнсәләрҙе бишек йырҙары, әкиәттәр, риүәйәттәр, һанашмаҡтар, йомаҡтар, шиғырҙар, тапҡыр һүҙҙәр, бәйәндәр аша һеңдерә. Сағыу һүрәтле, матур эстәлекле китаптар менән кесе йәштән таныштырылған балала китапҡа ҡыҙыҡһыныу, ынтылыш тыуа. Донъя мәшәҡәттәренә күмелеп, сабыйҙың ошондай мәлен ҡул унынан ысҡындырырға ярамай. Әгәр ҙә, башымды ҡайнатып йөрөмә әле, тип, бала ҡулына телефон тоттороп, йә телевизор, компьютер алдына ултыртып ҡуйһаң, зиһененә бер ниндәй файҙалы нәмә өҫтәмәй торған экран уны ылыҡтырасаҡ. Ылыҡтырыу ғына аҙ - күҙҙәренә зыян да килтерәсәк. Ультрафиолет нурланыш тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Әммә, нисек кенә булмаһын, беҙ ҙә балаларҙың нимәгә һәм ҡайҙа ынтылғанын, тартылғанын күреп-белеп, улар менән бер телдә аралашырға тейеш.

Заман менән бер ҡатарҙан атлау йәһәтенән беҙҙә бөгөнгө көн талаптарына яуап биргән яңыса мультимедиалы китаптар баҫыла. Мәҫәлән, 2019 йылда "Хәйләкәр төлкө" башҡорт халыҡ әкиәтенә нигеҙләнеп эшләнгән мобиль ҡушымталы китап сыҡты. Был баҫма шуныһы менән иғтибарҙы йәлеп итә: ундағы QR-код ярҙамында смартфонға йәки планшетҡа ҡушымтаны бушлай күсереп алып, әкиәттең башҡортса йә русса йәнһүрәтен ҡарарға мөмкин. Унда шулай уҡ һүрәт төшөрөргә, әкиәтте үҙең теләгән телдә тыңларға һәм диктант яҙырға ла була. 2020 йылда "Өс дуҫ" исемле башҡорт халыҡ әкиәтенә нигеҙләнеп эшләнгән мультимедиа китабы донъя күрҙе. Быйыл баҫмаға әҙерләнгән "Күк ат" тигән башҡорт халыҡ әкиәте лә ошо сериянан. Йәғни, бала ул китапта һүрәттәрен ҡарап йә тексын уҡып ҡына ҡалмай, ә ҡушымта аша "терелеп" киткән геройҙар менән бергә сәйәхәт итә, яңы кисерештәр аса, улар менән аралаша һ.б. Был китаптарҙың ике йәки өс телдә (башҡорт, рус, инглиз) сығыуы ла кескәйҙәргә телдәрҙе өйрәнеүгә ҙур ярҙам.

**Китап сығарыу - бер эш, ә уны уҡыусыға алып барып еткереү, таратыу өлкәһендә ниндәй яңылыҡтарығыҙ бар?**

- Авторһыҙ китап булмаған кеүек, китап уҡыусыларҙан башҡа автор ижады ла йәшәйешен юғалта. Беҙҙең нәшриәт автор һәм уҡыусы араһындағы бер күпер булып тора. Баҫманың китап уҡыусылар һорауы менән файҙаланыуы уның нисек нәшер ителеүенә генә түгел, уҡыусыға барып етеүенә лә бәйле. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең продукция менән һәр уҡыусыны таныштырып барырға, уға туранан-тура алып барып еткереү өҫтөндә эшләргә тырышабыҙ. Мәҫәлән, нәшриәттә донъя күргән баҫмаларҙы әлеге мәлдә республикабыҙҙың 92 һатыу нөктәһендә табырға мөмкин. Шулай уҡ Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә, Татарстанда, Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург, Магнитогорск һәм Төмән ҡалаларында барлығы 17 урында һатыла улар. Республикабыҙҙың район, ҡалаларында, Рәсәй төбәктәрендәге күргәҙмә-йәрминкәләрҙә әүҙем ҡатнашабыҙ, төрлө кимәлдәге фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, яҙыусыларыбыҙҙың, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең ижад һәм юбилей кисәләрендә сауҙа-күргәҙмәләр ойоштораbыҙ.

"Китап" нәшриәте әлеге мәлдә "Чи-тай-город" тип аталған һатыу селтәре менән хеҙмәттәшлек итә. Килешелгән шарттар буйынса, беҙҙә баҫылған китап продукцияһы республикалағы ошо селтәрҙең 8 магазинында һәм интернет-магазинында тәҡдим ителә. Сауҙа уңышлы барһа, селтәрҙең етәкселеге беҙҙең китаптарҙы Рәсәйҙең башҡа төбәктәренә лә оҙатырға ниәтләй. Шулай уҡ нәшриәттең баҫма продукцияһын OZON.ru интернет-магазинының майҙансығында ла урынлаштырғанбыҙ. Әлеге көндә был майҙансыҡта китап һөйөүселәр иғтибарына барлығы 117 төр баҫма тәҡдим ителә. Йылдың аҙағынаса уларҙы 450 атамаға еткерергә тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Был сайт аша беҙҙә сыҡҡан китаптарҙы илебеҙҙең төрлө төбәктәренән һатып алалар.

Әлеге көндә нәшриәт баҫма продукция менән бергә электрон китаптар ҙа нәшер итә һәм тарата. Уларҙың һаны 102-гә етте. Беҙҙең рәсми сайтта ошо хаҡта белешмә алырға, яңы баҫмалар, каталог менән танышырға, файҙалы мәғлүмәттәр табырға була. Быйыл февраль айында "ЛитРес" ЯСЙ-һы менән килешеүҙең проектын ҡулға алдыҡ. Ошо килешеү нигеҙендә "ЛитРес" сервисында "Китап" нәшриәтенең айырым платформаһын төҙөү ҡуҙғалана. Әлеге ваҡытта авторҙарыбыҙ менән шул юҫыҡта эшләү өсөн һөйләшеүҙәр алып барабыҙ, улар менән авторлыҡ хоҡуҡтары тураһында килешеүҙәр төҙөлә. Тиҙҙән был интернет-магазинда нәшриәттең айырым платформаһы барлыҡҡа килер һәм унда беҙҙең хөрмәтле авторҙарыбыҙҙың китаптары урынлаштырылыр, тигән өмөттәбеҙ. Электрон китаптың нимәһе яҡшы, уның тиражы сикләнмәгән һәм хаҡы ла күпкә арзан. Тик әлегә беҙҙең уҡыусыларҙың күпселеге китапты традицион, йәғни ҡағыҙ форматта уҡыуҙы хуп күрә. Был тәңгәлдә башҡараһы эштәребеҙ бихисап.

**Республиканың абруйлы китап нәшриәте етәксеһе һәм үҙегеҙ ҙә әүҙем китап уҡыусы булараҡ, милләттәштәребеҙгә теләктәрегеҙ ниндәй булыр?**

- Китаптан айырылмағыҙ, дуҫтар! Ниндәй генә заманда ла китап кешенең яҡын юлдашы булып ҡаласаҡ. Уларҙы уҡып, фәһем алып та, йыуанып та, тормоштоң күренмәгән серҙәрен асып та була. Әйҙәгеҙ, уҡыусы, уҡыған, уҡыясаҡ милләт булайыҡ! Бер быуатлыҡ тарихы булған "Китап" нәшриәте телде, мәҙәниәтте, милли әҙәбиәтте һаҡлауға һәм халыҡтың рухи байлығын үҫтереүгә йүнәлтелгән берҙән-бер дәүләт ойошмаһы булараҡ, артабан да һеҙҙе матур, фәһемле, тәрән йөкмәткеле баҫмалары менән һөйөндөрөр.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Ҡыҙы: "Әй, атам, мин Аллаһы Тәғәләне зикер иткән нәмәне ашарға оялам шул. Балыҡ ауыҙын асып, Аллаһы Тәғәләне зикер итә ине, шуның өсөн ташланым", - тип яуаплаған.*



ӘЙ, ЯҘМЫШ!

# ХЫЯЛДАҒЫ ТОРМОШ ШУНДАЙ ТАТЛЫ

**Бөгөн төндә Хәлимә күҙенә тағы йоҡо эленмәне. Элегерәк нык арыһа ғына шулай таңға тиклем йоҡлай алмай этләнә торғайны. Әле иһә миктәгәнсе эшләгәне лә юҡ. Бөгөн дә офоҡта таң ҡыҙылы беленә башлағансы түшәгендә әйләнә-тулғана ятты ла, тороп, асыҡ тәҙрә янына килде. Өләсәһе төнгөлөккә тәҙрә өлгөһөн мотлаҡ ябырға ҡушһа ла, ул йәйен-ҡышын асып ҡалдырҙы.**



Ауыл йоҡлай әле, иң уңғандар ҙа татлы төшөн күрә. Ә тәбиғәт яйлап уяна. Бына һандуғастар үҙҙәре генә аңлаған телдә бер-береһенә сәләм бирҙе. Ауылда йәшәһә лә, быға тиклем иғтибар итмәгән булдымы икән - таң әтәстәренән алда һандуғасты беренсегә ишетә ул. Һыу буйындағы тирәклектән кәкүк тауыш бирҙе. Ике-өс саҡрым алыҫлыҡтағы күрше ауылдың мәсетенән аҙан тауышы яңғыраны. Аҙан ваҡытында йылға ла аҡмай, ағас япраҡтары ла һелкенмәй тора тип ишеткәне бар ине Хәлимәнең. Бер мәлгә генә ҡош тауыштарының тынып ҡалғанын бөгөн ул, ысынлап та, тойҙо.

Ҡулына көнө буйы бер эш барманы уның. Ниндәй ҙә булһа шөғөлгә тотонорға үҙенең дә теләге булманы. Әле бер нәмәһен, әле икенсеһенең урынын алмаштырып, төшкә тиклем ваҡытын үткәрҙе лә, тәҙрә шаршауын тартып, серем итеп алырға уйланы. Күҙе эленеп, йоҡомһорап бара ине инде, кемдеңдер уның йәшел сиҙәм баҫҡан ихатаһына инеүен ишетте. Кем икәнлеген, әлбиттә, бөтә булмышы менән тойҙо Хәлимә. Бынан утыҙ-утыҙ биш йыл элек ошо аяҡ тауышын ишетһә, һикереп тороп ҡаршы сыҡҡан булыр ине. Шулай ҙа тороп ултырҙы, өҫтөн-башын һыпырып рәтләне, яулығы аҫтына сикә тирәһендәге сәсен ҡымтып йәшерҙе.

Бына таныш аҙымдар һаҡ ҡына тупһаға баҫты, соланға үтте, ишек асылды, унан иң беренсе сал сәсле ирҙең башы күренде һәм аҫҡан ишеген дә япмай, тәҙрә ҡаршыһында ултырған ҡатынға текәлде. Күпме шулай бер-береһенә өнһеҙ ҡарап торғандарҙыр - билдәһеҙ, тынлыҡты ирҙең ауыр көрһөнөүе боҙҙо. Хәлимә лә ҡарашын унан айырҙы.

- Иң беренсе, һинән ғәфү үтенгем килә...- тип башлаған ирҙе ҡулын һелкеп кенә туҡтатты.

- Тағы ниндәй бәхетһеҙлек алып килдең? Шуны ғына әйт. Һин тиктәҫкә йөрөмәҫһең.

- Бөтә нәмәлә мине генә ғәйепләргә тырышма әле һин. Үҙеңдең башың да бар ине бит...- ир тағы теләгәнен әйтеп бөтөрә алманы, ҡатындың бөтә уйы, эске донъяһы, хәсрәте яҙылған ҡарашты күреп туҡтаны. Олпат йәшкә етһә лә, һылыулығын һалмаған был ҡатындың намыҫы ла, күңеле лә башындағы ап-аҡ яулыҡ һымаҡ саф икәнлеген яҡшы белә ул. Тик шуны таныуға, иҡрар итергә ирҙең ғорурлығы, тәкәбберлеге генә ҡушмай, дөрөҫөрәге, ҡурҡа.

...Хәлимә менән Зәйни, яҡын ғына ауылда йәшәһәләр ҙә, мәктәпкә килгәнсе бер-берен белмәй ине әле. Шунан улар 10 йыл буйы бер парта артында ултырып уҡыны. Бер өҫтәлдә ултырған класташтарының исемен бер-береһенә ҡушһалар, улары үпкәләп, йә уҡытыусыға, йә атай-әсәһенә ошаҡлашырға йүгереп ҡайтып китһәләр, был икәү, киреһенсә, кинәнес кисереп ултыра торғайны. Мөхәббәт бөрөһө ошо балаларса шаяртҡан ваҡытта уҡ яралдыма - бер-береһенә әҫенешеп киткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Мәктәптә уларҙы "Зөһрә менән Таһир" тип йөрөттөләр. Уҡытыусылар иһә уларҙы айырым саҡырып та, линейкала ла һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа сәбәп табып, шелтәләп кенә торҙо. Етәкләшеп йөрөүҙәрен совет мәктәбенә хас түгел тип, уларҙан йөҙ бороп, сиркәнеп үтеүселәр ҙә булманы түгел.

Бөтә хис-тойғоһо күҙ ҡарашынан сағылған аҙ һүҙле Хәлимәне телдәр Зәйни сибәрлеге менән генә арбаманы. Яҡын-тирә ауылдарҙағы иң оҫта гармунсылар менән бәләкәйҙән бер ҡатарҙан ултырып уйнаны ул. Йырға маһирлығы ла бар ине. Армияға киткәндә "Бейеш"те йырлап, табындағыларҙың бөтәһен дә илатҡан тиҙәр. Хәлимә генә була алманы унда. Һөйгәне күҙ йәштәре менән илап, ергә тубыҡланып үтенгәс, мөхәббәт емешен - балаһын - алдырырға барған ине. Күп ҡан юғалтыуҙан оҙаҡ ҡына дауаханала ятырға тура килде, шул осорҙа егете армияға киткән ине. Отпускыға ҡайтҡанда иһә Зәйниҙе күрше ҡыҙы бәпес менән ҡаршы алды.

Хыянатты бик ауыр кисерҙе Хәлимә, башын стенаға бәрә-бәрә илағанын күргәндәр ҙә булған.

Кешеләргә тиҙ ышаныусан, балаларса бер ҡатлы, хәйлә-мутлыҡты белмәгән, киң күңелле ҡыҙ күңел төшөнкөлөгәнән оҙаҡ сыға алманы. Иңәлә-сығалы йөрөгән ҡыҙын аяҡҡа баҫтырыуы бик ҡыйынға төштө әсәһенә. Дауахана юлын да оҙаҡ тапарға тура килде уларға. Ауылдаштары араһында саф күңелле, изгелекле кеше булып абруй яулаһа ла, керпек ҡаҡмай үткәргән йоҡоһоҙ төндәрендә ҡыҙын ошондай хәлгә төшөргән кешеләрҙең бөтәһенә лә рәнйемәй булдыра алманы әсә.

Мәктәпте тик яҡшы билдәләргә генә тамамлаһа ла, артабан уҡыу ҡайғыһы булманы Хәлимәлә. Армиянан Зәйни тура үҙенә ҡайтыр, тип уйланы, хаттар яҙҙы, тик ҡыҙҙың яҡты өмөттәре аҡланманы. Бер аҙ тынысланып, күңеле урынына ултырғас ҡына, ситтән тороп уҡырға инде, колхоз бухгалтерияһына эшкә урынлашты. Был ваҡытта Зәйниҙең ҡыҙы башланғыс класты тамамлағайны инде.

Агроном булып эшкә ебәрелгән егет менән дуҫлашып йөрөй башлауын ишеткәс, "Кейәүгә сыҡма инде, мин шундай бәхетһеҙ, тиҙҙән айырылышам, саҡ ҡына көт", тип илап килгән Зәйниҙең татлы теленә тағы ышанды Хәлимә. Айҙар артынан ай, йылдар артынан йыл үтте. Тик Зәйни генә, ҡыҙ күпме көтһә лә, килмәне лә, күренмәне лә. Агроном егет тә ғәрсел булып сыҡты, башҡа уның яғына әйләнеп ҡарамаҫтай булды.

Әсәһе вафатынан һуң Хәлимә атай йортон, мал-тыуарын һатып, район үҙәгенә күсенде һәм хаҡлы ялға сыҡҡансы ауыл хужалығы идаралығында эшләне. Маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булды, сит илдәрҙә ял итте, йыл һайын диңгеҙ һауаһын һуланы. Уға ҡарап һоҡландылар, көнләштеләр. Хәлимәнең эшендәге уңыштарына ҡарап, уны, ысынлап та, бәхетле лә бәхетле ҡатын тип уйланы.

Тик ул ғына үҙен бәхетле һанаманы. Үкенесең булмаһа ғына үҙеңде бәхетле һана, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Ә уның береһенән-береһе зурыраҡ ике үкенесе бар: тәүге мөхәббәттән яралған ғәйепһеҙ балаһын алдыртыуы һәм үҙе өсөн өҙөлөп торған кешене ташлап, тағы ла Зәйниҙең таҫма теленә ышаныуы өсөн үҙен бер ваҡытта ла ғәфү итмәйәсәк. Үҙе алдында ғына түгел, әсәһе алдында ла ғәйепле бит ул, сөнки йәп-йәш көйө тол ҡалған һөйөклө әсәһен кейәү бәхетен күреү һәм ейән һөйөү бәхетенән күрәләтә мәхрүм итте. Үҙенең ғүмеренең сәскәләй иң матур йылдарын бер ҡасан да бойомға ашмаясаҡ хыялдар менән үткәрҙе. Дәрәжәле кешеләр ҡулынан маҡтаулы билдәләр, исемдәр алған ваҡытта ҡүмәк кешеләр араһында Зәйниҙең дә барлығына ышанды. Ҡара диңгеҙ ярында йылы ҡомда ҡыҙынған сағында һөйөклөһө килеп сығыр ҙа, етәкләп, мәңгелек мөхәббәт утрауына алып китер кеүек тойолдо. Яңы йыл төнөндә, ҡатын-ҡыҙҙар йәки тыуған көнөндә бер ҡосаҡ гөлләмә тотоп инер ҙә, мин һинән бер ҡайҙа ла китмәйем, тип, ғәфү үтенер тип көттө. Тик ҡатындың был уйҙарын бер ҡасан да, бер кем дә белмәне. Кемгәләр һөйләп, үҙенең ыуалырға ғына торған хыялындағы матур тормошон боҙоуһо килмәне. Шулай итеп, ул үҙенә генә хас параллель донъя булдырҙы. Тәне бында, йәне иһә үҙе уйлап сығарған ана шул донъяла булды...

...Асыҡ тәҙрә аша сабый баланың илаған тауышы ишетелде. Хәлимә терт итеп ҡалды ла һикереп тороп, тәҙрәгә ҡапланды. Бала тауышы - уның иң йомшаҡ урыны, уның уңалмаҫ яраһы.

- Хәлимә, әгәр риза булһаң, бөгөндән үк ейәнсәрем менән һиңә йәшәргә киләм, - ирҙең тауышы ҡалтыранып сыҡты. Быға тиклем ҡатын алдында бер нисә таҡҡыр үкһеп илағаны булһа ла, был юлы Зәйни күҙ йәшен күрһәтергә оялды - башын аҫҡа эйҙе. Тегеләре ялған булһа, былары уның йөрәген ярып сыҡҡан ысын күҙ йәштәре ине. Тик Хәлимә уның күҙ йәшен дә күрмәне, һуңғы һүҙҙәрен ишетмәне лә, был ваҡытта ул урамда, машина янында ине. Баланы күтәреп өйгә ингәндә иһә Зәйнигә ашығыс медицина ярҙамы кәрәк булды. Бер көндә ҡатынын, ҡыҙын, кейәүен юғалтыу ҡайғыһы ла, үкһеҙ йәтим ейәнсәренең киләсәге өсөн борсолоу ҙа, Хәлимә алдындағы сикһеҙ ғәйеп тойғоһо ла - бөтәһе бергә укмашып, типһә тимер өҙөрҙәй ирҙең йөрәген икегә ярҙы. Хәлимәнең әсәһенең рәнйеше төштө...

Дауахананан Зәйни тура Хәлимәгә ҡайтты. Ғүмер буйы бергә йәшәгән ғаилә һымаҡ йәшәп алды ла китте улар. Ә иң ғәжәбе шул: уларҙы белгән кешеләр ҙә Хәлимә менән Зәйниҙең ҡауышыуын шул тиклем тәбиғи ҡабул итте, хатта ки иң яҡын кешеләре лә һорау биреп маҙаһыҙламаны. Тик шуныһы ғына тиҙҙән бөтәһен дә аптыратыр: ҡыҙсыҡтың теле "әсәй" тип асылыр һәм үҫкән һайын Хәлимәгә ике тамсы һыу кеүек оҡшай барыр. Был күренеште төрлө кеше төрләсә юрар, әлбиттә. Көҙөн сәскә атҡан гөл кеүек икенсе балҡыш кисергән бәхетле ҡатын ғына быны ысын мөғжизә тип ҡабул итер...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

## Ғибәҙәттең өҫтөнлөгө

Зәй ән-Нун әл-Мысыри хәҙрәттәре бәләкәй ҡыҙы менән йылға ярында балыҡ тота икән. Ҡыҙы, ҡармағына бер балыҡ эләгеп сыҡҡас, уны шунда уҡ кире йылғаға ташлаған, ти. Зәй ән-Нун хәҙрәттәре: "Әй, ҡыҙым, ни өсөн ташланың инде, хеҙмәтебеҙ бушҡа китә бит", - тигәс, ҡыҙы: "Әй, атам, мин Аллаһы Тәғәләне зикер иткән нәмәне ашарға оялам шул. Балыҡ ауыҙын асып, Аллаһы Тәғәләне зикер итә ине, шуның өсөн ташланым", - тип яуаплаған. Зәй ән-Нун хәҙрәттәре: "Әй, ҡыҙым, бынан һуң нимә ашарбыҙ икән?" - тип һораған. Ҡыҙы иһә: "Аллаһы тәбәрәкә үә Тәғәләгә тапшырылабыҙ инде, әлеге зикер Алланан буш килгән ризыҡ менән тәғәмләндерер", - тип өмөтләндергән. Бынан ары Зәй ән-Нун ҡыҙы менән Аллаһы Тәғәләгә һыйынып, ғибәҙәт ҡыла башлағандар. Шул көн йәсиғ ваҡытында Аллаһы Тәғәлә быларға күктән тәғәм индергән, ти. Зәй ән-Нун хәҙрәттәре ҡыҙы менән бергәләп ун ике йыл ғибәҙәт ҡылып йәшәгән. Һәр көн Аллаһы Тәғәлә тарафынан аш табыны, йәғни тәғәм килеп торған. Бер көн Зәй ән-Нун хәҙрәттәренең күңеленә: "Әлбиттә, был тәғәмдең килеүе минең ғибәҙәтем арҡаһында инде", - тигән уй килгән. Шул арала хәҙрәттең изге ҡыҙы вафат булып, тәғәм һис килмәгән дә ҡуйған. Зәй ән-Нун хәҙрәттәре шунда ғына ризыҡ килеп тороуы үҙенә бәйле түгел икәнен аңлаған. Был хәлдән һуң хәҙрәт, әүәлге уй-фекеренән ҡайтып, яңынан ғибәҙәт ҡыла башлаған, ти.

## Бер ҡатын тураһында

Бер ҡатын Рәсүлебеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмгә ғашиҡ булып, Уның һүҙҙәрен һәм вәғәздәрен ишетеү өсөн көн дә мәсеткә йөрөй башлай. Бер саҡ мәсеткә инеп барғанда ҡатындың ҡаршыһына бер йәш егет осрай. Уның: "Әй, ҡатын, ҡайҙа бараһың?" - тип һорауына ҡатын: "Рәсүлулланың мәжлесенә барам", - тип яуап бирә. Егет быны һынап ҡарамаҡ булып: "Һин Рәсүлулланы яратаһыңмы?" - тигән һорау бирә. Ҡатын: "Әлбиттә, яратам, шуның өсөн килдем", - ти. Егет: "Һүҙеңдең ихласлығын беләйем - Рәсүлуллаһ хаҡы өсөн миңә йөҙөңдө күрһәт", - тип бойора. Ҡатын "Рәсүлуллаһ хаҡы өсөн" тигәс, йөҙөн асып күрһәтә лә ҡуя.

Ҡатын был хәлдән бик үкенеп һәм көйөнөп өйөнә ҡайта ла, әлеге ваҡиғаны иренә һөйләй. Ә ире ҡатынына асыулана һәм был хаҡта Мөхәммәт бәйғәмбәргә барып һөйләй. Бәйғәмбәр: "Әгәр минең мөхәббәтем һәм хаҡым өсөн йөҙөн күрһәткән булһа, һис зарар юҡ. Ундай эштәр була торған. Әммә үҙеңдең күңелеңде тынысландырыу, ауыр уйҙарыңдан ҡотолоу өсөн былай эшлә: ҡайтып, мейескә ут яҡ та ҡатыныңа минең хаҡым өсөн шунда инергә бойор", - тип кәңәш бирә. Әлеге ир өйөнә ҡайтып, мейескә ут яҡтырта ла ҡатынға: "Шул мейескә ин!" - тип бойора. Ҡатыны иһә: "Инмәйем" - тип баш тарта. Ире тағы ла: "Рәсүлуллаһ хаҡы өсөн, ин!"- тигәс, был ҡатын, һис икеләнмәй мейескә ташлана. Ир мейестең ауыҙын ҡаплай ҙа Бәйғәмбәргә килә. Бәйғәмбәр: "Ҡайтып мейесеңде асып ҡара: әгәр ҡатының унда зарар күрмәһә, унда һис хыянат юҡ", - ти. Ир өйөнә ҡайтып, мейесте аса. Ҡатыны, бер ере лә янмайынса, һау-сәләмәт көйө уттан килеп сыҡҡан, ти...

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРҘӘР ҘӘ ХИСЛЕ

■ Йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда хис-тойғоға байыраҡ, тигән стереотип булһа ла, ғалимдар быны кирегә раҫлаған. 15 ғаилә башлығы һәм 15 ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә төрлө һынауҙар үткәргәндән һуң, көслө зат ҡайһы бер ваҡиғаларҙы ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға көслөрәк кисереүе асыҡланған, әммә улар үҙҙәрен хислерәк икәнен барыбер танымаған. "Гүзәл зат илағыраҡ, ул эмоциялар ҡоло, тигән фекерҙе аңыбыҙға һеңдереп бөткәндәр. Тик ир-егеттәр был йәһәттән уларҙан һис ҡалышмай, киреһенсә, ҡайһы берҙә нығыраҡ ҡайғыра, ихласыраҡ шатлана. Йәмғиәттә был ирҙең көсһеҙлөгө булып ҡабул ителгәнгә күрә, улар тойғоларын күрһәтеп бармай. Бала саҡтан малайҙарҙы, ир кеше иламай, тип тәрбиәләүҙең йоғонтоһо ла бар был күренештә", - ти тикшеренеүҙең авторы Дэвид Льюис.

■ Тоҙ ҡулланыуҙы кәметеү йөҙәр мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк, ти күптән түгел генә үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең авторҙары. Тоҙ - натрий хлориды тип аталған химик берләшмә. Натрий хлоридының 60 проценты хлорид, ҡалған 40 проценты натрий. Тап натрий сәләмәтлеккә зыян килтерә лә инде. Йөрәк ауырыуҙарын өйрәнеүсе Америка ассоциацияһы көнөнә 1,5 миллиграмм натрий ҡулланырға кәңәш итә. Әммә күптәр уны күберәк тотона, был һан сама менән 306 миллиграмм тәшкил итә, тимәк, норманан ике тапҡырға артып китә. Тоҙҙоң кеше организмына йоғонтоһон тикшергәндә натрий ҡулланыуҙы йәйләп ҡына кәметеүҙең һөҙөмтәһен күреү өсөн ғалимдар компьютер ярҙамын ҡулланған. Ун йыл эсендә тоҙ ашауҙы аҙлап ҡына кәметеү ҙә яҡынса 500 мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡаласаҡ, ти улар.

■ Һәйбәт итеп туҡланыу тигәндә күптәр сифаты буйынса уникаль, шул уҡ ваҡытта ҡиммәт ризыҡтарҙы күҙ алдына баҫтыра. Ғалимдар билдәләүенсә, өҫтәлдәрҙәге ябай ғына аҙыҡтар ҙа файҙалы, тик беҙ был турала уйланмайбыҙ ғына. Мәҫәлән, Британияла ҡыҙыл сөгөлдөрҙө тикшереп, уның һуты кешенең сыҙамлылығын 16 процентҡа арттыра, тигән фекергә килгәндәр ғалимдар. Баҡтиһәң, ҡыҙыл сөгөлдөрҙә организмды кислород менән байытыусы тоҙҙар бар икән. Шуға ла был йәшелсә спортсыларға, йөрәк-ҡан тамырҙары менән ауырыусыларға ярҙам итә. Сөгөлдөр һуты юғары ҡан баҫымын түбәнәйтә, 24 сәғәт буйына был һөҙөмтә һаҡлана. Стресс мәлендә йоҡлай алмағандар, хәтере насарайыусылар сөгөлдөр һутын төнгөләккә эсһен.

■ XX быуат буйына кешелек яман шешкә ҡаршы дарыу таба алмай. Америка ғалимдары яңы методика уйлап тапҡан, уның нигеҙендә ябай әрем ҹеңә ята. Табиптар фекеренсә, әрем 16 сәғәт эсендә яман шеш күҙәнәктәренең 98 процентын юҡҡа сығарырға һәләтле. Уның составында артемизин тигән матдә бар, әгәр ҙә уны тимер менән бергә ҡулланғанда, онкологик сирҙәрҙе дауалап буласаҡ. Әлеге мәлдә тикшеренеүселәр әремдән дарыу яһауҙы өйрәнеү өҫтөндә.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Көйөргәҙе районы үҙәге Ермолаево ауылындағы Мәҙәниәт йортонда үткән күптән көтөлгән йыйын "Бер осрашыу - үҙе бер ғүмер" тип аталды. Сценарийын әҙерләүсе Тамара Рәшит ҡыҙы Малбаева ниндәй өмөттәр бағланы икән был сараға? Уның өмөттәре - гүйә, йөрәгенән атылған хыял-уҡтары - бик мөһим сәптәргә төбәлгән булғанға оҡшай ҙа инде.**

# КӨЙӨРГӘҘЕЛӘ - БЕР ҒҮМЕР




Беренсенән, Көйөргәҙе яҡтарында ҡатын-ҡыҙҙар бер-береһен тағы ла күрһен, танышһын, хәл белешһен, тигән ниәт йыйҙы уларҙы. Икенсенән, башҡорт ауылдарында киң йәйелгән ағинәйҙәр хәрәкәте үҙенең эшмәкәрлеген халыҡҡа яҡынайтһын. Кешенән айырымланып, "аҡ ҡарға" булып йәшәмәҫ өсөн йылы һәм кешелекле хис-тойғолар уятырлыҡ ошондай осрашыуҙар һәм тәрбиә кисәләре бик тә кәрәк. Шуға күрә лә Тамара Рәшит ҡыҙы ойошторған ағинәйҙәр үҙҙәре күптән белгән, әммә онотола барған халыҡ йолаларын Ермолаево мәҙәниәт йортонда күрһәтмәк булды.

Ана, төрлө ауылдарҙан йәше-ҡарты байрамға ағылып килә. Араһында ираттар ҙа байтаҡ. Билдәле "Йәнтөйәк" халыҡ фольклоры ансамбле мәҙәниәт һарайы фойеһында йыр-бейеү менән ҡунаҡтарҙы ҡаршылай. Шул мәлдә Тамара ханымдың тағы ла бер хыял уғы сәпкә тейә: "Бынан былай Көйөргәҙе яғында ҡатын-ҡыҙҙар ғына түгел, ә ир-азаматтар ҙа байрам башында әйҙәләп йөрөр, шау бисәләргә генә һалыныу етте!" Оҙаҡ йылдар мәғариф эшендә, мәҙәниәт өлкәһендә, һуңғы ун йыллап ағинәйҙәрҙә етәкләгән хеҙмәт ветераны Тамара Рәшит ҡыҙы бөгөн иң тәүҙә шул яҡты ҡайғырта: "Тормош арбаһын тартыу ике тәртәле булһын, һәр кемдең донъяһы - дүрт тәгәрмәсле һәм юл башлап барыусыһы алтын башлы, илһөйәр рухлы, бөркөт йөрәкле батыр ир-егет булһын", - ти ул.

Барыһы ла ҡәҙимгесә башланды: күргәҙмә гөрләй, баһалама ағзалары эшләй, бүләктәр ҙә әҙер. Тамара ханым яҡташтарын барлай, күңеленән һәр кемеһенә өндәшә: "Минең ҡәҙерләләрем, килеүегеҙгә рәхмәт, сәләмәт яҡты йөҙөгөҙ - үҙе байрам көҙгөһө. Ни саҡлы ҡырҡа үҙгәрештәр заманында ла беҙ, нисек тә булһа аңыбыҙҙы юймайынса, бөйөк Уралыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың аҫаба ерҙәрен, бай ижадыбыҙҙы, рухыбыҙҙы, телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға тейешбеҙ. Был тәңгәлдә башҡараһы эштәребеҙ бик күп. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Киләсәккә юл һалғанда боронғоларҙы боролоп ҡарау яҡшы", тимәгән. Бөгөнгә сара ошо эштәрҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. Беҙ бөгөн халҡыбыҙҙың йолалар атҡарыу ҡорона йыйылдыҡ..."

Мәҙәниәт йортона Көйөргәҙе районы етәкселәре бер төркөм булып килеп инә. Ошо урында Тамара Рәшит ҡыҙының йөрәгендәге йәнә бер хыял уты атыла: "Бына бит, саҡырылған ҡунағың килһә, ниндәй бәхет! Бигерәк тә ул урындағы халыҡ өсөн мөһим эштәрҙе хәл итә торған аҡыллы һәм хәстәрле етәксе кеше булһа! "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы ағзалары төбәк хужалары менән бергә атларға, иш янына ҡуш булып эшләргә тейеш. Тик күңел биреп йәйелеп китеп кисә үткәреү, уға кешеләрҙе саҡырыу бөгөн кемгәлер ҙур мәшәҡәт һымаҡ тойола. Ошо йомошто ҡырҡ юлләтып, бюрократ "белгестәр" яһил ҡапҡандарын ҡора, йөҙ һыуын түктереп ыҙалата... Ағинәйҙәр иһә кемдәндер әйҙәүенә, ярҙамына ла ҡарамай, етәкселәр ҡулы етмәгән сараларҙы үткәреүгә ихлас тотона..."

Башҡа ҡунаҡтар менән бергә Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы Юлай Талха улы Ильясов, район советы рәйесе Фәнит Насип улы Моратбаҡыевтар тамаша залына инеп ултырышыу менән һәммәһе ҡыҙыҡһынып сәхнәгә төбәлә. Изге эштәр боронДан изге Ҡөрьән өнөнән фатиха ала. Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районы мөхтәсибе, хажи Азат хәҙрәт аһәңле итеп аят уҡый. Һәр кем йөрәгенә ошо мәлдә яҡты өмөтлө нуры тула: "Тыуған еребеҙҙә мәңге яңғыраһын ине ошо тынызлыҡ һәм именлек доғалары".

..."Йола, тигән һүҙ алға сыҡһа ла, "Бер осрашыу - үҙе бер ғүмер" тип исемләнгән кисәнең маҡсаты халҡыбыҙҙың үткән тормошона байҡау яһау, уны йәшәткән, йылытҡан, дәрт биргән йыр-моңдарыбыҙҙы барлау һәм милли мираҫыбыҙға оло һөйөү тәрбиәләү..." - алып барыусы ошо һүҙҙәрҙе укыу менән сәхнәлә Таймаҫ ауылы ағинәйҙәре ауаҙ һала: "Хәйерле сәғәттә!" Һәм улар шаяра-көлә "Тиҙәк һуғыу" йолаһын күрһәтә башлай (баш ағинәй Рәйлә Мәһәҙиева). "Колхоз быйыл да тиҙәк таратты, труддеңгә ферманан унар арба тиҙәк ташып алдыҡ. Дүрт мискә һыу ташыныҡ. Ике баҫым булды! Тиҙәк май кеүек матур булды. Ҡыҙҙар, ҡалыптарығыҙҙы тотоп килегеҙ, йәһәтләп һуғып ташлайыҡ. Һәнәгендә алып кил, бик йәпле бит. Ҡалыбың нисәү әле, әхирәт? Минеке һигеҙле, һинеке унлы! Унлы бигерәк ҙур бит. Уны нисек тултырмаҡ кәрәк! Тапап-тапап тултырам, тиҙәк кенә етһен. Иртән тиҙәкте әйләндерҙем, өҫтө нык кипкән. Әтеү бүкәнгә ултыртырбыҙ, саҡырырһың. Беҙ кисә ҡырҡ бүкән ултырттыҡ. Оһо-һо, ул хәтлемде ҡыш буйы яғаһың инде рәхәтләнеп!"

Тамашасылар ҙа, Тамара ханым да, йоланың уртаһында йөрөгәндәй, уға күңеленән ҡушылып ултыра. Йор телле өмәсеәләрҙең таҡмағына ҡушылып йырлап та алдылар, "бүҙәнә тотам" тип ҡыуышып бейеүҙәренә шаулатып ҡул саптылар.

...Бына Зәк-Ишмәт ауыл биләмәһе ағинәйҙәре күренде (баш ағинәй Люциә Ишмөхәмәтова). Йүкә йыуғыстар, ҡырғыс бысаҡ, ендәр һыҙғаныулы... Ә-ә, белдек, былар бит "Өй йыуыу"сылар. Ысынлап та, аҙғы йолалар тап ошо эштән башланғандыр. Бер нисә ҡатын, гүйә, ҡотҡарыусы фәрештәләрмә ни, өй эсенә килеп тула. Йәһәтләп, шап-шап итеп эш башлай... Ҡыш буйы йонсоған урын-ҡаралты ҡайнар ҡояш нурына сығарып эләнә, ҡышҡы тынсыу өй эсе буш һәм иркен булып ҡала... Тәүҙә түбә таҡталары сафлана, шунан ҡайнар һыу менән бешекләйбешекләй бүрәнә диуарҙар йыуыла, тәҙрәләр һәм яңаҡтары балҡып көлөп ебәрә, ишектәр ялт итеп тора, шунан һикеләр, өҫтәл-ширләктәр - бөтәһенең һап-һары таҡтаһы йәмләнеп-йәнләнеп китә, ә иҙәнде ҡырып-ҡырып селек һепертке менән һепереү, шунан ике-өс мәртәбә йүкә йыуғыс менән ышҡып йыуыу - үҙе бер киңәнес! Өй эсе еңел һулап, уф та уф тип сабынып-ҡойоноп мунса кергән кешенән кәм түгел... рәхәтләнә! Зәк-Ишмәт "өмәселәре" йыр-таҡмаҡ менән ҡалҡыты көлдөрә-көлдөрә, был боронғо йоланың да мәңгелек икәнен раҫлап ҡуйҙы.

...Күмертауҙан Морапталъ яғына китеп барғанда кинәт һул яҡҡа шаҡарылған юл бар. Ул Свобода тигән төбәккә алып бара. Элекке хуторҙа тирә-яҡ башҡорт ауылдары ғаиләләре күсенеп, бер ауыл булып йыйылып йәшәй,

сөнки ҡасандыр урта мәктәп, колхоз идараһы, ауыл советы ошонда - урыҫ хуторына күсерелгән була. Свобода ағинәйҙәре бер ғүмерлек тамаша итеп "Балаҫ һуғыу" йолаһын күрһәтте (баш ағинәй Зәйтүнә Рахманғолова). Рус этнографы Рычков үҙенең китабында "Көньяҡ Уралдағы башҡорт ауылдарында һәр бер йортта балаҫ һуғыу урыны бар", тип яҙа. Башҡорт ҡатындары хатта йәйләүгә сыҡҡанда ла балаҫ, шәл һуға торған урындарын ике тәртә араһына бәйләп булһа ла яраҡлаштырып эшләй торған булған. Төбәккә буй балаҫ менән сепрәк балаҫ һуғыу хас. Буйлыны һуғыр өсөн дөйә, һарыҡ йөнөнән йә кәзә ҡылынан, иләп-сиратып-буяп еп әҙерләгәндәр, буйлыһына киндер еп оҙатып һуҡҡандар. Сепрәк балаҫ өсөн иҫке киземамыҡ туҡыма кейемде йыртып, шуны ҡаты итеп сиратып алғандар, ә буйлыҡҡа унлы епте ҡатлап үткәреп йә ат ҡойроғонан иләнгән ҡыл епте оҙатып, тығыҙ итеп һуҡтырғандар. Әйтергә кәрәк, балаҫ һуғыу егерменсе быуат уртаһынан айырым оҫталар ҡулына ҡала, сөнки күмәк хужалыкта, колхозда эшкә йөрөгән ҡатын-ҡыҙға үҙ өйөндә айырым эш урынын тотоу, уның артында иркенләп ултырыу тәтемәй. Айырыуса ҡулы оҫтарған, елкәһе ҡалын, беләге көслө ҡатындар ғына балаҫсы булып ҡала.

...Тормош нисек кенә үҙгәрмәһен, ҡатын-ҡыҙ хыялдан айырылмай бит ул. Ә тәбиғәт - уларға иң яҡын серҙәш, хатта йәненә шифа һәм тәненә дауа. Көйөргәҙе яғында Ленинский тигән ауыл советы биләмәһендә Мәмбәткол тигән ауыл бар икән. Унда йәшәгән ағинәйҙәр "Яңы тыуған айҙы ҡаршылау" йолаһын иҫкә төшөргәс, Тамара ханымдың шатлыҡтан күҙ йәштәре бәреп сыҡты: "Ошондай ҙа самими, ихлас һәм көслө рухлы йолаларыбыҙ йәшәгәндә, беҙҙең күңелебеҙ бер ҡасан да ҡатмаҫ, йырыбыҙ моңло, йөрәгебеҙ шат булыр", - тип юраны ул эстән генә. Бөтә тамашасылар тын да алмай, сәхнәгә йомолдо. Һәр кем емелдәп торған өр-яңы ураҡ айҙы күҙ алдына килтерҙе. Ә Мәмбәткол ағинәйҙәре халыҡ хәтерендәге "яҙма"ны бәйән итә башланы (баш ағинәй Мәрзиә Әхтәмова, ойоштороусы Гөлнара Әлибаева). Уларға ҡолаҡ һалайыҡ әле: "Яңы ай башланғанда һәм айҙың тулған мәлендә кешенең сәләмәтлегенә йоғонтоһо айырыуса көслө була. Яңы ай тыуғанда боронғоларҙың: "Ай күрҙем аман менән, ауыҙым тулды иман менән",- тип әйтеүе юҡҡа түгел. Ай тыуғанда уның ут стихияны көсәйә, тәүге сирегендә Ай бөтә энергияһын Ергә бирә. Шуға күрә эште ай башында башлағыҙ. Балаларҙы өйләндергәндә ай башын көтөгөҙ. Ай календарын да белергә кәрәк: Айҙың беренсе көнөнөң символы - "яҡтылыҡ". Хыялдың тормошҡа ашыуын хәл итеүсе көн. Насарлыҡ тураһында уйлау бәхетһеҙлек килтерергә мөмкин. Иң ҡулайлыһы: үткәндәрҙе иҫкә ал, тарихыңа күҙ һал, шәжәрәңде байҡа. Йәшәлгән ғүмереңде күҙ алдына килтер, үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәфү ит. Шулай итһәң, таҙарынаһың! Айҙың икенсе көнөнөң символы - "хайуан ауыҙы"! Тын ғына ултырып, төрлө ризыҡтарҙы һайлағыҙ. Ҡайны күңеленә ята, шуны ашау яҡшы. Кешегә йомарт һәм яҡшы мөғәмәлә итһәң, үҙеңә оло сауап булыр. 3-сө көндөң символы "юлбарыҫ" икән. Күктә яңы айҙың урағы күренә башлай. Һәммә халыҡ уға иғтибар итә. Был ваҡытта ҡайны бер кеше шикләнеүсән, ғауғасылға әүерелә. Үҙенде һаҡлау өсөн намаҙ уҡы..." Ай тыуғанда бала-сағаға, мал-тыуарға ҡарата айырыуса иғтибарлы булырға кәрәклеген дә иҫкәртә йола. Была шуларҙы ишеткәс, "белмәнем, ишетмәнем", тип ултыра алмайһың, уйланаһың да йоланы тотаһың инде...

...Тамара Рәшит ҡыҙының "Йолоҡ туйы" хаҡында ишеткәне юҡ ине. Бахмут ауыл ағинәйҙәре был турала иғлан иткәс, "йолоҡ" тигән һүҙҙең мәғәнәһен уйларға керешә. "Йолоу", "арындырыу", "ҡотолдороу" тигән синонимдары бар. Нимәнән йолорға була? Әлбиттә, ауырыу-сырхауҙан, ҡурҡыу-шикләнеүҙән, бәлә-ҡазанан. Нисек ҡотолдороп була? Әлбиттә, доға менән, шифалы үлән, саф мөхәббәт һәм хөрмәт хисе менән, моңло йыр-көй һәм ихлас шатлыҡ-бәхет тойғоһо менән! Бахмуттар күрһәткән тамашала һүҙ тап ошо юҫыҡта бара (баш ағинәй Ләлә Батыршина). Әҙәм балаһын иң яман бәләнән - бөгөнгө ҡороғор сирҙән йолоу өсөн нишләргә икән, тигән уй тынғы бирмәй башланы. Бының өсөн ил менән бергә йыйылыу, уртаға һалып һөйләшеү, ил башына килгән бәләгә бергә ҡаршы тороу кәрәк бит. Боронғо "Йолоҡ туйы" йоланы менән ағинәйҙәр ошо оло аҙымға ишаралай, тупик хәлдән сығыу юлы бар икәнен дә күрһәтә түгелме?

...Көйөргәҙе районында башланған Керәүле йылғаһы Күгәрсен яғына сығып, Хоҙайбирҙин ауылы тапҡырында Ағиҙелгә ҡоя. Ошо һыуҙың исеме нимә аңлата? Керәүле - йылғаның борғоланып, уйым-уйым тау араһына кереп китеп, керәкәле-һаҙматлы ерҙәрҙән яңы шишмәләр ҡушып алыуы. Керәүле-Илюшкин ауыл биләмәһе ағинәйҙәре "ғүмер буйы" онотмаҫлыҡ итеп һөйләрлек "Ыуыҙ ҡоймағын тәмләтеү" йолаһын алып килгәйне (баш ағинәй Эльза Васильева). Шул "тәмле" тамашаға, ағинәйҙәрҙең ярышып әйткән һүҙҙәренә тағы ла ҡолаҡ һалайыҡ әле: "Ыуыҙ - һөтимәрҙәрҙең бала тапҡандан һуң әсә имсәгенә төшкән тәүге һөтө. Ыуыҙҙағы витамин, аминокислота, тоҙ, аҡһым ябай һөткә ҡарағанда ун мәртәбә күберәк! Уның бактерияларға ҡаршы көсө бар. Ыуыҙҙы йәш быҙауҙың ашҡаҙаны еңел эшкәртә, әммә артыҡ күп имһә, быҙауҙың ауырыуы ихтимал. Тәбиғәт был ағын да көйләгән - ыуыҙ һөтө аҙ-аҙлап, хатта тамсылап ҡына бүленә. Быҙаулағандан һуң хужабикәләр һыйырҙың ыуыҙын яйлап әйҙереп биҙрәгә һауып ала. Ыуыҙ тәүге өс көндә генә була, артабан һыйырҙың һөтө ҡәҙимге һөткә әйләнә. Ыуыҙ һөтө оҙаҡ һаҡлана, һалҡын һәм ҡараңғы урында ун биш көн торһа ла, шифалы үҙенсәлектәрен юғалтмай. Шуға күрә уны сирле йә йонсоу кешеләргә эсерәләр, бутҡаға, ашҡа ҡушалар, сыр йә эремсек яһайҙар һәм дарыу итеп ашайҙар. Ыуыҙҙа бигерәк тә йәш балаларға, ҡарт кешеләргә кәрәкле матдәләр бар. Һөйкәте, тештәрҙе нығытыу өсөн ыуыҙ һөтө тәҡдим ителә. Ырымы ла бар: "Кем дә кем ыуыҙҙы һанға һуҡмай, уның һаулығы юғала, ыуыҙ һөтөн түгергә йә эткә бирергә ярамай, малдың ҡото китә".

Ыуыҙҙан төрлө ризыҡтар әҙерләнә. Иң киң таралғаны - ыуыҙ ҡоймағы. Һөҙәлгән ыуыҙға йылы һыу өҫтәлә, йомортҡа, он, шәкәр, тоҙ ҡушыла. Барыһы шулай самалап һалына һәм, йылы урында үҙләнеп-ҡабарып сыҡҡас, ҡоймаҡ ҡойоу башлана. Ҡалын суйын табаны еңелсә майлап, ҡоймаҡтың ике яғын да әйләндереп бешерәләр. Элек ут янған оло мейес эсендә ҡоймаҡты әйләндермәй генә бешерә инек, ти өлкәндәр. Ыуыҙға бойҙай, арыш, ҡарабойҙай оно ҡушып бешерәләр. Иң мөһиме, ут талғын һәм тигеҙ булһын, ыуыҙ ҡоймағын көйҙөрөү һис ярамай. Ырымы яман, "һыйырҙың баталы көйә", тиҙәр. Йәғни һыйыр риза булмай. Мал бәрәкәте китә. Ҡоймаҡ майлап табынға ҡуйыла, уны һәр кем ауыҙ итә. Ыуыҙҙан эремсек, бәлеш, хатта торт бешерелә, ә бутҡаға ҡушылған ыуыҙ айырыуса шифалы ризыҡ һанала. Юҡҡамы ни, ыуыҙҙы юлләп-эҙләп йөрөүселәр була. Һәр кем был аштан ҡоро ҡалмаҫҡа тырыша. Ырымы бар: "Кем мохтаж, ыуыҙ ҡоймағы уға барып етергә тейеш. Йәш балалы ҡатындарға, оло йәштәге кешеләргә исемләп бешереп, ыуыҙ ҡоймағын күстәнәс итеп ебәрәләр..." Бына, шул хәтле ырымлаптырып аңлатҡандан һуң, ул ыуыҙ ҡоймағын эҙләп сығып китмәй, нисек түҙәһең?

...Артабан тамашасыларҙың ҡыҙыҡһыныуын тағы ла арттырып, күңелле көй ишетелде. Илкәнәй ауыл биләмәһе ағинәйҙәре "Килен һөйөү" йолаһын әҙерләгән, улар йәш килендең йөрәгенә үтерлек алғыш-теләктәр әйтте (ойоштороусылар Зөлфиә Араптанова менән Гүзәл Мөхәмәтшина). Шуныһы фәһемле, был һүҙҙәр бөгөн ишетһәң дә һәр кемгә ҡағылышлы, бер ҡасан да иҫкерә торған түгел. Бына шунда бит ул йоланың ҡеүәте: "Ырыу-ырыу балаларың ауыл-ауыл ултырһын, көтөү-көтөү мал-тыуарың урамдарҙы тултырһын..." "Килен һөйөү" - бик боронғо дәүерҙән килгән оло йола. Ҡыҙ кейәү йортона күскәс тә, туй ваҡытында уҡ башҡарыла. Йәш килентә хөрмәт һәм ышаныс билдәһе, уны туғандарына, ауылдаштарына, ил инәләренә күрһәтеү был күренештең асылы. Теләктәрен телә-телә һәр кем киленгә үҙ бүләген - биҙәүестәр, яулыҡ-таҫтамалдар, көнкүрештә кәрәк-яраҡ нәмәләр бүләк итә. Киленсәккә һаулыҡ теләү - иң кәрәге, әммә уны был нигеҙҙә ниҙәр көткәнен, бындағы тәртиптәргә нисек яйлашып китергә кәрәклеген дә әйтергә, ҡолағына төшөрөргә тейеш ҡунаҡтар. Тормошто күргән оло инәйҙәр ауырлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа, аҡыл менән йәшәргә өндәй. Әле гөрләтеп йәшәп ятҡан урта быуын килендә үткер, ҡыйыу, уяу-аң булырға саҡыра. "Һәр ялтыраған алтын түгел, һәр йылмайған атаң түгел", тип килендә үҙ дәрәжәһен белергә, бөтә кешегә лә ярарға тырышмаҫҡа өндәү ҙә бар. Илкәнәйҙәрҙең был сығышынан күптәр үҙҙәренә фәһем йыйып ултырғандыр. Кемдер үҙенең йәшлеген иҫкә төшөрһә, икенсе берәү ошо теләк-кәңәштәрҙе тотмауы өсөн үкенес тә кисергәндер.

...Киләһе йола иғлан ителгәс, барыһы ла һиҫкәнде. Шабағыш ауыл биләмәһе ағинәйҙәре "Ҡыҙ бирнәһе йыйыу" тамашаһын тәҡдим итте (баш ағинәй Фәйрүзә Күсәрбаева). Был күренеш шулай уҡ боронғо һәм мәңге лә бөтәсәк түгел. Йәш кешенең донъя көтөргә әҙерләнеүе - иң матур күренеш. "Оло йортҡа ни кәрәк, кесе йортҡа ла шул кәрәк", ти мәҡәл. Ҡыҙының тормошонда файҙаһы тейер әйберҙәрҙе күңеле менән һиҙеп йыя, бирнә һандығын йә сумаҙан тултыра әсәй кеше. Оло йәштәге апай үҙ хәтирәһен теҙә: "Инәйем һандыҡ һатып алды. Бәләкәй генә һандыҡ эсенә тәҙрә селтәре, шаршау һалған, юрған, түшәк, мендәр һалды, аҙаҡ биҙрә, сүмес, таҫтамал да бирҙе. Инәйем шулай ризалатты. Ул һандыҡты мин оҙаҡ тотондом. Инәйем матур тәрбиә бирҙе, эшкә өйрәтте. Иң ҙур бирнә ана шул тәрбиәһе булды..." Икенсеһе ҡушыла: "Ир балаға ла бирнә тейеш. Өй бураттым. Ат, һыйыр, сана, арба - барыһын да йүнәтеп бирҙек уларыбыҙға. Бирнәһеҙ булмай бит тормошта".

...Ошондай донъя һабағы менән тулы кисәләр кемгә оҡшамаһын инде! Тамара ханым иплән кенә залдағы халыҡҡа күҙ һала. Йотлоғоп ҡарап ултырған ағинәйҙәргә ҡарап ҡыуана, етәкселәргә һәм хәбәрселәргә лә бик оҡшауын күреп ғорурлана, ләкин арала туған телде төшөнмәй, сәхнәләге тамашаны аңламай йонсоп, телефонға текләгән йәштәрҙе күреп эсе боша. Барыбер ултырһындар, барыбер бер аңларҙар, тип өмөтләнә...

... Юшатыр буйында ятҡан боронғо Аҡһары ауылы ағинәйҙәре "Кейеҙ баҫыу" йолаһын күрһәтмәк булды (баш ағинәй Гөлсөм Сәлихова, ойоштороусы Гөлиә Мифтахова). Улар һамаҡлап йырлай-йырлай, йөн һалыу, таяҡҡа урау, миндек аша эҫе һыу һибеү һәм тәгәрәтеүҙе һүрәтләнеләр. Аҡ кейеҙҙә ҡасан, кемгә түшәйҙәр, ҡара йөндән баҫылған кейеҙ нindәй шифаға эйә - быны уйынсылар яҡшы белә булып сыҡты.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уй-фекерегеҙҙе үҙгәртеүгә ике аҙым

Көсһөҙләндереүҙең ике ысулы бар, тигәйнек: оҙайлы һәм ҡыҫҡа. Әгәр тормошоғоҙ ығы-зығынан тора йәки һеҙ көслө стресс йоғонтоһонда булһағыҙ, һеҙгә оҙайлы процедура кәрәк. Ә ҡайһы бер кешеләр үҙҙәренең мейе компьютерын бер нисә секундта тоҡандыра ала. Уларға ҡыҫҡа ысул да ярай. Оҙайлы ысулдың өс төрө була.

**Күпселеккә тура килгән ҡыҫҡа ысул:**

Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Тәрән итеп тын алығыҙ һәм яйлап ҡына сығарығыҙ. Тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ. Тағы бер тапҡыр. Хәҙер тормошоғоҙҙағы тыныс күренештәрҙе береһен күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Уларҙың һәр береһенә үтеп инегеҙ, әйтерһең дә һеҙ әлеге мәлдә унда ҡатнашаһығыҙ. Төстәрҙе элек нисек күргәнһегеҙ, шулай күҙаллағыҙ (аҫта миҫал килтерелә). Хәҙер һеҙ мейе компьютерын программалаштырыуға әҙер.

Көсһөҙләнеү - бер нәмә лә эшләмәү сәнғәте. Әммә беҙ һәр ваҡыт нимәлер эшләргә күнеккәнбеҙ, шуға ла көсһөҙләнеү өсөн дә нимәләр эшләргә кәрәк. Иғтибар итегеҙ, ҡыҫҡа йәки оҙон процедура булһынмы, барыбер физик күнекмә ҡатнаша. Улар тәндә көсһөҙләндереү өсөн тәғәйенләнә. Шулай уҡ һәр ерҙә визуалләштереү, хыял булыуы ла иғтибарға лайыҡ. Был аңды көсһөҙләндерә. Әгәр тән нindәйҙер унайһыҙлыҡ тойоп, уйҙар ағышына ҡыҫылһа, аңды көсһөҙләндереү мөмкин түгел.

Шуға ла аңығыҙҙа тыуған образдар мөһим. Уларға етди ҡарарға кәрәк. Бына ҡыҫҡа ысулда ҡулланырға мөмкин булған бер нисә картина:

Сылтырап аҡҡан шишмә.

Зәңгәр күктә йөҙгән болоттар.

Диңгеҙ яры, тулҡын.

Симфоник музыка тыңлау.

Төрлө төҫтәге сәскәләрҙән төрлө еҫтәр аңҡытҡан түтәл.

Төрлө төҫтәге раузалар булған түтәл.

Аквариумда йөҙөүсе тропик балыҡ.

Тымыҡ күл, ә һеҙ ярҙан үҙ шәүләгеҙгә һоҡланып баҡҡанһығыҙ.

Әлбиттә, һеҙ Дантеның Туғыҙынсы күге йәки ожмах баҡсаһы кеүек уйлап сығарылған урындарҙың һөҙөмтәһе булмауын аңлайһығыҙҙыр. Һеҙҙең тәнегеҙ һәм аңығыҙ ҡасандыр күргән картинаға, тағы ла унда булыуын күҙ алдына килтереп, нығырaҡ яуап бирер.

Теге йәки был процедураның физик һәм аң өлөшөн тормошҡа ашырып, һеҙ тормошоғоҙҙо үҙгәртергә тәғәйенләнгән инструкцияларға, мейе компьютерын программалаштырырға әҙер.

**Роберт СТОУН.**



## 26 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.00 Телеканал "Доброе утро".
7.00 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Волейбол. Россия - США. Мужчины.
11.00, 3.00 Новости.
11.30 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Водное поло. Россия - Венгрия. Женщины.
13.00 "Модный приговор". [6+]
14.00, 17.00 Новости с субтитрами.
14.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Фехтование. Сабля. Женщины. Рапира. Мужчины.
17.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Фехтование.
18.00, 0.35 "Время покажет". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Презумпция невиновности". [16+]
23.40 Д/ф Премьера. "Шерлок Холмс и доктор Ватсон. Вместе навсегда". [12+]
2.00 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
10.00 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Баскетбол. 3х3. Женщины. Россия - Румыния. Мужчины. Россия - Япония. Пляжный волейбол. Мужчины. Россия - Австралия.
11.55 "О самом главном". [12+]
13.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
14.00, 17.00, 20.00 Вести.
14.30, 18.40 "60 минут". [12+]
15.50 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ведьма". [12+]
0.40 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Спортивная гимнастика. Мужчины. Команды. Плавание. Предварительные, 1/2 финала.
3.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз.). [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**21.00 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Три мушкетера". По окончании: Новости (на баш.яз.). [12+]**
**3.15 Спектакль "Дочь степей". [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 27 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 8.30, 11.25 Телеканал "Доброе утро".
6.30 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Плавание. Финалы.
11.00, 3.00 Новости.
11.55 "Жить здорово!" [16+]
13.00 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Дзюдо.
14.00, 17.00 Новости с субтитрами.
14.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Дзюдо. Плавание. 1/2 финала.
17.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Плавание. 1/2 финала.
18.00, 0.35 "Время покажет". [16+]
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Презумпция невиновности". [16+]
23.40 Д/ф "Невыносимая легкость бытия". К 85-летию Мариса Лиепы. [12+]
2.00 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

4.45 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Волейбол. Женщины. Россия - Аргентина.
6.45 "Утро России".
9.00, 12.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Синхронные прыжки в воду. Женщины.
12.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.55 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.55, 18.40 "60 минут". [12+]
15.10 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Ведьма". [12+]
0.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Фехтование. Шпага. Команды. Женщины. Тхэквондо.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз.). [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Курай даны". [6+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Три мушкетера". По окончании: Новости (на баш.яз.). . [12+]**
**3.15 Спектакль "Ильгизар + Вера". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 28 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 11.00, 3.00 Новости.
9.55 "Жить здорово!" [16+]
11.25, 18.00, 0.40, 2.40 "Время покажет". [16+]
13.00 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Дзюдо.
14.00 Новости с субтитрами.
14.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Спортивная гимнастика. Мужчины.
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Презумпция невиновности". [16+]
23.40 Д/ф "Князь Владимир - креститель Руси". [12+]
1.40 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.35 "Утро России".
6.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Плавание. Финалы.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 XXXII летние олимпийские игры в токио. Синхронные прыжки в воду. 3 м трамплин. Мужчины.
12.00, 14.00, 20.00 Вести.
12.35 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
14.55 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
16.05 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
17.35 "60 минут". [12+]
19.00 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Пляжный волейбол. Мужчины. Россия - Норвегия.
21.20 Т/с "Ведьма". [12+]
0.40 Т/с "Доктор Анна". [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды. [12+]**
**19.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз.). [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Три мушкетера". По окончании: Новости (на баш.яз.). . [12+]**
**3.15 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 29 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 11.00, 3.00 Новости.
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25 "Модный приговор". [6+]
12.00 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Волейбол. Россия - Китай. Женщины.
14.10, 17.00 Новости с субтитрами.
14.30 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Гандбол. Россия - Венгрия. Женщины. Фехтование. Рапира. Команды. Женщины.
17.15, 0.30, 2.50 "Время покажет". [16+]
19.45 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Презумпция невиновности". [16+]
23.40 Д/ф "Все слова о любви". К 70-летию Натальи Белохвостиковой. [12+]
1.50 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
10.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Стрельба стендовая. Трап. Женщины. Стрельба стендовая. Трап. Мужчины.
12.15, 18.00, 20.00 Вести.
13.00 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Дзюдо. Женщины-78 кг. Мужчины-100 кг. Спортивная гимнастика. Женщины. Абсолютное первенство.
18.40 "60 минут". [12+]
21.20 Т/с "Ведьма". [12+]
0.40 Т/с "Доктор Анна". [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Маргарита Назарова". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 23.00, 5.00 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Уфимское "Времечко". Народные новости". . [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз.). [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**0.00 Х/ф "Три мушкетера". По окончании: Новости (на баш.яз.). . [12+]**
**3.15 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 30 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.20, 11.25, 17.45 "Время покажет". [16+]
11.00 Новости.
12.00 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Водное поло. Россия - США. Женщины.
14.00 Новости с субтитрами.
14.15 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Фехтование. Шпага. Команды. Мужчины. Плавание. 1/2 финала. По окончании - Новости с субтитрами.
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Музыкальный фестиваль "Жара" в Москве. Юбилейный вечер Олега Газманова. [12+]
23.05 Д/ф "Олег Газманов. "7:0 в мою пользу". [16+]
0.10 Д/ф "Виталий Смирнов. Властелин колец". [12+]
1.00 "Наедине со всеми". [16+]
1.45 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.25 "Модный приговор". [6+]
4.15 "Давай поженимся!" [16+]
4.55 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

4.45 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Академическая гребля.
7.00, 8.00 "Утро России".
7.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Регби. Женщины. Россия - Новая Зеландия.
9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. [12+]
10.30, 16.55 "60 минут". [12+]
11.50 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Прыжки на батуте. Женщины. Финал. Синхронные прыжки в воду. Женщины.
14.00, 20.00 Вести.
14.20, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
15.45 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.15 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Волейбол. Мужчины. Россия - Франция.
21.20 Т/с "Ведьма". [12+]
0.40 Х/ф "Ты заплатишь за всё". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Естественный отбор". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [6+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Взлетай!" [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Три мушкетера". По окончании: Новости (на баш.яз.). . [12+]**
**2.30 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 31 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.25 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Плавание. Финалы. Прыжки на батуте. Мужчины.
11.15 Новости с субтитрами.
11.45 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Пляжный волейбол. Россия - Чехия. Мужчины. Дзюдо. 3-е место и финал. Плавание. Финалы.
18.55, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
22.35 Премьера. Международный музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". "Хиты "Русского радио". [12+]
0.35 Д/ф "Игорь Кириллов. Как молоды мы были..." [12+]
1.30 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.10 "Модный приговор". [6+]
4.00 "Давай поженимся!" [16+]
4.40 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
7.30 "По секрету всему свету".
7.55 "Пятеро на одного".
8.45 "Сто к одному".
9.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Стрельба стендовая. Трап. Смешанные команды. Гандбол. Женщины. Россия - Франция. Стрельба. Винтовка из 3-х положений. Женщины.
13.00 Х/ф "Несмешная любовь". [12+]
15.00 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Лёгкая атлетика.
16.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести.
21.00 Х/ф "Без колебаний". [12+]
0.10 Х/ф "Дочки-Матери". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Байтус". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**23.45 Замандаш. [12+]**
**0.00 Х/ф "Похищенная". [16+]**
**1.45 Новости недели (на баш.яз.). [0+]**
**2.30 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!" [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [0+]**

## 1 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Х/ф "Случай в квадрате 36-80". [12+]
6.00 Новости.
7.05 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
7.50 "Часовой". [12+]
8.15 "Видели видео?" [6+]
10.20 Игры XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. Волейбол. Россия - Тунис. Мужчины. Спортивная гимнастика. Финалы.
16.00 Д/ф "Судьба человека". К 95-летию Инны Макаровой. [12+]
17.05 Х/ф "Женщины". [6+]
19.05 "Три аккорда". Новый сезон. Финал. [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
0.05 Д/ф "Суровое море России". [12+]
1.45 "Наедине со всеми". [16+]
2.30 Дневник игр XXXII Олимпиады 2020 г. в Токио. [0+]
3.30 "Модный приговор". [6+]

### РОССИЯ 1

4.40 "Доктор Мясников". [12+]
5.45 "Устами младенца".
6.30 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Плавание. Финалы. Борьба. Квалификация.
9.00 Местное время. Воскресенье.
9.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.25 "Сто к одному".
11.15 "Большая переделка".
12.15 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.20 Х/ф "Ради твоего счастья". [12+]
17.15 XXXII летние Олимпийские игры в Токио. Борьба. Полуфинал. Фехтование. Рапира. Команды. Мужчины.
20.00 Вести.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Х/ф "Дама пик". [16+]
3.10 Х/ф "Несмешная любовь". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 Арт-Курултай. [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.). [0+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Замандаш. [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**17.30 "30 лет на страже здоровья". [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.). [0+]**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Любовь и кухня". [16+]**
**1.15 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**3.45 "Млечный путь". [12+]**

# НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ

**1442 һижри йыл.**

| Июль-август (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (16) дүшәмбе | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 27 (17) шишәмбе | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 28 (18) шаршамбы | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 29 (19) кесе йома | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 30 (20) йома | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 31 (21) шәмбе | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 1 (22) йәкшәмбе | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

***29-сы һандағы сканворд яуаптары.***

**Горизонталь буйынса:** Диалект. Рух. Ҡандала. Айыу. Мөйтән. Алъяпҡыс. Литр. Ташҡын. Балта. Уймаҡ. Ҡорама. Амазонка. Анаконда. Урам. Ашуғ. Мавр. Манн. Урҙа. Ниәт.

**Вертикаль буйынса:** Алабута. Ашъяулыҡ. Абаға. Ҡусҡар. Камзул. Уҡа. Аграновский. Дарман. Аласа. Аш. Таҫтамал. Ҡарағанат. Шаршау. Тараҡ. Наҙан. Атом.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺАҠЛАЙ, ЯҠЛАЙ!

**СПИД һәм йоғошло ауырыуҙарҙы профилактикалау һәм улар менән көрәш буйынса республика үҙәгенең баш табибы, медицина фәндәре кандидаты Рафаэль Яппаров Башҡортостанда прививка эшләтеүселәр араһында "Спутник V" вакцинаһының популяр булыуын белдерә.**

- Беҙ көндән-көн республика халҡының Рәсәйҙә эшләнгән вакцинаға ышаныс кимәле артыуын күрәбеҙ, - ти эксперт. - Мәсәлән, Nature Британия фәнни журналы ла был вакцина тураһында юғары фекерҙә. Абруйлы баҫма баһалауынса, сит илдә эшләнгән AstraZeneca һәм Johnson&Johnson вакциналарына ҡарағанда "Спутник V" юғары һөҙөмтәле һәм хәүефһеҙ булыуын күрһәтә, унан һуң ауыр эҙемтәләр бөтөнләй күҙәтелмәй...

Билдәләнеүенсә, Nature шулай уҡ "Спутниктың" юғары һөҙөмтәлелеген һәм хәүефһеҙлеген уны эшләү технологияһы менән бәйләй, сөнки шундай уҡ вакциналар бер аденовирус ҡуллана, ә Рәсәй препаратында ике төрлө аденовирус ҡулланылған. Был вируслы генетик материалды организмдың уңышлы ҡабул итеүе ихтималлығын арттыра. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, "Спутник V" бер дозаһының һөҙөмтәлелеге 70 проценттан ашып китә һәм шуға күрә вакцинаның бер компонентлы "Спутник Лайт" тигән "туғаны" эшләнә.

"Спутникты" Nature журналы ғына баһаламай. Рафаэль Яппаров билдәләүенсә, ҡәтғи фәнни тикшеренеүҙәргә нигеҙләнгән The Lancet иң оло һәм билдәле абруйлы медицина журналы ла уға юғары баһа бирә.

- "Спутник V" менән вакцинациянан һуң барлыҡҡа килгән антиматдәләр кимәленең коронавирустың яңы мутацияларынан һаҡлауын күрһәтә, - тип билдәләй Рафаэль Яппаров. - Вакцинация хатта сир йоҡторғанда ла уның ауыр үтеүенән һәм үлем осраҡтарынан 100 процентҡа һаҡлай тип ышаныслы әйтә алабыҙ. Беҙгә һәр кем кеше араһында тыныс йөрөһөн һәм ҡурҡмаһын өсөн коллектив иммунитет булдырыу - иң мөһиме.

Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, республикала "Спутник V" прививкаһын эшләтеүселәр араһында уның ауыр эҙемтәләре теркәлмәгән, шул уҡ ваҡытта ковид-госпиталдәрҙә ауыр сирлеләр араһында коронавирусҡа ҡаршы вакцинация эшләткән бер генә кеше лә юҡ.

Әйткәндәй, "Спутник V" - донъяла коронавирустан теркәлгән иң беренсе вакцина. Уны Гамалея исемендәге үҙәк ғалимдары эшләй. Рәсәй препаратын донъяның 67 иле таный. Аргентинала, Венесуэлала, Төркиәлә уны ҡулланыусылар күләме арта.

**Гүзәл РЕАНОВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Гөлзиә Йәмилева, Рәйлә Ишкилдина, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Миңзәлә Хәйруллина, Зөлфиә Ваһапова, Рәис Насыров, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Сания Смаҡова, Арыҫлан ауылынан Р. Камалетдинова, **Дүртөйлө районы** Гөлөк ауылынан Мәүлимә Мөфтиева, Иҫке Байыш ауылынан Рәшиҙә Зиннәтуллина, **Ғафури районы** Юлыҡ ауылынан Римма Рафикова, Мәндем ауылынан Фәниә Янмырҙина, **Нуриман районы** Иҫке Исай ауылынан Нәфисә Бәҙретдинова, **Өфө ҡалаһынан** Рәсимә Әүхәтова, Хәлисә Юлбирҙина, **Сибай ҡалаһынан** Роза Әхмәтшина, Айгөл Ғәбәйҙуллина, Гөлгөнә Муллаәхмәтова, Рәзилә Нәбиуллина, Владислав Хазеев, Вәсилә Хәсәнова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бай бәхетле оҙон ғүмер, эштәрегеҙҙә уңыштар, яҡшы уй-ниәттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын, ҡыуаныс-шатлыҡтарға төрөнөп йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ҠАРАБОЙҘАЙ

**Ҡарабойҙай баш мейеһенә, күҙҙең селтәрле шекәрәһенә ҡан һауыуҙы иҫкәртеү, скарлатина, ҡыҙылса, ревматизм, склероз ауырыуҙарын дауаларға ярҙам итә.**

***Ҡалҡан биҙ ауырыуы.*** Берәр стакан ҡарабойҙай ярмаһы һәм таҙартылған әстерхан сәтләүеген алырға. Ҡарабойҙайҙы тартырға, әстерхан сәтләүеген ваҡларға һәм 1 стакан ҡарабойҙай балына ҡушып бутарға. Көн дауамында өләштәргә бүлеп, ошо ҡатышманы ашап бөтөрөргә. Был көндә сәй йәки һыу эсергә мөмкин, әммә башҡа бер нәмә лә ашарға ярамай. Дауаланыу осоро - 2 ай дауамында аҙнаға бер тапҡыр.

***Астма, бронхит.*** 2-3 ҡалаҡ ҡарабойҙай сәскәһенә 0,5 л ҡайнар һыу ҡойорға, термоста ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне эҫе көйөнсә стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә көн дауамында 4-6 тапҡыр ваҡ ҡына йотомдар менән эсергә. Астма өйәнәге тотҡанда сәғәт һайын эсергә.

***Анемия.*** Ҡарабойҙай ярмаһын табала көйҙөрмәй генә ҡыҙҙырырға. Ҡәһүә тарткыс аша үткәрергә. 1 стакан ҡайнатылған йылы һөткә 2 ҡалаҡ һалырға, көнөнә 3 тапҡыр берәр стаканлап эсергә. Ҡорөндә гемоглобин кәрәкле кимәлгә тиклем күтәреләсәк. Бешерелгән ҡарабойҙай файҙалы түгел.

***Склероз.*** 1 ҡалаҡ ҡарабойҙай сәскәһен ҡайнар һыуҙа бешерергә, 10-15 минут йылыла тоторға, сәй итеп эсергә. Гипертония осрағында ҡан баҫымын күтәреүсе үҫемлектәр менән аралаштырып ҡулланырға.

Ҡарабойҙайҙың йәш үҫентеләре һәм сәскәләре бер аҙ ағыулы. Әммә киптергән ваҡытта уларҙың ағыуы бөтә. Шулай уҡ ҡандың ойошоусанлығы көслө булған осраҡта ҡарабойҙай сәскәһен ҡулланырға рөхсәт ителмәй.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# КӨЙӨРГӘҘЕЛӘ - БЕР ҒҮМЕР



**(Башы 12-13-сө биттәрҙә).**

...Көйөргәҙеләге Яҡут ауылы хәҙер телдән төшмәй, тоҙло күле һәм батҡағы менән ул атаҡлы Тоҙ күленән дә файҙалыраҡ, тигәндәр бар. Бәлки, шулайҙыр, бер үк башҡорт еренең тоҙо бит ул. Ә бына яҡуттар тоттолар ҙа "Орсоҡ өмәһен" сәхнәгә сығарҙылар (баш ағинәй Хәмдиә Рәшитова, сәхнәгә әҙерләүсе Рәмзиә Әбйәлилова). Ауылда һәр төрлө мәҙәни саралар булып тора. Орсоҡ өмәһенә йыйылған ағинәйҙәр яҙғы баҡта йөндө иң башта ойоҡ-бейәләйгә етерлек итеп иләп ала, ә кемдер свитер, кемдер йөн сапан бәйләп киймәк. Ҡайһы берәүҙәр бер ҡулдан тигеҙ генә иләтеп алып, аҫалы балаҫлыҡ әҙерләй. Эш араһында мәрәкәләшеп тә китәләр, моңло йырҙар ҙа ҡушыла. Яҡут ауылынан йәйҙәрен кеше өҙөлмәй. Әллә ҡайҙарҙан быуындары һыҙлап, батҡаҡ шифаһын юллап килгәндәргә йылы йөн ҡушаҡ, көртөй, нәскиҙәр бәйләп тә ҡуяһы бар бит әле. "Яҡуттарым-аҡыҡтарым, тип кенә торам уңғандарҙы, улар - Фәниә Буранова, Әҡлимә Заһитова, Шәүрә Әлибаева, Гөлфиә Әбйәлилова, Айгөл Ғәббәсова - иң әүҙем ярҙамсыларым", - ти ойоштороусы Рәмзиә.

... Көйөргәҙе үҙәгендәге "Бер осрашыу - бер ғүмер" йыйынында Яҡшымбәттәрҙең "Йолоҡ туйы" йолаһы ла бер тынала геүләп үтеп китте. Уларҙың бик дәртле, сағыу тауышлы йырҙары хәтерҙә уйылып ҡалды.

Тамара Рәшит ҡыҙы ағинәйҙәрҙең ихлас тамашаларына күңеле күл булып, бөтәһенә лә рәхмәт әйтеп бөтә алмай ултырҙы. Көйөргәҙе районы етәксеһе Юлай Ильясовтың да туҡтауһыҙ кинәнеп йылмайыуына ҡарағанда, уның йөрәге лә "бер ғүмерлек" шатлыҡ менән тулы ине. Хужа кешенең ихлас тамашасы була белеүе, кисә тамамланғансы ихтирам менән ҡул сабып залда ултырыуы - шаҡтай һирәк күренеш. Көйөргәҙе хакимиәте башлығы был яҡтан ыңғай етәкселәрҙең береһе. Ул - халыҡ менән халыҡ араһында йөрөп эшләй торғандарҙан.

Тамара ханым ағинәйҙәр менән күптән эшләй, шуға үҙенең йөрәгенән сыҡҡан тағы бер хыял уғының сәпкә тейгәнен һөйөнсөләне: "Беҙҙең ағинәйҙәр - төрлө милләт ҡатын-ҡыҙҙары, - тине ул. - Районда башҡорттарҙың ғына дүрт ырыуы йәшәй: бошман-ҡыпсаҡ, тамъян, бөрйән һәм үҫәргәндәр. Бер халыҡ, бер башҡорт, тиһәк тә, уларҙың холҡ-фиғеле лә, йолалары ла айырыла. Шулай уҡ беҙҙең ағинәйҙәргә татарҙар йәшәгән ауылдар, сыуаштар йәшәгән төбәктәр ҙә ҡушыла. Барыһы ла ағинәйлектең халыҡҡа ни саҡлы кәрәкле һәм алдынғы икәнен күрә һәм эйәрә. Уларҙың ағинәйҙәр менән бергә йөрөгәһө килә. Был насар түгел бит. Кеше яҡшыны таный. Минең хыялым - бөтә милләттәр ҙә башҡорт йолалары менән йәшәһен. Отолмаҫтар ине, билләһи!"

**...Тамаша аҙағында Көйөргәҙе районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе ярҙам күрһәткән бағыусылар депутат Розалия Хисмәтуллина, "ЮжУрал Ойл" етәксеһе Зиннур Исхаҡов, Көйөргәҙе һөт эшкәртеү заводы директоры Александр Дьяченко, шәхси эшҡыуарҙар Сергей Савенков, Геннадий Проценко, Вячеслав Гречушкин, Илшат Булатовтарға, баһалама төркөмө ағзалары Фәнит Моратбаҡыев, Юлай Ишмөхәмәтов, Вера Фросина, Мәрйәм Юлдыбаева, Ирина Барановскаяларға рәхмәт һүҙҙәрен юлланы: "Районыбыҙ өсөн бик күп файҙалы эштәр башҡарған ошо шәхестәргә ил рәхмәте, йола рәхмәте, - тине Тамара Рәшит ҡыҙы. - Улар ағинәйҙәр менән һәр ваҡыт бергә. Берҙәмлек - беҙҙең йола. Ошо йоланы тотһаҡ, отолмабыҙ, шәйт!"**

**Сәрүәр СУРИНА.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

## ХӘКИМЙӘН ХАҠЫНДА...

**Мәскәүҙәге Ветерандар һәм Хәрби көстәр йортонда ҡырғыҙ режиссеры Абдиша Айылчиевтың башҡорттоң бер батырына арналған "144-се бейеклек" тип аталған тарихи-документаль фильмы күрһәтелде, тип хәбәр итте баш ҡала башҡорттары ҡоролтайы.**

Фильм 8 милләт вәкиленең, шул иҫәптән башҡорт Хәкимйән Әхмәтғәлин менән ҡырғыҙ Тагарай Тоҡобаев та булған 11 һалдат төркөмөнөң батырлығы хаҡында һөйләй. Картинаның эпизодтары Мәскәүҙә, Сыуаштан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Латвияла һәм Башҡортостандың Учалы районында төшөрөлгән. Башҡортостанға фильм авторҙары Хәкимйән Әхмәтғәлин тураһында архив мәғлүмәттәре һәм фотоһүрәттәрен юллап килгән. Хәкимйән Әхмәтғәлин 1923 йылдың 15 июлендә Учалы районы Сәфәр ауылында тыуған. 1942 йылда һуғышҡа китә, Курск дуғаһы, Смоленщинала һәм Балтик буйҙары территорияһындағы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1944 йылдың июлендә араларында яҡташыбыҙ ҙа булған разведчиктар отряды Суну-пляв ауылынан алыҫ түгел ерҙә фашистар менән һуңғы алышҡа сыға. Көстәр тигеҙ булмаған был бәрелештәге ҡаһарманлыҡтары өсөн ошо төркөмдәге разведчиктарҙың бөтәһенә лә үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Хәкимйән Рәхимйән улы Әхмәтғәлин Латвияның Лудза ҡалаһындағы мемориаль паркта ерләнгән.

## ЛЕГЕНДАР ҒӘФҮР

**Мәктәп дәреслектәренән осоусы Девятаев тураһында уҡып беләбеҙ. Пленға төшкән совет осоусыһы Михаил Девятаев фашистарҙың йәшерен полигонынан үҙе менән тағы бер нисә тотҡондо ла ултыртып, немец самолетында ҡаса. Быны өсөн уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.**

Ә бына ошондай уҡ тәүге ҡаһарманлыҡ батыр яҡташыбыҙ тарафынан эшләнә. 1942 йылда Ғәфүр Шарыгин пленадан дошман бомбардировщигына ултырып ҡаса. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, Ғәфүр Саҙришәрип улын Тыуған илендә награда түгел, ә трибунал көтә. Тыуған яҡты өйрәнеүсе, Яңауыл районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рафаэль Яхин үҙенең ерҙәше Ғәфүр Шарыгиндың тормош юлын өйрәнеү менән күптән шөғөлләнә. Уның һөйләүенсә, легендар яҡташыбыҙ яҙмышы шулай ауыр ғәҙелһеҙлек келәймәһенә дусар ителә, ләкин ҡасан да булһа легендар яугирҙың исеме аҡланыр, тип өмөт ителә.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТЫРЫШҠАН ТАРПАЙҒАН, иренгән янтайған

Эш, тауға тәгәрәткән таш һымаҡ, яҡшылыҡ ҡылһаң да, яманлыҡ ҡылһаң да - үҙеңә ҡайтыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешенең тыуыуы һәм үлеүе, аҡсаһынан йәки башҡа мөлкәтенән яҙыуы ҡыҙғаныс түгел, сөнки быларҙың береһе лә уның үҙенеке түгел. Уның үҙенең байлығынан - кешелек дәрәжәһенән яҙыуы ҡыҙғаныс.

**(Эпиктет).**

Тоғролоҡ - ул үҙ вәғәҙәңдә тороу.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Изге кеше, ул хатта ҡол булһа ла - ирекле, яуыз кеше, ул хатта батша булһа ла - ҡол.

**(Августин).**

Революционерҙар революция яһамай. Улар бары тик властың урамда ятҡанын шәйләй һәм шуны күтәреп кенә ала.

**(Ханна Арендт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡарт атай үҙенең өлкән улы менән шәп ағымлы йылға буйына килә һәм һыу инеп сығырға була. Мауығып китеп, ул менән атай ярҙан алыҫыраҡ йөҙөп китәләр һәм йылғаның иң шәп аҡҡан өйөрөлтмәкле урынына барып сығалар. Ағым уларҙы өйөрөлтөп-өйөрөлтөп ағыҙып алып китә. Ағым менән көрәшкән егет өйөрөлтмәккә эләккән атаһының сал башын ғына күреп ҡала. "Бөттө, атайым һыуға батты инде!" - тигән уй ғына ялтлап үтә башынан. Егет саҡ-саҡ батмайынса ҡалып, хәлдән тайып, көскә ярға килеп сыға. Ярға аяҡ баҫыу менән һыу төбөнә киткән атаһын иҫләп, ҡайғыға бирелергә лә өлгөрмәй, ҡаршыһында бер ни булмағандай кейемен һығып ултырған атаһын күреп ҡала.**

**- Был мөмкин түгел! - тип ҡысҡырып ебәрә улы. - Мин һинән йәшерәк һәм көслөрәкмен, шулай булһа ла ағымды көскә еңдем, шул тиклем арыным. Ә һин бер ни булмағандай ярҙа ултыраһың, нисек ҡотолдоң?**

**- Эй, улым, - ти ҡарт атай, - шул аҡылды һис ҡасан онотма: ниндәйҙер ауыр хәл килеп тыуа һәм был ауырлыҡтан еңел генә ҡотолоп булмаясағын, уның һинән көслө икәнен аңлайһың икән, тимәк, уға ҡаршы көрәшеп, көсөңдө әрәм итергә, ҡаршы торорға ярамай. Быйндай осраҡта көсөңдө һаҡлау һәм уңайлы мәлде көтөү яҡшы...**

**- Бында был аҡылдың ни ҡыҫылышы бар? - тип аптырай улы атаһының ни әйтергә теләгәнен аңламайынса.**

**- Ҡыҫылышы бар шул. Бына мин дә ағымға ҡаршы торманым, ә уға үҙемде йылға төбөнә алып төшөүгә юл ҡуйҙым. Йылға төбөнә төшкәс, аяҡтарымды терәп, бар көсөмә ырғылдым да, һыу өйөрөлгән ыңғайы өҫкә күтәрелдем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
23 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 810